ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Кискә Өфө
20-26 март (буранай) 2026
№ 11 (1206)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Кемдер берәү әрләшә башлағас, әрләнеүсе ситкә китә. Әрләшеүсе уның артынан бара һәм: "Ниңә китәһең?" - тип һорай. Әрләнеүсе яуап бирә: "Һинең хоҡуғың - әрләшеү, ә минеке - тыңламау". Берәүгә һорау бирәләр. Ул яуап бирә алмай һәм әрләшә башлай. Уға шулай тип әйтәләр: "Әлбиттә, һиңә һорауға яуап биреүгә ҡарағанда, үҙ наҙанлығыңды йәшереү өсөн әрләшеү еңелерәк". Яман һүҙләләр - ҡырағай хайуандың иң хәтәре, ялағай һүҙләләр - йорт хайуандарының иң ҡурҡынысы.*

*(Диоген).*

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Осҡонло уйын!**



6

**Әсәлек тойғоһо...** кешелекте һаҡлай килә



10

**Ул үҙ йөрәгенә...** бөтә донъяны һыйҙыра ала



11

**Уҡытыусы - милләтен алға әйҙәүсе**



13

@kiskeufa
Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Хискә тулы яҙ миҙгеленең 21 мартында Бөтә донъя шиғриәт көнө билдәләнә. Ә һеҙҙең тормошоғоҙҙа шиғриәткә урын бармы? Ғөмүмән, бөгөнгө технологиялар заманында шиғриәткә мохтажлыҡ ҡалдымы икән?***

***Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, шағир:*** Беҙ ғаиләлә ун бер бала үҫтек, һәр ҡайһыбыҙ ул ваҡыттарҙа алдырған "Совет Башҡортостаны", "Ленинсы" баҫмаларында сыҡҡан шиғырҙарҙы яратып уҡып, ятлап ала инек. Унан алдан иғлан яҙып элеп, кистәрен атай-әсәй алдында концерт ҡуябыҙ: бер апайым конферансье, кемдер йырлай, кемдер бейей. Үҫмер саҡҡа тиклем һаҡау булғанлығымдан, минең төп номерым - ул көлөү булды. Бөтә өй эсе гөр килер ине. Һәр беребеҙ, кәм тигәндә, йөҙәр шиғыр беләбеҙ, әле лә осрашҡан һайын табын артында Тимер Арыҫландың, Мостай Кәрим, Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич, Рәми Ғариповтарҙың шиғырҙарын һөйләйбеҙ. Ул, ғөмүмән, беҙҙең ғаиләбеҙҙең йолаһы.

Шуға күрә лә минең шиғыр яҙып китеүем дә осраҡлы ғына булмағандыр. Мин уларҙы күңел талабы ҡушҡанса, яҙмайынса булдыра алмаған өсөн яҙам. Иң тәүҙә Ауыл хужалығы институтында механика факультетында уҡып йөрөгән кеше инем, әммә лирика еңде, бер йылдан хатамды төҙәтеп, педагогия институтының филология факультетына документтарымды алып барып тапшырҙым. Атайым теләгән һөнәр эйәһе булып булманы.

Хатта шиғыр уҡырлыҡ бер генә кеше лә ҡалмаған ваҡытта ла шиғриәт кәрәк, сөнки туған телебеҙҙең бөтә булған күркәмлеге, матурлығы, рухыбыҙҙың юғарылығы тап шунда сағыла. Шиғырҙарҙы аудио, видео форматта күберәк итеп яҙып ҡалдырырға кәрәк. Туған телебеҙҙә һөйләшеүселәр һаны кәмегәндән кәмей бара. Шул яҙмалар буйынса телде тергеҙергә кәрәк замандар етеүе ихтимал. Әгәр матур шиғырҙарҙы күберәк интернет селтәренә индереп, һаҡлап ҡалдырһаҡ, ул туған телебеҙҙе кире аяҡҡа баҫтырыу өсөн хеҙмәт итәсәк.

Юҡҡа ғына Ҡөрьән-Кәрим дә бит шиғри тел менән яҙылмаған! Ниндәйҙер кимәлдә шағирҙарға дәғүә лә белдерелә, улар халыҡты аҙғын юлға әйҙәйҙәр, тип тә әйтелә унда. Әммә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, шиғриәт беҙгә һәр ваҡытта ла кәрәк буласаҡ. Беҙ шиғри йәнле халыҡ. Туҡай ҙа бит юҡҡа ғына халыҡты ижадсы тимәгән. "Айыу урманды һаҡлай, урман айыуҙы һаҡлай" ти халыҡ мәҡәле, тимәк, тел булһа, шиғриәт йәшәйәсәк, шиғриәт булһа - тел йәшәйәсәк. Улар бер-береһенән айырылғыһыҙ төшөнсәләр.

## БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

ҘУР ҺӘМ ТАТЫУ ҒАИЛӘ ЙЫЛЫ 2026 ГОД БОЛЬШОЙ И ДРУЖНОЙ СЕМЬИ

# ҮҘ ЙЫРЫБЫҘҘЫ ЙЫРЛАП ЙӘШӘЙБЕҘ -

## был беҙҙең Рәхимовтарҙың төп йолаһы



**Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы, Бөтә Рәсәй һәм республика конкурстары лауреаты, "Башҡорт йыры" конкурсының телевизион фестивале еңеүсеһе Рим Рәхимовты беҙ опера өлкәһендә егелеп эшләгән сәхнә маһирҙарының береһе тип беләбеҙ. Ул үҙенең асыштары менән кемдәрҙелер хайран итә, кемдәрҙелер яңы офоҡтарға әйҙәй. Былтыр Халыҡтар берҙәмлеге көнөндә "Уралым" йырын төрки телдәрендә яңғыратты. Төркмәнстанда үткән Халыҡ-ара "Музыка мира" фестивалендә башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарҙы. Ғөмүмән, Рәхимовтар йыр-моң сәнғәтенә мөкиббән киткән заттар. Римдең ике ағаһы - Роберт менән Ринат Рәхимовтар шулай уҡ тиҫтә йылдар опера сәнғәтенә тоғро хеҙмәт итәләр. Бөгөн Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрын Өфө башҡорттары - Рәхимовтарҙан тыш күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын.**

**Рим Рәхимовтың ҡатыны Айым Вәлмөхәмәтова-Рәхимова - шулай уҡ юғары белемле музыкант, вокал буйынса уҡытыусы, Башҡортостан юлдаш телеканалының "Тамыр" студияһындағы "МузКәрәҙ" программаһын алып бара. Йыр сәнғәтенә, туған телгә булған мөхәббәтте улар үҙҙәренең балаларына ла бирергә тырыша. Бөгөнгө әңгәмәбеҙ - ошо матур ғаилә ағзалары менән.**

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

12+

ҠЫҪҠАСА

# ИНТЕРНЕТЛЫ БУЛАЛАР...

**Башҡортостандың тораҡ пункттарына мобиль интернет үткәрелә. Быйыл 15 меңгә яҡын кеше йәшәгән тағы ла 40 тораҡ пунктта мобиль бәйләнеш һәм интернет булдырыла.** Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт идара итеүенең һанлы үҫеш министрлығынан хәбәр иттеләр. "Мәғлүмәттәр иҡтисады һәм дәүләттең һанлы трансформацияһы" милли проекты сиктәрендә ҙур операторҙарҙың береһе уларҙа үҙенең база станцияларын урынлаштыра. Ведомство мәғлүмәттәренә ярашлы, Баҡалыға - биш, Фёдоровкаға - өс, Дәүләкәнгә һәм Бөрөгә - дүрт, Туймазы, Ауырғазы, Бөрйән, Баймаҡ райондарына ике локация тура килә, ә Белорет, Иглин, Көйөргәҙе, Мәләүез, Әбйәлил, Ҡыйғы, Благовар, Салауат, Дүртөйлә, Ғафури, Дыуан, Борай, Балтас, Балаҡатай, Архангел, Күгәрсен районларында бер бәләкәй ауылға интернет үткәрелә. Тотороҡло бәйләнеш һәм интернет ярҙамында алыҫ ауылдарҙа йәшәгән халыҡ дәүләт хеҙмәттәре, медиа, маркетплейстар менән файҙаланыу мөмкинлегенә эйә була, тип билдәләне Башҡортостандың һанлы үҫеш министры Геннадий Разумикин.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары яңы һөнәри байрам - Башҡортостан Республикаһының Опека һәм попечителлек органы хеҙмәткәрҙәре көнөн булдырыу тураһында закон проектын ҡарарға ниәтләй.** Уны йыл һайын 12 мартта билдәләү планлаштырыла. Республика парламенты спикеры Константин Толкачев хәбәр итеүенсә, 1891 йылдың тап ошо көнөндә Рәсәй империяһында опека һәм попечителлек институтына нигеҙ һалған "уллыҡҡа алынған һәм законлаштырылған балалар тураһында" закон ҡабул ителә. Һөнәри байрам - көн һайын балаларҙы яҡлау һәм ҡатмарлы тормош хәлендә ҡалған өлкәндәргә ярҙам күрһәтеү буйынса ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итеү менән шөғөлләнгән кешеләрҙе ҡаҙаныштарын таныу билдәһе ул. "Бөгөн Башҡортостанда 70 опека һәм попечителлек бүлеге бар, уларҙа 380 белгес эшләй, - тип һөйләне Константин Толкачев. - Уларҙың эше юридик белемдән тыш, күңел һалып башҡарыуҙы талап итә". Закон проектын парламенттың киләһе пленар ултырышында тәүге уҡыуҙа ҡабул итеү планлаштырыла.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары "Башҡортостан Республикаһында торлаҡ мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында" законға үҙгәрештәр индерергә ниәтләй.** Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, иҫке йорттарҙа йәшәгән граждандарҙың күсенгән ваҡытта алмашҡа торлаҡ йәки аҡсалата компенсация алыу хоҡуғы бар. "Һайлау хоҡуғы граждандарға үҙҙәренең тормош шарттарына һәм пландарына тура килгән ҡарар ҡабул итергә мөмкинлек бирә. Мәҫәлән, аҡсалата компенсацияны икенсе ҡалаға күсенеүгә йүнәлтергә йәки ипотекаға торлаҡ һатып алғанда тәүге взнос итеп файҙаланырға була", - тип билдәләне Дәүләт Йыйылышы рәйесе. Аҡсалата компенсация күләмен билдәләү һәм түләү республика Хөкүмәтенә йөкмәтелә. Уны алыу өсөн ғаилә ағзаларының яҙма ризалығы кәрәк. Закон проекты йортто һүтеү йәки ошо йорт урынлашҡан ер участкаһын тартып алыу менән бәйле граждандарҙы торлаҡтан күсереүгә ҡағыла.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# БЫНДА ЛА ЯИ КҮҘӘТӘ

**Башҡортостанда спорт тармағын һанлы үҙгәртеүҙең икенсе этабы башланды. Хәҙер "аҡыллы" технологиялар туранан-тура стадиондарға, спорт комплекстарына һәм спорт һарайҙарына килә. Модернизацияның төп элементы булып интеллектуаль камералар тора.**

Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә ошо турала ҙур һөйләшеү булды. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов спорт объекттарына яһалма интеллектлы камералар ҡуйыу тураһында һөйләне һәм уларҙың нисек эшләгәнен күрһәтте. "Беҙҙең киләһе аҙым - халыҡ шөғөлләнгән спорт объекттарында яһалма интеллект технологияларын индереү. Яңы ҡорамалдар яҙҙырыуҙы алып барыу ғына түгел, ә хәлде анализлау һәләтенә эйә. Камералар автоматик рәүештә килеүселәр һанын иҫәпләй, яңы килгән кешеләрҙе даими йөрөгәндәрҙән айыра белә, был залдарҙың реаль тулыуын күҙәтергә мөмкинлек бирә. Киләсәктә система ата-әсәләргә баланың имен-аман күнекмәләргә килеүе тураһында белдереү ебәрә аласаҡ", - тине Руслан Хәбибов.

Айырыуса хәүефһеҙлеккә ҙур иғтибар бирелә: технологиялар штаттан тыш хәлдәргә тиҙ яуап биреүҙе тәьмин итә. Пилот объекттарында ике типтағы камералар ҡуйыла: интеллектуаль, улар кешеләрҙе таныу (ҡануниәтте ҡәтғи үтәү менән) һәм хәрәкәттәрҙе күҙәтеү менән шөғөлләнә, икенселәре - тәүлек әйләнәһенә күҙәтеү алып барыусы һәм теләһә ниндәй ваҡиғаларҙы теркәүсе камералар. Бөтә мәғлүмәттәр республика Спорт министрлығының берҙәм һанлы платформаһына киләсәк. Был майҙансыҡтарҙа теләһә ҡайһы ваҡытта барған ваҡиғаларҙың тулы һәм объектив картинаһын бирә. Яңы индерелгән технологияның һөҙөмтәлелеген тәүге мәғлүмәттәр раҫлай. Мәҫәлән, аналитика бер аҙна эсендә Өфөләге Көрәш һарайына - биш меңдән ашыу, ә Фехтование үҙәгенә 1,2 мең самаһы кеше килеүен күрһәткән. Күнекмәләрҙең уртаса оҙайлығы 2-3 сәғәт тәшкил итә. Система шулай уҡ аудиторияның енес һәм йәш составын теүәл иҫәпкә алырға мөмкинлек бирә. "Элек бындай мәғлүмәт йыйыу аҙналар буйына дауам итте, хәҙер мәғлүмәттәр автоматик рәүештә яңыртыла һәм шунда уҡ онлайн ҡулланыуға тапшырыла. Беҙҙең система килеүселәрҙе теүәл иҫәпкә алып ҡына ҡалмай, тренерҙар һәм судьялар өсөн мөһим мәлдәрҙе асыҡлап, күнекмәләр һәм ярыштар үткәреүҙе өҙлөкһөҙ контролдә тота", - тине Руслан Хәбибов.

# ТОРМОШ СИФАТЫ ТУРАҺЫНДА

**Республика менән идара итеү үҙәгендә граждандарҙың тормош сифатын күтәреү мәсьәләләре буйынса Башҡортостан Башлығы эргәһендәге Совет ултырышы үтте.**

Совет эшмәкәрлеге халыҡтың тормошона ҡағылған төп өлкәләрҙе үҙ эсенә ала - һаулыҡ һаҡлау, белем биреү, мәшғүллек, социаль яҡлау, торлаҡ һәм инфраструктура, инклюзия, ҡулланыу, экология, дәүләт хеҙмәттәре һәм сервис, хәүефһеҙлек... Һәр йүнәлеш аныҡ министрлыҡҡа тәғәйенләнгән. 2025 йыл һөҙөмтәһе буйынса республика ил төбәктәре араһында бөтә күрһәткестәр нигеҙендә Сифат рейтингында тәүге тиҫтә иҫәбенә ингән. Атап әйткәндә, Совет ойоштороланда алып Башҡортостан ҡырҡынсы урындан туғыҙынсы урынға күтәрелә алған.

Ултырышта онлайн режимында Стратегик инициативалар агентлығы генераль директорының беренсе урынбаҫары Игорь Олегович Карачин, республиканың министрлыҡ һәм ведомство, социаль сәйәсәт өлкәһендәге үҫтереү институттары вәкилдәре, муниципалитет башлыҡтары ҡатнашты. Игорь Карачин әйтеүенсә, рейтингтарҙың һәр береһе беҙҙең тормошобоҙҙо баһалауҙы, йәмғиәт торошон, кәйефен һиҙемләүсе барометр менән бер. Ул республиканың идара итеү эшмәкәрлегенә юғары баһа бирҙе һәм күп аспекттарҙа пионер булып сығыш яһауын, ә "Каршылыҡтарҙы емереп", "Кескәй принцессалар балы" кеүек проекттарҙың Рәсәйҙә таралыу тәжрибәһен билдәләне. Республикала байтаҡ компанияларҙың милли инклюзив килешеүҙәргә ҡушылыуы, реабилитация һәм абилитация моделле программаларының эш башлауы, балалы ғаиләләргә, ауырлы ҡатындарға, демография мәсьәләләренә иғтибарҙың арттырылыуы милли рейтингты үҫтереүгә, эш һөҙөмтәләлегенә ыңғайлы кесәйтә. Ауыл һәм ҡалаларҙа заманса йәмғәтселек биләмәләрен булдырыу, медицина хеҙмәтләндереүен һәм табиптарҙың эш шарттарын яҡшыртыу, Өфөлә "Салют" реабилитация комплексын асыу халыҡ иғтибарынан ситтә ҡалманы. Игорь Карачин республиканың идара итеүсе командаһының социаль сәйәсәтте тормошҡа ашырыуҙа системалы эш алып барыуы һөҙөмтәһендә алдыңғы позицияға сығыуын, күп күрһәткестәрҙе яҡшыртыуын һәм эш тәжрибәһе менән йомарт уртаҡлашыуын билдәләне.

# ТӨҘӨК МАЙҘАНДАР

**Белгестәр 2026 йылда "Тормош өсөн инфраструктура" милли проекты буйынса Башҡортостанда 152 йәмәғәт майҙанын төҙөкләндерәсәк, тип хәбәр иттеләр төбәктең Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығынан.**




Атап әйткәндә, Михайловка ауылында Ленин урамындағы сквер үҙгәртеләсәк. Унда асфальт түшәйәсәктәр, балалар һәм спорт майҙансыҡтары төҙөйәсәктәр, эскәмйәләр һәм урналар ҡуясаҡтар. Шулай уҡ белгестәр яҡтыртыу һәм видеокүҙәтеү системаларын монтажлаясаҡ, велосипед парковкаларын, саралар үткәреү өсөн сәхнә төҙөйәсәк һәм йәшелләндереү үткәрәсәк. Проектты көҙгә тамамларға тейештәр. Тағы ла эштәр Приют ҡасабаһындағы "Йәштәр" скверында уҙғарыласаҡ. Элек унда йәйәүлеләр һуҡмағы һәм баскетбол, волейбол, мини-футбол һәм ҙур теннис уйындары өсөн универсаль спорт майҙаны барлыҡҡа килгән. Хәҙер оҫталарға памп-трек һәм өҫтәл теннисы һөйөүселәр өсөн айырым майҙансыҡ йыһазландырырға, бәләкәй архитектура формаларын ҡуйырға кәрәк.

"Тормош өсөн инфраструктура" милли проектының маҡсаты - тораҡ пункттарҙы комплекслы үҫтереү. Был торлаҡ һәм юлдар төҙөү һәм ремонтлау, йәмәғәт һәм ихата киңлектәрен төҙөкләндереү, бөтә социаль һәм коммуналь инфраструктураны булдырыу һәм яңыртыу, хәрәкәт итеүсе составты яңыртыу иҫәбенә йәмәғәт транспортының уңайлы маршруттары һаныным артыуы. Яңыртылған милли проекттар РФ Президенты Владимир Путин ҡарары буйынса 2025 йылдан тормошҡа ашырыла.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Күптән түгел Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө - Ырымбур трассаһы аша машинала үтте һәм юл буйында яҡтыртыуҙың булмауын тәнкитләне. Шул саҡта, әгәр мәсьәлә оператив хәл ителмәһә, РФ транспорт министрына йәки прокуратураға мөрәжәғәт итәсәген белдерҙе. Һәм бына Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә Өфө - Ырымбур трассаһында даими эшләгән яҡтыртыуҙың ҡасан барлыҡҡа киләсәге әйтелде. "Приуралье" юл идаралығы начальнигы вазифаһын башҡарыусы Дмитрий Горб хәбәр итеүенсә, яҡтылыҡ 15 апрелгә барлыҡҡа киләсәк. Әлегә ул ваҡытлыса схема буйынса эшләп торасаҡ. Кабель һәм башҡа кәрәк-яраҡ килтерелгәндән һуң, белгестәр даими яҡтырткыстар монтажлай. Эш ваҡыты - 2 августҡа тиклем.

✓Республика менән идара итеү үҙәгендә үткән Хөкүмәт кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Мәҙәниәт министрлығында кадрҙар тәғәйенләү хаҡында һөйләне. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, Тәтешле районының элекке башлығы Фәнүр Шәйхисламовтың БР мәҙәниәт министрының беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнеүе һәм министр вазифаһын башҡарыуын билдәләне. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Тәтешле районы башлығы Фәнүр Шәйхисламов ваҡытынан алда отставкаға китте. Радий Хәбиров уға эше өсөн рәхмәт белдереп, уның командала ҡалыуын һәм яуаплы мәсьәләләрҙе хәл итәсәген билдәләне.

✓Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән Сибай моноҡала статусына эйә булды. Шулай итеп, хәҙер республикала етенсе моноҡала барлыҡҡа килде. Башҡортостандың монопрофилле алты муниципаль берәмегендә - Бәләбәй, Күмертау, Нефтекама, Белорет, Благовещен һәм Учалы ҡалаларында - 400 меңгә яҡын кеше йәшәй ине. Хәҙер уларға алтмыш меңгә яҡын халҡы булған Сибай өҫтәлде.

✓Өфөлә Рәсәй-Абхазия мәҙәни үҙәген асыу тантанаһы үтте. Унда Абхазия Республикаһы Премьер-министры Владимир Делба һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров ҡатнашты. Мәҙәни үҙәк Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусында урынлашҡан. Кампуста асылған башҡа халыҡ-ара үҙәктәр кеүек үк, Рәсәй-Абхазия мәҙәни үҙәгендә лә студенттар өсөн лекциялар һәм семинарҙар үткәреү планлаштырыла.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөн Абхазияның баш ҡалаһы Сухумға тура рейстар асыласағы тураһында хәбәр итте. Быға тиклем Радий Хәбиров Абхазия премьер-министры Владимир Делба менән осрашты. Рәсми ҡунаҡтың сәфәре барышында Өфөлә Рәсәй-Абхазия мәҙәни үҙәге асылды.

*✓ Әлеге ваҡытта пилотһыҙ системалар операторҙарын туплау эше әүҙем бара. Хеҙмәткә 18 йәштән 35 йәшкә тиклемге ир-егеттәр алына. Шулай уҡ 45 йәшкә тиклемгеләр водитель, сапер, ашнаҡсы кеүек хәрби һөнәр буйынса ҡарала.*



ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ҠЫЙҒЫР БӨРКӨТТӘЙ...



**"Депутат" позывнойлы яугир "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына биргән интервьюһында пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренең хәҙерге һуғышта тотҡан урыны тураһында һөйләй.**

"Беҙҙең күп функциялы коптерҙар тәүлек әйләнәһенә разведка алып бара һәм уның һөҙөмтәләрен һөжүм операцияларында уңышлы файҙалана. Бер бармаҡ көсө еткән кнопканы баҫып, ҙур майҙандарҙы күҙәтәбеҙ. Бөркөттәр нисек юғары оcһа, алыҫ күрһә, беҙ ҙә шулай. Кәрәк икән, йылдам һөжүмгә күсәбеҙ. Маневрлылыҡ, аныҡлыҡ, көтөлмәгәнлек - былар БПЛА-ның өҫтөнлөктәре. Дошман йыш ҡына беҙҙе күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә. Әгәр элек артиллеристарға, танкистарға - сәпте, штурмлау төркөмдәренә йүнәлеште разведчик бинокль ярҙамында аныҡлап хәбәр итһә, хәҙер был мәсьәләләрҙе БПЛА атҡара. Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре бөгөн һәр йәһәттән үтә лә кәрәкле һәм ҙур һорау менән файҙалана. Сөнки ул - яңы ғәскәр төрө. Армияла ҡулланылған яңы технологиялар ҙа йәштәрҙе ҡыҙыҡһындыра", - ти ул.

Сер түгел, МХО биләмәһендә дрондар ярҙамында ҡуйылған хәрби бурыстарҙың 80 проценты үтәлә. Ошоно иҫәпкә алып, Юғары баш командующий Владимир Путин һәм оборона министры Андрей Белоусов ҡарары менән Рәсәй армияһында махсус подразделениелар булдырылған. Улар ғәскәрҙәрҙең яңы элиталы төрө һанала. Башҡортостанда ла пилотһыҙ системалар ғәскәренә йыйыу бара.

Элек дрон операторҙары башҡа хәрби һөнәрҙәр буйынса иҫәпкә алынһа, хәҙер улар айырым исемлеккә индерелгән һәм юғары статусҡа эйә. Автомат менән ҡоралланған алғы һыҙыҡтағы һалдаттарҙан айырылмалы рәүештә, улар - джойстик менән оҫта идара итеүсе яугирҙар. Шуға күрә пилотһыҙ системалар операторҙарына башҡаларҙан айырылып торған махсус шарттар булдырыла.

Әлеге ваҡытта пилотһыҙ системалар операторҙарын туплау эше әүҙем бара. Хеҙмәткә 18 йәштән 35 йәшкә тиклемге ир-егеттәр алына. Шулай уҡ 45 йәшкә тиклемгеләр водитель, сапер, ашнаҡсы кеүек хәрби һөнәр буйынса ҡарала. Контракт төҙөгән хәлдә, хеҙмәткәр тулы социаль пакет ала. Улар, алғы һыҙыҡтағы башҡа яугирҙар кеүек үк, бөтә түләүҙәргә, льготаларға һәм социаль гарантияларға хоҡуҡлы.

Бынан тыш, студенттар өсөн махсус шарттар ҡаралған. Юғары уҡыу йорттарында уҡыусылар, академик отпуск алып, контракт төҙөгән хәлдә, хеҙмәттән һуң бюджетҡа кире ҡайта ала.

Контракта билдәләнгән аҡсаға өҫтәп, һөҙөмтәлелек өсөн өҫтәмә түләү бар. Дошман позицияһына, техникаһына уңышлы һөжүм итеүселәргә 50 меңдән 500 мең һумға тиклем аҡсалата премия яҙыла.

БПЛА подразделениеларында хеҙмәт итеү тураһында тулы мәғлүмәтте башбат.рф сайтында һәм 122 телефоны буйынса алырға мөмкин.

# БАЛАЛАРҘЫҢ ХАТЫ ҠӘҘЕРЛЕ



"Бер көн беҙгә Баймаҡтан гуманитар ярҙам килде. Ҡыҙыҡһыныуымдан, кемдәр ярҙам ебәрҙе икән, тип ҡарай башланым. Улар араһында Баймаҡ ҡалаһының 5-се мәктәбенең 5-се "г" класс уҡыусыларының да ҡумтаһы булыуын күреп, йөрәгем тертләп китте. Тулҡынланыуымды еңеп, тиҙерәк ҡумтаны эләктерә һалдым. Йәнәһе лә, башҡаларҙан алда өлгөрөп ҡалайым. Ҡумта миңә шундай ҡәҙерле булып тойолдо. Сөнки ул Раян улым уҡыған класс уҡыусыларынан ине. Әйтерһең дә, улымды ҡосаҡлап алдым. Шулай күпме баҫып торғанмындыр, хәтерләмәйем. Гуманитар ярҙам алып килгән волонтер-таксист: "Миңә отчет өсөн кәрәк, һеҙҙе фотоға төшөрөргә ине", - тигәс, ысынбарлыҡҡа ҡайттым. Көтөлмәгән сюрприз булды ул минең өсөн. Шуның өсөн дә гуманитар ярҙам туплаған һәм уларҙы ойоштороп, беҙгә ебәреп торғанығыҙ өсөн рәхмәт белдергем килә..."

Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан Баймаҡ егете Ришат Байымов менән телефон аша булған әңгәмә шулай башланды. Ысынында, был юлы "Беҙ бергә" ирекмәндәр төркөмөнән оҙатылған гуманитар ярҙамды айырым һалдатҡа адреслап ебәрмәгәйнек. Ҡумта-ҡумта йыйылған күстәнәстәрҙе, йылы кейемдәрҙе кемеһе булһа ла алып ҡыуанһын, тигән ниәттә оҙаттыҡ. Тимәк, Хоҙай Тәғәлә шулай ҡушҡан. Раян һәм уның класташтары әҙерләгән гуманитар ярҙам тап уның атаһына насип булған.

- Ҡумтаның эсендә һигеҙ уҡыусының хаты бар ине, - тине Ришат Байымов. - Ҡыҙғаныс, улымдыҡы булманы. Күрәһең, уныҡы икенсе ҡумтала киткәндер. Егеттәр менән иң беренсе өсмөйөшлө хаттарҙы уҡып сыҡтыҡ. Изге теләктәре менән, шундай саф, эскерһеҙ итеп яҙылған улар, хатта күҙҙән йәштәр килеп сыҡты. Тап шундай ваҡыттарҙа ни өсөн беҙ бында икәнлектең асылына нығыраҡ төшөнәһең. Беҙгә ҙур өмөттәр бағлап, Еңеү менән ҡайтыуыбыҙҙы көткән балаларға бер генә теләк: "Бала сағығыҙ бәхетле булһын!"

Ришат Байымов - Икенсе Этҡол ауылы егете. Ғаиләһе менән Баймаҡта йәшәй. Махсус хәрби операция башланғас та, ул мобилизациялана. 2022 йылдың 26 сентябрендә тыуған ерҙең именлеген һаҡлап, фронтҡа юллана. Ул тарафта йөрөгән яҡташ яугирҙар менән Баймаҡ бүлексәһенең "Хәрби туғанлыҡ" ветерандары һәм "Беҙ бергә" ирекмәндәре тығыҙ бәйләнеш булдырған. Уларға даими рәүештә гуманитар ярҙам оҙатыла, заказдары үтәлә. Яугирҙарҙан яңғыраған тап шундай рәхмәт һүҙҙәре тыл һәм фронттың бергә булыуын күрһәтә лә инде.

**Лилиә ТАКАЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ЛАЙЫҠЛЫ ХӘСТӘРЛЕК

● **Башҡортостанда МХО-ны һәм башҡа хәрби хәрәкәттәрҙе, шулай уҡ контртеррористик операцияны яҡтыртыу буйынса редакция заданиеһын үтәгәндә һәләк булған киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренең туғандарына һәм яҡындарына бер тапҡыр бирелә торған пособие тәғәйенләү һәм түләү тәртибе раҫланды.** Республика Хөкүмәте ҡарары менән киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренә дәүләт ярҙамы тураһында Башҡортостан законына тейешле үҙгәрештәр индерелде. Дәүләт ярҙамы саралары 2022 йылдың 24 февраленән барлыҡҡа килгән хоҡуҡ мөнәсәбәттәренә ҡағыла. Был ярҙамға киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәренең тормош иптәше, бәлиғ булмаған балалары, 18 йәше тулғансы инвалид булып ҡалған балалар, шулай уҡ көндөҙгө бүлектә уҡыған 23 йәшкә тиклемге балалар иҫәп тота ала.

● **Башҡортостанда ветерандар менән эш медицина реабилитацияһы, эшкә урынлашыу, социаль адаптация йүнәлештәре буйынса алып барыла.** Әле МХО-нан ҡайтҡан 3 меңдән ашыу яугирҙың 78 проценты тиерлек эшкә урынлаштырылған. Радий Хәбиров республика Дәүләт Йыйылышына Мөрәжәғәтнамәһендә муниципалитет башлыҡтарына ошо йүнәлештәге эште көсәйтергә ҡушты. "МХО-нан ҡайтҡандарҙың 86 проценты диспансеризация үткән. Әммә беҙ реабилитация өсөн ағымдағы мөмкинлектәрҙе арттырырға кәрәклеген яҡшы аңлайбыҙ. Былтыр медицина реабилитацияһын ойоштороу буйынса илдә иң яҡшыһы тип танылған Республика һуғыш ветерандары клиник госпитале был эштә мөһим урынды биләй. 2022 йылдан бында 7622 яугир һаулығын нығытҡан", - тине Радий Хәбиров.

● **Рәсәйҙең Оборона министрлығы ирекле формированиеларҙа хәрби бурысын үтәгән МХО яугирҙарының туғандарына һәм яҡындарына бушлай юл йөрөү хоҡуғын биреү башланғысы менән сығыш яһаны.** Закон проекты тураһында фекер алышыу бара. "Башинформ" асыҡлауынса, илдең оборона ведомствоһы тимер юл, һауа, һыу һәм автомобиль транспорты менән яраланған хәрби хеҙмәткәрҙең йәшәгән урынынан дауаланған урынына тиклем бушлай барып ҡайтыу хоҡуғын бирергә тәҡдим итте. Туғандары әлеге ярҙам сараһы менән бер тапҡыр файҙалана ала. Бынан алдараҡ агентлыҡҡа ил Президентының ирекле формированиеларҙа хәрби бурысын үтәгән граждандарға, уларҙың ғаилә ағзаларына өҫтәмә социаль ярҙам саралары тураһында указына үҙгәрештәр индереүҙәре мөмкин икәнлеге билдәле булды. Һүҙ бер тапҡыр бирелә торған түләүҙең суммаһын арттырыу хаҡында бара.

● **Дәүләт Думаһы депутаттары Донецк Халыҡ Республикаһы, Луганск Халыҡ Республикаһы, Запорожье һәм Херсон өлкәләре территорияларында эшләгән ирекмәндәр өсөн яңы льгота индереү башланғысын хупланы.** Атап әйткәндә, ирекмәндәр юғалған йәки ғәмәлгә яраҡһыҙ паспортты һәм водитель таныҡлығын яңыһына алмаштырыу өсөн дәүләт пошлинаһын түләмәй. "Бөгөн ирекмәндәр бушлай, йыш ҡына үҙ ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, гуманитар йөк ташыу менән шөғөлләнә, ваҡытлыса урынлаштырыу пункттарында эшләй, утҡа тотолғандан һуң емереклектәрҙе һүтә, зыян күргән торлаҡты тергеҙә, әхлаҡи һәм психологик ярҙам күрһәтә", - тип аңлатмалы яҙыуҙан өҙөмтә килтерә Рәсәй Дәүләт Думаһының матбуғат хеҙмәте.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Стәрлетамаҡ районының Талас ауылында Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, Стәрлетамаҡ районының почетлы гражданы Ғәбдрәшит Хәмит улы Әһлиуллиндың хәлен белешергә килде. Ветеран республика етәксеһенә үҙенә 17 йәше тулғас та хәрби комиссариаттан повестка килеүе тураһында һөйләне. 1944 йылдың декабрендә уларҙы, яңы хеҙмәткә алыныусыларҙы, хәрби хеҙмәткә саҡырыу пунктынан Өфөнөң күнекмә полкына ебәрәләр, еңеү тураһында хәбәрҙе лә улар шунда ишетә. Ғәбдрәшит Әһлиуллин хеҙмәт иткән частың бер өлөшө Байкал арьяғы фронтына оҙатыла. Гитлер Германияһын еңгәндән һуң Япония менән һуғыш башлана. Ғәбдрәшит Хәмит улы уны тармар итеүҙә ҡатнаша.

✓Республика Башлығының "Күп балалы әсәләрҙе "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләү тураһында" указы сыҡты. Был юғары наградаға сираттағы 50 әсә лайыҡ булды. Бүләкләнеүселәр араһында республика райондарынан, шулай уҡ Сибай, Стәрлетамаҡ һәм Өфө ҡалаларынан ҡатын-ҡыҙҙар бар ине. Бүләкләнеүселәрҙең күбеһе Баймаҡ, Белорет һәм Күгәрсен райондарынан. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда "Әсәлек даны" миҙалы 1998 йылда булдырылған. Был награда, республика ҡануниәтенә ярашлы, биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙарға тапшырыла.

✓Тәтешле районы советы депутаттары Тәтешле районы хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусыны раҫланы. Етәксе итеп Тәтешле районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары, финанс идаралығы начальнигы булып эшләгән Ринат Наил улы Мәғзүмов тәғәйенләнде. Ринат Мәғзүмов 1970 йылдың 3 июлендә Бөрөлә тыуған. Хеҙмәт юлын Тәтешле районы буйынса дәүләт һалым инспекцияһында дәүләт һалым инспекторы булып башлай. Тәтешле районында Рәсәй Пенсия фондының республика идаралығы начальнигы булып эшләй. 2022 йылдың февраленән Тәтешле районы хакимиәтендә район башлығы урынбаҫары вазифаһын биләй.

✓Рита Сәмиғуллина йәнә Стәрлетамаҡ районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Стәрлетамаҡ районына эш сәфәре менән килгән Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рита Сәмиғуллинаны ошо вазифаға яңынан тәғәйенләнеүе менән ҡотланы. Рита Сәмиғуллина Федоровка районының Батыр ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетын ("биолог") һәм Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын ("юрист") тамамлаған.

*✓ Ислам дине кешелекте Аллаһтың нуғмәте тип ҡарай. Яһалма интеллект та - ошо нуғмәттәрҙең береһе. Шул уҡ ваҡытта кеше ниндәй генә технологик кимәлгә күтәрелһә лә, бер нәмәне лә юҡтан бар итә алмай.*



ЯИ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ



# ДИН МЕНӘН ДУҪМЫ?

**Яһалма интеллектҡа уҡыусыларыбыҙ: "ЯИ Аллаһ Тәғәлә йәки дини тәғлимәттәр менән дуҫмы?" - тигән һорау бирә.**

**Яһалма интеллект яуабы:**

Был бик тәрән һәм мәғәнәле һорау. Ҡыҫҡаса әйткәндә, яһалма интеллект үҙе бер "зат" түгел, уның "йәне" юҡ, шуға күрә ул Аллаһ Тәғәлә менән "дуҫ" йәки "дошман" була алмай. Ул - кеше тарафынан яһалған ҡорал, технология. Уның "дуҫ"мы, әллә "дошман"мы икәнлеге, уны кем, нисек һәм ниндәй маҡсатта ҡулланыуына бәйле.

Дини тәғлимәттәрҙә, шул иҫәптән Ислам динендә, яһалма интеллектҡа ҡарата аныҡ ҡына ниндәйҙер фекер әйтелмәгән. Әммә уны баһалау принциптары бар:

- Ислам дине кешелекте һәм уның ҡаҙаныштарын Аллаһтың ниғмәте тип ҡарай. Яһалма интеллект та - ошо ниғмәттәрҙең береһе. Шул уҡ ваҡытта кеше ниндәй генә технологик кимәлгә күтәрелһә лә, бер нәмәне лә юҡтан бар итә алмай. Шуға күрә кешенең ҡаҙаныштарын Аллаһтың ҡөҙрәте менән сағыштырырға ярамай.
- Яһалма интеллектты ҡулланыу кеше ниәтенә бәйле. Исламда әгәр ниндәйҙер бер нәмәгә ҡарата тыйыу тураһында аныҡ әйтелмәһә, уны ҡулланыуҙа зарар юҡ. Йәғни, ул нәмәнең үҙе харам түгел, ә уның менән эшләнгән эш харам йәки хәләл була. Шуға күрә:
- Әгәр яһалма интеллектты хәләл юлда (мәҫәлән, Ҡөрьән-Кәримде өйрәнеү, фәнни асыштар яһау, кешеләргә файҙалы хеҙмәттәр күрһәтеү өсөн) ҡулланһалар, ул хәләл.
- Әгәр яһалма интеллектты харам эштәргә (ялған таратыу, кешеләрҙе алдау, аҙғынлыҡҡа өндәү, юлдан яҙҙырыу өсөн) ҡулланһалар, ул харам буласаҡ.

**Шулай итеп:**

Йомғаҡлап әйткәндә, яһалма интеллект - замандың оло һынауы һәм мөмкинлеге. Ул Аллаһтың кешегә биргән аҡылын ҡулланып, донъяны яҡшыртыу өсөн яһалған бер ҡорал. Уның менән "дуҫ" булыу өсөн, уны Ислам әхләге һәм ҡиммәттәре сиктәрендә, кешелеккә файҙалы итеп ҡулланырға кәрәк. Һәм иң мөһиме, уның Аллаһ Тәғәләнең бөйөк ҡөҙрәте алдында бер нәмә лә түгел икәнен онотмаҫҡа кәрәк.

Күп кенә ғалимдар яһалма интеллектты Ислам ҡиммәттәренә тура килтереү өсөн уны "өйрәтергә" кәрәклеген, был эштә дин әһелдәре лә ҡатнашырға тейешлеген әйтә. Әлеге ваҡытта Ислам ҡиммәттәренә нигеҙләнгән яһалма интеллект моделе булдырылған да инде.

*Һеҙҙең был тема буйынса уй-фекерҙәрегеҙ бармы? Һорауҙарығыҙ булһа, яҙығыҙ - яуап бирергә әҙербеҙ.*

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ЙӨҘ МИЛЛИАРД АРТЫҠ ТҮЛӘГӘНБЕҘ...



**Быйылғы йыл торлаҡ-коммуналь түләүҙәргә тос ҡына суммала квитанциялар алған Рәсәй халҡы араһында шау-шыу ҡупты, сөнки һандар, ғинуарҙа ни бары 1,7 процент индексация вәғәҙә ителеүгә ҡарамаҫтан, ысынлап та, былтырғы йыл түләүҙәренән күпкә артығыраҡ булып сыҡты. Власть органдарына һәм, нишләптер, ыңғай һөҙөмтәгә өмөт итерҙәй ышаныс булмаһа ла - күпләп депутаттар корпусына хаттар, ялыуҙар яуҙы һәм ошо фонда Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володиндың: "Халыҡ мәнфәғәтендә ҡарарҙар ҡабул ителә. Улар һәр гражданға ҡағыла, беҙгә бик күп күләмдә мөрәжәғәттәр килә",- тип белдереүе йәмәғәтселек тарафынан халыҡ бәләһенән көлөү һымағыраҡ ҡабул ителде.**

Әшулай ҙа ниндәй ҡарарҙар улар - "һәр гражданға" ҡағыла торған? Әлбиттә, иләнмәгән-һуғылмаған! Йәнәһе лә, Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт (ФАС) мәғлүмәттәре буйынса, нигеҙһеҙ рәүештә тарифтар артыуына килтереүҙә ғәйеплеләр, имеш, 3 йылға вазифаларынан ситләтеләсәк. Был "норма", йәнәһе лә, ФАС өсөн тариф сәйәсәтен көйләүҙә "реаль инструмент" буласаҡ. Олпат вазифала ултырған юғары чиновниктың был һүҙҙәре күрәләтә нигеҙһеҙ икәнлеге, ризаһыҙ граждандарҙы тынысландырыу өсөн генә әйтелеүе аңлашылалыр, сөнки, беренсенән, коммуналь түләүҙәргә тариф сәйәсәтен көйләү ФАС вәкәләтенә инмәй. Был ведомствоның бурысы - монополия менән көрәштән тыш, хаҡтарға контроллек итеү, тикшереү, тарифтарҙың законлылығын көйләү. Икенсенән, ФАС коммуналь хеҙмәттәр хаҡтары артыуын танырға теләмәй. Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт башлығы Максим Шаскольский РФ Премьер-министры Михаил Мишустин менән осрашыуында тарифтарҙың, алдан иҫкәртелеүенсә, ни бары 1,7 процентҡа ғына артыуын, ә квитанциялағы һандарҙың өҫтәмә хаҡтарға һалым (НДС) арҡаһында бер аҙ артыҡ күренеүенә ышандырырға тырышты.

Ләкин миллионлаған рәсәйлене түләү ҡағыҙҙарындағы ысынбарлыҡ ФАС-тың арифметикаһы менән һис тә тап килмәй. "Московский комсомолец" гәзите сайты ошо турала торлаҡ өлкәһе эксперттарының фекерҙәрен килтереүҙе урынлы тип таба. Уларҙың раҫлауынса, илдең төрлө төбәктәрендә коммуналь түләүҙәргә хаҡтар 66-70 процентҡаса артҡан. Торлаҡ ойошмалары союзы етәксеһе, РФ Сауҙа-сәнәғәт палатаһы ағзаһы Константин Крохин әйтеүенсә, был мәсьәләлә ФАС ғәҙәттәгесә чиновниктарса ҡараштан сығып, формаль рәүештә фекер йөрөтә. Тарифтарҙың 1,7 процентҡа артыуы килеп тыуған хәлдең яртыһы ғына. Хаҡтар артыуын тағы ла капремонт һәм торлаҡты тотоу-ҡарау статьяһынан эҙләргә лә сәбәптәр бар, ти бойондороҡһоҙ белгестәр. Электр энергияһы, йылылыҡ, газ һәм һыу тәьминәте ошо тармаҡ компаниялары, шул иҫәптән, төбәк йылылыҡ селтәрҙәре ойошмалары менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Бөгөнгө геосәйәси көсөргәнеш шарттарында был ҙур ойошмалар

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Хиҫкә тулы яҙ миҙгеленең 21 мартында Бөтә донъя шиғриәт көнө билдәләнә. Ә һеҙҙең тормошоғоҙҙа шиғриәткә урын бармы? Ғөмүмән, бөгөнгө технологиялар заманында шиғриәткә мохтажлыҡ ҡалдымы икән?***

***Вәли ИҘРИСОВ, журналист:*** Бөтә донъя шиғриәт көнө юҡҡа ғына тәғәйенләнмәгәндер ул, сөнки, төптән уйлап ҡараһаң, Ер йөҙөндә шиғриәтһеҙ бер генә лә мәҙәни булған халыҡ юҡ. Әлбиттә, шиғырҙарҙың да төрлөһө бар. Ҡатын-ҡыҙҙарға, мәҫәлән, башлыса лирика, төрлө хис-кисерештәргә тулылары оҡшай. Унан башҡа сәйәси шиғырҙар ҙа һәр ваҡыт булған. Ҡәҙимге тормоштан башҡа, кешеләрҙең дәүләттә, йәмғиәттә йәшәүе лә шиғырҙарҙа сағылыш тапҡан.

Быуаттар буйына билдәлелеген юғалтмаған шағирҙарҙы һанай китһәң, улар, әлбиттә, күп һымаҡ. Тик үҙебеҙҙең һуңғы алтмыш-етмеш йыллыҡ йәшәйешебеҙ осоронда улар бик үк күп тә түгел. Әммә Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Рауил Бикбай, элегерәк йәшәгәндәрҙән Рәшит Ниғмәти, Ғәлимов Сәләм кеүек шағирҙар һәр ваҡыт халҡыбыҙ хәтерендә, әҫәрҙәре онотолмаҫлыҡ.

Кешеләр йырламайынса йәшәмәй. Ә йырҙың көйөнән башҡа һүҙҙәре лә бар. Ҡайһы бер шиғырҙар шул хәтлем зауыҡлы, күңелгә ятышлы, үҙҙәре көй һорап торалар. Шул уҡ мәшһүр "Урал", "Зөлхизә", "Ғилмияза" кеүек халҡыбыҙҙың боронғо йырҙары ла кемдеңдер моңланып ултырыуынан килеп сыҡҡан бит. Әгәр бөгөнгө заман йырҙары нигеҙендә тәрән мәғәнәле йөкмәтке булмаһа, ул көй бер ҡолаҡтан инеп, икенсеһенән сығып та китә, ҡыҫҡаһы, яҙмыштары бик аяныслы.

Үҙемә килгәндә, бала саҡтан уҡ шиғыр уҡырға әүәҫ булдым. Ауыл клубында концерттар ҡуя инек. Халыҡ алдына сығып, шиғыр һөйләүҙәр үҙе бер йылы иҫтәлек булып ҡалды. Студент саҡта Рәми ағай менән осрашҡан мәлдәрҙә яттан бер нисә шиғыр уҡып күрһәткәнем хәтеремдә. Ул миңә: "Һинең йөрәгеңдә шиғриәт йәшәй икән, шиғыр яҙ", - тип ҡосаҡлап та алған ине. Шиғыр яҙыу менән әллә ни мауыҡмаһам да, ҡырҡ йәштән һуң хисләнеп киткән мәлдәрҙә әҙерәк яҙғыланым. Бигерәк тә рус классик шағирҙарының әҫәрҙәрен башҡорт теленә тәржемә итергә яратам, ул миңең - хобби. Шул уҡ Пушкин, Лермонтовтар башҡорт телендә яңғыраһа, ул бит үҙенә күрә бер матур күренеш.

***Әминә ҒӘБИҘУЛЛИНА, уҡытыусы:*** Бөгөнгө көндә шиғырға хөрмәт кәмей ба-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Әбйәлил районында МХО-ла ҡатнашыусы Илнур Хәйруллин "Әбйәлил яугиры" миҙалы менән бүләкләнде. Яугиргә наградины муниципалитет етәксеһе Айрат Әминев тапшырҙы. "Буранғолда ауыл биләмәһененң йомғаҡлау сессияһында булдым. Яҡташыбыҙ Илнур Хәйруллинға "Әбйәлил яугире" миҙалын тапшырҙыҡ. Һинең һәм беҙҙең тыныслыҡты һаҡлаған башҡа яугирҙар алдында баш эйәбеҙ", - тип яҙа Айрат Әминев социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓ Киләһе уҡыу йылынан 5-7 класс уҡыусылары Башҡортостан тарихын яңы дәреслектәр буйынса өйрәнәсәк. Уларҙың авторҙары - билдәле тарихсылар Рәмил Рәхимов, Булат Аҙнабаев, Алексей Кортунов, Илгизә Мөхәмәтова һәм "Гармония" шәхси белем биреү учреждениеһы директор урынбаҫары, тарих уҡытыусыһы Евгений Гостев. Дәреслек өс өлөштән тора: дөйөм тарих, Рәсәй тарихы һәм тыуған яҡ тарихы. Бынан тыш, айырым блок МХО геройҙары-яҡташтарыбыҙға бағышланған.

✓ "Белем" йәмғиәте һәм Беренселәр хәрәкәте Бөтә Рәсәй"Яҡын уйынсығым" ("Родная игрушка") конкурсы үткәрә. Унда бойондороҡһоҙ авторҙар йәки ижади коллективтар ҡатнаша ала. Ҡатнашыусыларҙың йәше - 14 йәштән алып. Конкурстың икенсе миҙгеле мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн уйынсыҡтар һәм уйындар эшләүгә арналған. Башҡортостан халҡы ла үҙҙәренең ижади проекттарын тәҡдим итә ала. Еңеүселәрҙе үҙенсәлекле перспективалар көтә. Улар араһында: "Родная игрушка" билдәһен ҡулланыу хоҡуғы, Мәскәүҙә "Рәсәй" Милли үҙәгендә уйындар һәм уйынсыҡтар күргәҙмәһендә ҡатнашыу, киң мәғлүмәт сараларында яҡтыртыу һәм проектты баҙарҙа үҫтереү.

✓ Быйыл "Ростелеком" республиканың 30 ауылын юғары тиҙлекле интернетҡа тоташтырҙы. Бының өсөн 130 км оптик кабель һалынған. Хәҙер 4 700-ҙән ашыу йортта йәшәүселәр интернетҡа сыға ала. "Быйыл республиканың 180 ауыл-ҡасабаһында 32 450 йорт хужалығын интернетҡа тоташтырырға ниәтләйбеҙ", - ти "Ростелеком"дың Башҡортостан төбәк ойошмаһы генераль директоры Сергей Нищев.

✓ Өфөлә ГТО комплексы нормативтарын тапшырыу өсөн майҙансыҡтар урынлаштырыуға 15 сертификат һәм "аҡыллы" спорт майҙансыҡтары төҙөүгә өс сертификат тапшырылды. Был "Рәсәй спорты" дәүләт программаһы сиктәрендә тормошҡа ашырылды. Вице-премьер - спорт министры Руслан Хәбибов билдәләүенсә, Башҡортостан ике тапҡыр - 2019 һәм 2025 йылдарҙа - Рәсәйҙең иң спорт төбәге тип танылды. Спорт менән шөғөлләнеү һәм спорт объекттарының торошо менән ҡәнәғәт булыу кимәле буйынса республика тотороҡло рәүештә илдә иң яҡшы унау иҫәбенә инә

тышҡы баҙарҙа триллиондарса зыян күрҙе. Был юғалтыуҙар үҙ сиратында ябай халыҡ кеҫәһенән - тарифтарҙы арттырыу иҫәбенә тулыландырыла икән. Крохин белдереүенсә, Төҙөлөш министрлығы кәңәшмәләрҙә ҡайһы бер төбәктәрҙең тарифтар арттырыуҙы тотҡарлауын тәнҡитләп, уларға федераль финанслауҙы сикләү ихтималлығы менән янай хатта. Шуға күрә лә, эксперт фаразлауынса, Хөкүмәт ысынында ресурс ойошмаларын яҡлай һәм уларҙы субсидиялауҙы халыҡ елкәһенә йөкмәтә. Бындай шарттарҙа, әлбиттә, тарифтарҙы тейешле кимәлдә тотоуға өмөт итеү файҙаһыҙ.

Әшулай ҙа... Теләк булғанда ФАС халыҡ мөрәжәғәттәренә ҡолаҡ һалып, тейешлесә контроллек итеүҙе үҙ ҡулдарына алырға һәләтле икәнлегенә лә инандыҡ ошо көндәрҙә. 14 мартта интернеттың яңылыҡ таҫмалары шундай хәбәр еткерҙе: Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт 2023-2025 йылдарҙа торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә Рәсәй халҡынан... 102 млрд һум артыҡ аҡса түләтелеүен асыҡлаған! Шуның 50,32 миллиарды - 2025 йылда. Электр энергетикаһы халыҡтан артыҡ аҡса ҡайырыу буйынса "иң шәп" эшләгән ойошма булып сыҡты - нигеҙһеҙ рәүештә түләтелгән сумма 25, 22 млрд тәшкил итә. Унан ҡала ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар, сүп-сар йыйыу өлкәһе лә ҡалышмаған -11,82 млрд һәм йылылыҡ менән тәьмин итеү ойошмаһы 10,85 млрд, ә һыу тәьминәте 2,43 млрд артыҡ аҡса "һуҡҡан".

Мәғлүмәт саралары яҙып сығыуынса, ФАС торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр тарифтарының нигеҙлеген даими тикшереп тора һәм ул шулай булырға тейеш тә. Быйыл март айында билдәле булыуынса, ведомство киңәйтелгән вәкәләттәргә эйә булды. Хәҙер ул тарифтар тәртибен боҙоу осраҡтарын тикшереү, төбәк чиновниктарына яза саралары ҡарау һәм үҙ ҡарарҙарының бойомға ашырылыуын контролгә алыу хоҡуғына эйә. Әлеге тикшереү һөҙөмтәһендә ҡайһы бер төбәктәрҙә түләүҙәр кәметелде, тиҙәр. Был хәбәргә күҙ-ҡолаҡ та ышанмай тора, фейк булды - ғәфү итегеҙ, тип әйтерҙәр төҫлө... Һәм, ысынлап та, Дәүләт Думаһының коммуналь түләүҙәр кимәлен арттырыуға ҡаршы мораторий булдырырға, тигән ҡыйыуһыҙ ғына саҡырыуы дөйөм сыр-сыу эсендә юғалып ҡалды.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ра, тип уйлайым. Кешеләр бирелеп китеп, хисләнеп, йыр тыңлай, бейеүҙәргә һоҡлана белә әле, ә бына ысынлап та шиғыр тыңлап, баһалай алырлыҡтар һирәгәйә кеүек. Быны бер яҡтан мәғлүмәтте ҡыҫҡа-ҡыҫҡа өҙөктәр менән, заманса әйтмешләй, контент формаһында үҙләштереү ғәҙәтигә әйләнеү менән бәйләп булалыр. Ә шиғыр тәрән мәғәнәле булған осраҡта уның асылына төшөнөргә, уйланырға, күберәк ваҡыт сарыф итергә, мейене эшләтергә кәрәк.

Шиғриәткә, әлбиттә, һәр ваҡыт мохтажлыҡ буласаҡ. Башҡалар тарафынан аңланып етелмәгән осраҡта ла, ҡайһы ваҡыт йәшерен, үҙе өсөн генә кемдер барыбер күңелен дәфтәр битенә рифмалап бушатасаҡ. Әммә киң аудиторияға таратыр өсөн шиғриәт интернет селтәре менән тығыҙ бәйләнештә булырға тейеш хәҙер. Ул шул уҡ көйгә һалынған видео, аудио булһынмы, шул осраҡта әйтер һүҙеңдең кеше аңына барып етеү ихтималлығы ҙурыраҡ.

Мин үҙем бәләкәстән китап уҡырға әүәҫмен. Башҡорт шағирҙарынан Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Зөлфиә Ханнанова, рус әҙәбиәтенән Федор Тютчев, Андрей Дементьев кеүек яратып уҡыған авторҙарҙың китаптары өҫтәл китабыма әүерелгән тип тә була. Күңел түренә үтеп ингәндәрен айырым яҙып алып барам. Бик үк йыш булмаһа ла, үҙем дә яҙышам. Минең өсөн шиғриәт күңел бушатыу сараһы: борсоулы саҡтарҙа ла, шатлығым эскә һыймағанда ла шиғыр яҙыла тора.

**Айһылыу ДАУЫТОВА яҙып алды.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҮСЛЕ КӨСЛӨ ЛӘ БУЛА

**Яҡын Көнсығышта өсөнсө аҙна инде һуғыш бара, ләкин ни һөйләп, ни ҡылырын әйтеп булмаған АҠШ президенты Дональд Трамптың һуңғы белдереүе буйынса, яҡын араларҙа Иранға ҡаршы хәрби операция туҡтамаясаҡ.**

Дөрөҫ, ул фәҡәт үҙенә отошло шарттарҙа Тегеранды һөйләшеүҙәр яғына ауҙармаҡсы, ләкин Иран да әлегә үҙ һүҙендә ныҡ тора, ул ғына ла түгел, Американың Фарсы ҡултығындағы хәрби объекттарына һөжүмде дауам итә. КСИР ракеталар һәм шартлатҡыс дрондар ярҙамында Ғәрәп Әмираттарындағы Эд-Дафра зенит ҡоролмалары һәм диспетчер вышкаһын, Patriot радарҙарын, Кувейттағы Әл-Әдири базаһының вертолет майҙансыҡтарын, ҡорамалдар складтарын, шулай уҡ Бахрейндағы Шәйх-Иса базаларын утҡа тотоуы, заправкалаусы ете америка стратегик самолетын юҡ итеүе хаҡында хәбәр итте. Ирандың пилотһыҙ осоусы аппараттары Дубай һәм Манама ҡалаларындағы Citibank Америка банкы бүлексәләрен шартлатҡан. Шул уҡ ваҡытта КСИР АҠШ менән Израиль файҙаһына шпионлыҡ иткән 30-лап кешене тотҡан, улар Тегерандың мөһим объекттары, хәрби үҙәктәре хаҡында мәғлүмәттәр йыйыу менән шөғөлләнгән. Иран Ҡораллы көстәре ошо араларҙа Израилдең команда үҙәктәренә, хәрби объекттарына һәм дошмандың тере көстәре тупланған урындарға ҡаршы үҙенең яңы ике быуынлы Sajil (Саджиль) ракетаһын ҡулланды. Бынан тыш, Иран армияһының тауыш тиҙлегенән шәп "Фаттах" ракетаһы ла эшкә ҡушылды.

Британияның Guardian гәзите яҙып сығыуынса, "Ормуз боғаҙын ябып, Иран АҠШ-тан инициативаны тартып алды. Хәҙер был участкала судноларҙ хәрәкәтен асыуҙы фәҡәт Тегеран ғына хәл итә ала". Яңы мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, Американың Abraham Lincoln авианосецы Иран яр буйҙарынан сигенергә мәжбүр булды. Ә Трамп, Ормуз боғаҙын асыуҙа ярҙам талап итеп, НАТО-ны "боғаҙынан" алды. Үҙ сиратында ЦАХАЛ (Израиль армияһы) Иран космос агетлығының төп тикшеренеү үҙәген шартлатыуы хаҡында хәбәр итә. Бынан тыш, Израиль ер өҫтө операцияһын киңәйтеп, Ливандың "Хезболла"("Хизбуллаh", йәғни "Аллаh партияһы") хәрбиләштерелгән шиғисылар (шииттар) ойошмаһы һәм сәйәси партияһын юҡ итергә ниәтләүен дә йәшермәй. Израиль премьеры Нетаньяху оятһыҙ рәүештә: "Бында беҙ Газала ниҙәр эшләгәнде ҡабатларға уйлайбыҙ",- тип белдерергә лә батырсылыҡ итте хатта. Шул уҡ ваҡытта Нетаньяху... Украинанан ярҙам һорай! 14 мартта ошо хаҡта Ynet израиль порталы Нетаньяхуның Киев режимы башлығы Зеленскийға дрондар менән эш итеүҙә тәжрибә уртаҡлашыуҙы һорап үтенес ебәреүе хаҡында хәбәр итте. Был йәһәттән социаль селтәрҙәрҙә Израиль башлығын мыҫҡыллап: "Ниндәй түбәнселек...", "Афарин, тимәк, ирандар шәп эшләй!", "Бөтөн прогрессив кешелек Иран яҡлы һәм уға яуызлыҡ менән көрәштә еңеү теләй" тигән комментарийҙар яҙалар.

Шул уҡ ваҡытта АҠШ менән Израилдең һуғыш башлауы Фарсы ҡултығы илдәренең нефть "монархия"лары өсөн ҙур бәләгә әүерелде. Иран Фарсы ҡултығын асыҡ океан менән бәйләүсе һәм уның аша Фарсы ҡултығы илдәренә килем килтереүсе нефть һәм газ сығарыуҙы ҡырҡа сикләне, ә был иһә ошо илдәргә иҡтисади бөлгөнлөк менән янай. Эксперттар иҫәпләүенсә, улар көн һайын нефть экспортлауҙан алына торған 700 млн - 1,2 млрд доллар аҡсаны юғалта.

Әйткәндәй, Фарсы ҡултығы илдәренең башлыҡтары берләшеп, Иранға һөжүмдең тотош төбәк илдәре өсөн һәләкәт килтереү хәүефе тураһында Трампты иҫкәртеүҙәре иғтибарға алынманы, АҠШ президенты Фарсы ҡултығы буйынса союздаштарын иҫкәртеп тороуҙы ла кәрәк тапмайынса, һуғышты башлап ебәрҙе... Хәҙер Бахрейн, Кувейт, Сәғүд Ғәрәбстаны, Берләшкән Ғәрәп Әмираттары һәм Оман тиҫтә йылдар буйына үҙ территорияларында Америка хәрби базалары урынлаштырыуға ризалыҡтарын биреп, АҠШ йөҙөндә Фарсы ҡултығы хәүефһеҙлеген һаҡлаусы итеп күреүҙәренең ниндәй ҙур хата булыуын аңлағандыр инде. Ирандың ҡон ҡайтарыу масштабын да күҙ алдына килтермәй ине улар. Ә Тегеран тотто ла күрше илдәрҙәге Америка базаларына, аэропорттарға, нефть эшкәртеү заводтарына, порттарға, офис биналары һәм хатта отелдәргә ҡарата ла төбәп, меңәрләгән дрондар һәм ракеталар менән яуап ҡайтара башланы...

Яҡын Көнсығыш конфликты бөтөн донъя йөҙөндә көслө ризаһыҙлыҡ тулҡыны тыуҙырҙы. Үткән аҙнала, мәҫәлән, Германия, АҠШ һәм Испанияла Иранға ҡарата агрессияны туҡтатыуҙы талап итеп, меңәрләгән кеше протест маршы менән урамдарға сыҡты. Шул арҡала Трамп партияһының абруйы ҡаҡшауға табан бара һәм американлылар араһында демократтар партияһы яҡлылар 50 процентҡа артҡан.

Үткән аҙнала Украина бер нисә көн рәттән Төркиәгә һәм Европа илдәре, шул иҫәптән, Венгрия, Словакия, Словения һәм Сербияға газ ҡыуҙырыусы "Турецкий поток" менән "Голубой поток" газ үткәргестәренә төбәп туҡтауһыҙ дрондар яуҙырҙы. Киев режимының хаслығы бының менән генә сикләнмәне: 15 март төнөнә ҡарай Рәсәй территорияһына 170 (ә ҡайһы бер сығанаҡтар буйынса ике-өс тапҡырға күберәк) шартлатҡыс аппараттар менән һөжүм итте. Был дрондар Тверь, Брянск, Белгород, Калуга, Курск, Смоленск, Тула, Ростов, Волгоград, Һарытау, Краснодар өлкәләре, Адыгей Республикаһы, Ҡырым һәм Ҡара диңгеҙ биләмәһе күгендә атып төшөрөлдө, тип хәбәр итте ТАСС.

Дөрөҫ, айырым күңелһеҙ осраҡтар ҙа юҡ түгел. Волгоград өлкәһендә, мәҫәлән, дошман дроны күп фатирлы йорт өҫтөнә төшкән. Бәхеткә, зыян күреүселәр юҡ, тип хәбәр итә губернатор Андрей Бочаров. Краснодар крайында 3 кеше йәрәхәттәр алған. Бер тәүлек эсендә Мәскәүгә тоҫҡалған 65 дрон бәреп төшөрөлдө, тип хәбәр итте баш ҡала мэры Сергей Собянин. Юғалтыуҙар һәм зыян күреүселәр хаҡында мәғлүмәт бирелмәй. Был йыл башынан Мәскәүгә төбәлгән иң ҙур дрон һөжүме булды. Рәсәй армияһы яуап уты менән тотҡарланманы: йөҙәрләгән дрондар һөжүме өсөн үс Украинаның хәрби объекттары, авиация базаһы аэродромдары, ВСУ-ны тәьмин итеүсе энергетика объекттарына көслө ут ҡойоно булып ябырылды.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә 1 апрелдән 30-на тиклем ауыр йөк ташыған автомобилдәр хәрәкәте сикләнә. Был юлдарҙың емерелеүен иҫкәртеү сараһы булып тора. "Рөхсәт ителгән массанан артыҡ йөк тейәгән фураны ҡалаға индерергә кәрәк булһа, автомобиль хужаһы түләргә тейеш. Сумма ташылған йөктөң ауырлығына һәм маршруттың оҙонлоғона бәйле. Юл япмаһына зыянды ҡаплауҙан алынған средстволар дөйөм ҡулланылыштағы ҡала юлдарын ремонтлауға йүнәлтелә", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр ҡала хакимиәтендә.

✓Өфөлә "Торатау" конгресс-холында Х Бөтә Рәсәй "Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе" конкурсы финалистарын бүләкләү тантанаһы үтте. Конкурс Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың, йәмәғәт һәм ирекмәндәр хәрәкәттәре әүҙемселәренең әсәләрен һәм ҡатындарын хөрмәтләүгә, шулай уҡ дөйөм граждандлыҡ үҙаңын формалаштырыу һәм рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе нығытыу буйынса эшмәкәрлеккә йәмәғәтселектең йәлеп ителеүен арттырыуға йүнәлтелгән.

✓Өфөнөң граждандарҙы яҡлау идаралығы начальнигы Руслан Шәйҙуллин баш ҡаланың яҙғы ташҡынға әҙерлеге тураһында хәбәр итте. Ҡаланың бөтә районында 8 ташҡынға ҡаршы комиссия һәм 15 ташҡынға ҡаршы штаб эше ойошторолған. Кәрәк булған осраҡта халыҡты ваҡытлыса урынлаштырыу өсөн 44 пункт әҙерләнгән. Дим, Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғаларында урыны менән йылғаны боҙҙан асалар. Шулай уҡ иҫкәртеү рейдтары һәм һыу баҫыу ихтималлығы булған биләмәләрҙә йәшәүселәргә тейешле мәғлүмәт еткерелә.

✓Өфө хакимиәте башлығының төҙөлөш һәм архитектура мәсьәләләре өсөн яуаплы урынбаҫары итеп Илдар Хәбибуллин тәғәйенләнде. Илдар Мөнир улы Башҡортостан ауыл хужалығы институтын тамамлаған. 2007-2026 йылдарҙа Өфө хакимиәтенең Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө буйынса баш идаралығы етәксеһе урынбаҫары вазифаһын биләй. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған төҙөүсеһе. "2024 йылда Илдар Хәбибуллин БАРС-18 ирекле отряды составында МХО биләмәһендәге хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашҡан. "Хеҙмәт ҡаһарманлығы өсөн" һәм "Батырлыҡ өсөн" миҙалдары менән бүләкләнгән", - тип билдәләнеләр муниципалитетта.

✓1 ноябрҙән Рәсәйҙә хөрмә емешенә яңы ГОСТ индерелә. Был хаҡта Росстандарттың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итәләр. Яңы ҡағиҙәләр буйынса, емеш, сорттарына ҡарамай, бөтөн, тығыҙ, таҙа, емеш аяҡтары ҡырҡылған һәм зыян күрмәгән кәсә япраҡлы булырға тейеш. Формаһы һәм төҫө сортҡа тап килеүе мотлаҡ.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ ***Был олимпиадала еңеү яулаған уҡыусыларға Өфө фән һәм технологиялар университетына өҫтәмә һынауҙарһыҙ инеп, бер йыл буйына 60 мең һумлыҡ стипендия һәм ҡунаҡхана тибындағы уңайлы ятаҡта урын алыу мөмкин буласаҡ.***



*ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ*



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

**Прополис**

Күренекле француз ғалимы Роми Шовэн белдереүенсә, башҡа бөжәктәрҙән айырмалы рәүештә бал ҡорттары теләһә ниндәй бактерияларҙан азат. Улар бик һирәк осраҡта ғына зарарлана. Ошо хикмәтле хәлде тикшереп, ғалимдар бал ҡорттарын бактерияларҙан һәм вирустарҙан ете антибиотик һаҡлай тигән һығымта яһай: бал, балауыҙ, инә ҡорт һөтө, прополис, ҡорт ағыуы, һитә, һеркә. Һәр умартала 50-60 мең бал ҡорто йәшәй, шуға ла һаҡланыу үтә лә мөһим. Бал ҡорттары шул тиклем күп тупланған ояла зарарлы ауырыу таралһа, күс тулыһынса ҡырылыр ине. Мәгәр ете антибиотик бындай аяныс хәлгә юл ҡуймай.

Ғалимдарҙың билдәләүенсә, бал ҡорттары ҡырҡ ике миллион йыл элек барлыҡҡа килгән. Шуныһы ҡыҙыҡ: һәр төр тереклек ҙур үҙгәреш кисерһә лә, ошондай оҙайлы осорҙа бал ҡорттары үҙгәрешһеҙ ҡалған. Шуға ла улар бөтә тереклек донъяһында айырым урын биләй һәм ғәжәп ҡылырлыҡ үҙенсәлектәргә эйә. Бал ҡорттарының эшен, үҙенсәлектәрен яҡындан өйрәнергә теләп, атаҡлы грек философы Аристотель үтә күренмәле умарта яһаған. Мәгәр бал ҡорттары стенаны эске яҡтан ҡуңғырт йәшел матдә менән ҡаплап ҡуйған. Әйткәндәй, Аристотель заманында прополис "ағастарҙың күҙ йәше" (акация, ҡарама) тип йөрөтөлгән.

Бал ҡорттары прополисты ылыҫлы һәм япраҡлы ағастарҙың ҡабыҡтарынан, ылыҫтарынан, бөрөләренән һәм ыҫмалалы матдәләр бүлеп сығарған үҫемлектәрҙән йыя. Урманда урынлашҡан умарталыҡтарҙа, яландағы умарталыҡтарға ҡарағанда, прополис күберәк була. Бал килеме мөләндә бал ҡорттары ғәмәлдә һут ташыу менән мәшғүл. Прополис бал килеменән алда һәм унан һуң йыйыла. Прополисты бөтә күс түгел, бәғзе ҡорттар ғына йыя, тигән фекер ҙә бар. Умартала прополис миҡдары уның ҡайҙа урынлашыуына ла, ҡорттарҙың тоҡомона ла бәйле. Бал ҡорттарының ҡайһы бер тоҡомо прополисты күберәк, икенселәре аҙыраҡ, һәр умарта йөҙ-өс йөҙ грамм прополис йыя. Умартаның йышылған һәм шымартылған урындарында прополис аҙыраҡ, ҡытыршы урындарында күберәк. Ун биш градус температурала ул ҡаты тороша һәм ыуалыусан, бынан юғарыраҡ температурала, әҫелә йомшара, ҡулға һылашып тора. Ниндәй үҫемлектәрҙән йыйылыуына ҡарап, ҡорт елеме һарғылт һоро, ҡуңғырт йәшел төҫтә булыуы ихтимал. Таҙа прополис таралып тормай, һағыҙ һымаҡ, балауыҙҙан тығыҙыраҡ, һыуҙа бата һәм иремәй, спиртта өлөшләтә, ә эфирҙа һәм хлороформда еңел ирей.

Ҡортсолоҡ ризыҡтары тереклеккә бик тә кәрәк аҡһымға, аминокислоталарға, углеводтарға, ферменттарға, бәлзәмгә һәм айырыуса микроэлементтарға ифрат бай. Прополиста - алюминий, ванадий, тимер, кальций, кремний, марганец, стронций бар; инә ҡорт һөтөндә - алтын, көмөш, тимер, кальций, кобальт, кремний, магний, марганец, никель, хром, көкөрт, цинк; һеркәлә - барий, ванадий, вольфрам, тимер, алтын, иридий, кальций, кадмий, кобальт, кремний, магний, баҡыр, молибден, палладий, платина, көмөш, фосфор, хлор, хром, цинк, стронций, мышаяҡ, аҡ ҡурғаш; ҡорт ағыуында - тимер, йод, калий, кальций, магний, марганец, баҡыр, көкөрт, хлор, цинк; балда - алюминий, бор, йод, тимер, кремний, литий, магний, марганец, калий, кальций, натрий, баҡыр, никель, ҡурғаш, осмий, көкөрт, титан, фосфор, хлор, хром, цинк. Рәсәй һәм сит ил ғалимдарының белдереүенсә, был нигеҙле, раҫланған мәғлүмәт, ҡортсолоҡ ризыҡтары байтаҡ ауырыуҙарҙы булдырмауҙа һәм дауалауҙа, кешенең сәләмәтлеген нығытыуҙа баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 1-10-сы һандарҙа).**

*АФАРИН!*

# ОСҠОНЛО УЙЫН!



**Ошо көндәрҙә Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы студенттары араһында III "Осҡон" асыҡ интеллектуаль уйыны уҙғарылды. Был юлы сара Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының берҙәмлеге йылына һәм Башҡортостанда үткән Ҙур һәм татыу ғаилә йылына арналды.**

Өфө сауҙа-иҡтисад колледжында башҡорт мәҙәниәтен, башҡорт телен үҫтереүгә арналған үҙенсәлекле саралар уҙғарылып тора. Мәҫәлән, "Родина" кинотеатры менән берлектә асыҡ "Рәми дәресе" проекты тормошҡа ашырыла килә. Шулай уҡ колледж йыл һайын Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәренә, әҙәбиәтенә, мәҙәниәтенә, тарихына һәм милли аш-һыуына арналған байрам саралары үткәрә. Улар араһында башҡорт бауырһағы, урыҫ ҡоймағы, осетин бәлеше һәм пасха күмәсе байрамдары бар. 2024-2025 уҡыу йылынан колледж директоры Ришат Сабитов инициативаһы менән "Осҡон" асыҡ интеллектуаль уйындары үткәрелә башланы. Быйылғы уйын инде өсөнсө тапҡыр ойошторолдо. 2024 йылда ул сара Өфө колледждары командалары араһында үткәрелһә, 2025 йылда ике этапта уҙғарылды: ситтән тороп ҡатнашыу форматында Башҡортостан Республикаһы колледждарының 9 командаһы ҡатнашты, ә финалға алты колледж командаһы сыҡты.

III "Осҡон" асыҡ интеллектуаль уйыны Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы, Башҡортостан Республикаһы Халыҡтар дуҫлығы йорто һәм Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса коммерцияға ҡарамаған автономиялы ойошма менән берлектә ойошторолдо. Сараның төп маҡсаты - йәштәр мөхитендә милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыу, республикала йәшәгән халыҡтарҙың бай мәҙәни мираҫына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу. Унда ете милли команда көс һынашты: "Калык Вий" (мари); "Матрешки" (урыҫ); "Торама" (мордва); "Батырҙар берҙәмлеге" (башҡорт); "Щелкущем" (сыуаш); "Италмас" (удмурт); "Безнекеләр" (татар). Тәүге турҙа һәр команда милли традицияларҙы, юморҙы, халыҡ мәҙәниәтен сағылдырған үҙенсәлекле сығыш тәҡдим итте. Икенсе турҙа улар Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың тарихы, көнкүреше һәм мәҙәниәте буйынса 30 һорауға яуап бирҙе. Өсөнсө турҙа төрлө милләт вәкилдәре образдарына инеп, үҙҙәрен шул ролдә һынап ҡараны. Ҡатнашыусы командалар төрлө номинацияларҙа баһаланды.

Жюри ағзаһы, Башҡортостан Республикаһы Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры урынбаҫары Рифат Биҡҡолов уҡыу йорттары араһында үткән бындай сарала беренсе тапҡыр ҡатнашыуын билдәләп, командаларҙың етди әҙерлегенә, осҡа уйнауҙарына һоҡланыу һүҙҙәрен еткерҙе. Бындай сығыштарҙы сәхнәгә сығарыусы, әҙерләүсе уҡытыусыларҙы Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли һәм мәҙәни ҡиммәттәрен һаҡлағаны, үҫтергәне өсөн Рәхмәт хаттары менән бүләкләне. Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса ойошманың комьюнити-менеджеры Гүзәлиә Исхакова әйтеүенсә, был уҡыу йортонда ул беренсе тапҡыр түгел һәм һәр ваҡыт сараларҙың юғары кимәлдә үтеүенә һоҡланыуын белдерҙе.

Колледж директоры Ришат Хәжғәле улы йомғаҡлау һүҙендә бындай сараларҙың халыҡтар дуҫлығын нығытыуға, йәштәрҙең бер-береһенең мәҙәниәтенә хөрмәт менән ҡарауына булышлыҡ итеүен билдәләне. Шулай уҡ директор залда ултырған көйәрмәндәрҙең әүҙемлегенә иғтибар йүнәлтте. Сара барышында ҡыҙыҡлы бер традиция барлыҡҡа килде: һәр команда үҙенең милли ашын алып килгәйне, уйын тамамланғас, жюри ағзалары менән бергә күмәкләп сәй эсеү, милли ризыҡтарҙан ауыҙ итеү ойошторолдо.

*ТУҒАН ТЕЛЕМ*

# БАҺАЛЫ БӘЙГЕ БЫЛ!



**Ошо көндәрҙә Өфө фән һәм технологиялар университетының Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетында уҡыусыларҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса Төньяҡ-Көнсығыш олимпиадаһының йомғаҡлау туры үтте.**

Уҡыусыларҙың Төньяҡ-Көнсығыш олимпиадаһы (Северо-Восточная олимпиада школьников) сиктәрендә "Рәсәй халыҡтарының туған телдәре һәм әҙәбиәттәре буйынса федераль уҡыусылар олимпиадаһы" проекты быйыл бишенсе йыл рәттән ғәмәлгә ашырыла. Ул М.К.Аммосов исемендәге Төньяҡ-Көнсығыш федераль университеты тарафынан 57 профиль буйынса Рәсәй Федерацияһы һәм БДБ илдәренең 72 өлкәһендә үткәрелә. Был проектты тормошҡа ашырыуҙа РФ-ның 37 алдынғы университеты ҡатнаша.

Беҙҙең республикала был олимпиаданың ойоштороусыһы булып Өфө фән һәм технологиялар университеты тора. Ойоштороусылар билдәләүенсә, ҡатнашырға теләүселәр һаны ла йылдан-йыл арта ғына бара. Быйыл иһә һайлап алыу турында 778 бала көс һынашҡан, улар араһынан икенсе турға 346 уҡыусы үткән. Һайлап алыу туры 2025 йылдың 11 ноябренән 2026 йылдың 11 ғинуарына тиклем дистанцион рәүештә олимпиада платформаһында үткәрелгән.

Уҡыусыларҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса Төньяҡ-Көнсығыш олимпиадаһы РФ Мәғариф һәм фән министрлығының уҡыусылар олипиадалары исемлегенә индерелгән, был иһә дипломанттар, рус теленән Берҙәм дәүләт имтиханын 75 һәм унан да юғарыраҡ балға тапшырған хәлдә, илдәге юғары уҡыу йорттарының олимпиада профиленә тап килгән йүнәлештәренә инеү өсөн льготалар алаҡ, тигән һүҙ.

Был олимпиадала еңеү яулаған уҡыусыларға Өфө фән һәм технологиялар университетына ингән осраҡта "Педагогик белем биреү" һәм "Филология" йүнәлештәренә өҫтәмә һынауҙарһыҙ инеп, бер йыл буйына ай һайын 60 мең һумлыҡ стипендия һәм ҡунаҡхана тибындағы уңайлы ятаҡта урын алыу мөмкин буласаҡ.

Туған телдәр буйынса олипиаданың әһәмиәте тураһында уҡытыусылар ҙа үҙ фекерҙәре менән бүлеште. Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Хәсәнова Эльмира Салауат ҡыҙы: "Был күркәм, башҡорт телебеҙҙе донъя кимәленә күтәргән, уның киләсәген уйлап ойошторолған олимпиадала бишенсе йыл рәттән ҡатнашабыҙ. Быйыл 8, 9, 10, 11-се кластарҙа белем алыусы 21 уҡыусы менән килдек. Шәхсән уҡыусылар өсөн әһәмиәте бик ҙур был сараның. Еңеүселәргә бик ҙур мөмкинлектәр аса ярыш, шуға күрә уҡыусылар бик теләп, әүҙем ҡатнашалар. Бындай алымдар балаларҙа телебеҙгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята, улар имтиханға әҙерләнеү барышында уның матурлығын күрәләр.

Беҙҙең 20-се гимназия - ул милли мәктәп, уҡыусылар бөтә башҡорт мәктәптәре уҡыған программа буйынса белем алалар. Яҡшы уҡыған уҡыусылар башҡорт телен юғары кимәлдә белә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, мөхит, ҡала шарттары барыбер үҙенекен итә, ауылдарҙа саф башҡортса уҡыған балалар телмәренән бер ни тиклем айырма булыуы мөмкин. Шуға күрә һорауҙар ике телдә бирелеүе бик уңайлы. Әммә яуаптар барыбер тик башҡорт телендә генә яҙылырға тейеш", - тиһә, Ишембай ҡалаһының Ә.-Зәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әмирханова Фаяғөл Тимербай ҡыҙы: "Ни тиклем генә сәйер тойолмаһын, быйыл был ярышҡа беренсе тапҡыр киләм. Үткән йылды икенсе турға туғыҙынсы класс уҡыусылары үткәйне, имтихандар сәбәпле, килә алманылар. Быйыл улар, мотлаҡ барабыҙ, тип, ныҡлап әҙерләнеп, дәртләнеп килделәр. Башҡорт теленең мәртәбәһен, бәҫен, дәрәжәһен юғары кимәлгә күтәреүсе сара был", - тип, ярыштың әһәмиәте хаҡында әйтеп үтте.

Ысынлап та, бөгөнгө көндә мәктәптәрҙә, хатта милли гимназия-лицейҙарҙа башҡорт теле сәғәттәренең ҡыҫҡартылыуы сер түгел. Ошондай шарттарҙа уҡыусыларҙың Төньяҡ-Көнсығыш олимпиадаһы - балаларҙа туған телдәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу, уны тәрәнрәк өйрәнеү теләге уятыусы бик тә урынлы, һөҙөмтәле проект.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

28

# Ғаиләм-ҡәлғәм

20-26 март (буранай) 2026 йыл
№11 (1206)

ӘЙТКӘНДӘЙ...



## ИШЛЕ ҒАИЛӘЛӘР ИҒТИБАРЫНА

### Ташламалар

**Башҡортостанда 5 меңгә яҡын ишле ғаилә коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә льготаны оҙайта ала, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыкты социаль яклау министрлығынан.** Льгота аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләргә, ветерандарға, инвалидтарға һәм радиациянан зыян күргәндәргә бирелә. Былтыр был сара 4777 ғаиләгә ҡағылды. Республикала льгота биреү тураһында ҡарар ҡабул итеү осоро 10 көндән 2 көнгә тиклем ҡыҫҡартылды, ә компенсация алыу тураһында белешмәләр 10 көн урынына хәҙер өс эш көнө эсендә бирелә. Ғөмүмән, өс йәки унан күберәк бәлиғ булмаған, шул иҫәптән тәрбиәгә йәки опекаға алынған балалар тәрбиәләгән ғаилә ишле тип иҫәпләнә. Шул уҡ ваҡытта 23 йәшкәсә студент балалары булһа, ғаилә күп балалы тигән статуска эйә. Башҡортостанда бер кешегә килеме йәшәү минимумынан (айына 13 753 һум) артмаған ғаилә аҙ тәьмин ителгән тип иҫәпләнә.

### Социаль гарантиялар

**Дәүләт Думаһы "Герой-әсә" исеменә лайыҡ булған ҡатын-ҡыҙҙарға социаль гарантиялар тураһында закондар ҡабул итте.** Хәҙер улар, Рәсәй һәм Хеҙмәт геройҙары кеүек, социаль өҫтөнлөктәр менән файҙалана ала. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Герой-әсә" исеме 10 һәм унан күберәк бала табып, тәрбиәләп үҫтергән ҡатын-ҡыҙҙарға бирелә. Социаль гарантияларға сираттан тыш медицина ярҙамы күрһәтеү, торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙән азат итеү, бушлай ер участкаһы алыу хоҡуғы, эшкә урынлашыу һәм бушлай һөнәри белем алыу өсөн өҫтәмә мөмкинлектәр һәм башҡалар инә. Льготалар урынына ҡатын-ҡыҙҙар айлыҡ түләүҙе һайлай ала - 72 403 һум, ул йыл һайын индексациялана. Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыкты социаль яклау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республикала 10 ҡатын-ҡыҙ "Герой-әсә" исеменә лайыҡ булған.

### Уллыҡҡа алыусылар

**Башҡортостанда уллыҡҡа алыусыларға бер тапҡыр бирелә торған түләү суммаһы билдәле булды.** Хәҙер баланы ғаиләгә тәрбиәгә тапшырғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие район коэффициентын иҫәпкә алып, 32 718,02 һум була, элек 30 982,97 һум ине, тип хәбәр иттеләр Социаль фондтың республика буйынса бүлексәһененең матбуғат хеҙмәтенән. Айырым осраҡтарҙа, ғаилә 7 йәше тулған баланы, шулай уҡ ике һәм унан күберәк бер туғанды тәрбиәгә алған осраҡта, пособие күләме 1 февралдән 249 992,30 һумға тиклем индексацияланды. Бер тапҡыр түләнә торған аҡса ғаиләгә тәрбиәгә алынған һәр бала өсөн бирелә. Аҡсаны уллыҡҡа алыусылар, опекундар, тәрбиәгә алған ата-әсәләр һәм попечителдәр, шулай уҡ Рәсәйҙә даими йәшәгән сит ил граждандары һәм гражданлығы булмаған кешеләр алырға хоҡуҡлы. Түләүҙе Социаль фонд бүлексәһендә, күп функциялы үҙәктә йәки Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша баланы ғаиләгә ҡабул иткәндән һуң 6 ай эсендә алырға мөмкин. Түләү тураһында ҡарар 10 эш көнө эсендә ҡабул ителә, аҡса раҫланғанғас, 5 эш көнөнән һуң күсерелә. Былтыр Башҡортостанда 1202 ғаилә ошо түләүҙе алды, тип өҫтәнеләр ведомствола.

### Әсәлек капиталынан...

**Башҡортостанда балалы ғаиләләр Әсәлек капиталы аҡсаһынан арттырылған түләүҙәр ала башланы.** Түләүҙәр ай һайын башҡарыла, уның күләме - 16 350 һум, был иһә республикала бала өсөн йәшәү минимумына тиң. Бындай түләүҙе ғаиләнең һәр ағзаһына уртаса килеме республикала йәшәү минимумының икеләтә дәүмәленән артмаған ғаиләләр алырға хоҡуҡлы - 33 712 һум. Башҡа бер ниндәй ҙә сикләүҙәр юҡ. Сумма ғаиләнең уҙған 12 айҙағы килеменә ҡарап иҫәпләнә. Пособие бер йылға бирелә, уны оҙайтыу мөмкинлеге лә бар. Ғаризаны бала тыуғандан һуң өс йыл дауамында "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында, Күп функциялы үҙәк бүлексәһендә, шулай уҡ Рәсәйҙең Социаль фондына барып тапшырырға мөмкин.

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

## ОПТИМИСТ ИТЕП ТӘРБИӘЛӘ



**Һәр ата-әсә үҙенең балаһын киләсәктә уңышлы итеп күргеһе килә. Ә бар йәһәттән дә уңышҡа өлгәшеүҙең бер сере, ғалимдар раҫлауынса, оптимист булыуҙа.**

Оптимистар - донъяға позитив мөнәсәбәт менән ҡараған кешеләр. Улар уңышһыҙлыкты тыныслыҡ кисерә, ауырлыкты еңелерәк үтә, киләсәккә ышаныслыраҡ ҡарай һәм һәр ваҡыт барыһының да яҡшы булырына шикләнмәй. Бындай кешеләр һирәгерәк ауырый һәм оҙағыраҡ йәшәй. Иманым камил, барлыҡ атай-әсәйҙәр ҙә балаһының төрлө сирҙәргә бирешмәйенсә, бәхетле оҙон ғүмер кисереүен теләй. Тимәк, һәр ата-әсә балаһында оптимислыҡ тәрбиәләү сараһын күрергә, ә быны өсөн, тәү сиратта, үҙҙәре позитив тулҡында йәшәргә тейеш. Бала айырыуса әсәһенең кәйефенә, күнел торошона һиҙгер була - әсә кешегә һәр ваҡыт ошоно иҫтә тоторға кәрәк. Ғаиләләге ололар тормоштан ҡәнәғәт булып, тирә-йүндәгеләр менән дуҫтарса мөнәсәбәт ҡороп, күнелле йәшәйҙәр икән, бала ла тормошто яратыусан булып үҫә. Шуға күрә, бала алдында ниндәй гәнә хәлдәр килеп тыумаһын, күнел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙән, ғауға ойоштороуҙан ҡасыу мөһим

Балаға донъяның матур һәм күркәм икәнлеге, уның һәр кемгә лә күп мөмкинлектәр биреүе һәм төрлө юлдар асыуы тураһында аңлатыу мөһим. Ләкин баланы ысынбарлыҡтан ҡурсалап, күнелһеҙлектәрҙән йәшерергә тырышыу ҙа хата, сөнки ҡасан да булһа ул тормош ауырлыҡтары менән күҙмә-күҙ осрашасаҡ һәм ысынбарлыҡ уны һындырырға мөмкин. Шуға күрә, уңайы сыҡҡанда, балаға тормоштағы көрсөктәрҙең ҡотолғоһоҙ булыуын һәм уларҙы енеп сығыу өсөн үҙендә көс табыу мөһимлеген аңлатығыҙ. Бының өсөн уға ғаиләлә уҡ үҙенең тәүге хаталарын эшләргә, тәүге ауырлыҡтарын үтергә юл ҡуйығыҙ. Быларҙың барыһы ла баланың шәхес булып формалашыуының айырылғыһыҙ өлөшө. Мотлаҡ рәүештә балала үҙ-үҙенә ышаныс тәрбиәләү мөһим. Бөтә проблемаларҙы ла хәл итеп була, барлыҡ хәлдәрҙән лә сығыу юлы бар - ошоно бала күңеленә һеңдереү кәрәк. Уны үҙенең хаталарынан ҡурҡмаҫҡа өйрәтегеҙ. Кем бер нәмә лә эшләмәй, шул ғына хаталанмай - ошо дөрөҫлөктө бәләкәй саҡта уҡ төшөнгән кеше тормошонда мөһим әһәмиәткә эйә булған аҙымдарҙы эшләүҙән ҡурҡмай, бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамайынса, алға барыуын дауам итәсәк. Баланы хатаны төҙәткәндә һәм унан тейешле һығымталар эшләгәндә барыһы ла яҡшы буласаҡ икәненә ышандырыу ҙа тик ыңғай роль уйнай.

Һәр бала хыялланырға ярата. Бер ҡасан да баланың хыялынан көлмәгеҙ. Уның һәр хыялын йөпләп, ыңғайға көйләп торған ғаиләлә үҫкән бала иртәгәһе көнгә ышаныс менән ҡарарға, киләсәктән ҡурҡмаҫҡа өйрәнә. Бала менән аралашҡанда "булмай", "килеп сыҡмай", "һинең хәлеңдән килмәй" һәм башҡа кире һүҙҙәр ҡулланыуҙан тыйылыу мөһим. Киреһенсә, уның һәр башланғысын хуплап, дәртләндереп тороу яҡшы. Ата-әсәһенең үҙенә булған ышанысын тойоп үҫкән бала һәр саҡ уңышҡа өлгәшә. Баланы үҙенең алдына аныҡ маҡсат ҡуйырға һәм бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамайынса, шуға өлгәшергә ынтылырға өйрәтеү ҙә киләсәктә үҙенең ыңғай һәҙәмтәләрен бирмәй ҡалмаясаҡ.

Оптимист тәрбиәләүҙә юмор хаҡында ла онотмағыҙ. Ул күпселек балалыҡ ҡурҡыуҙарынан ҡотҡарырға һәләтле. Шуға күрә, күберәк йылмайығыҙ, шатланығыҙ һәм балала ла ошо уҡ сифаттарҙы тәрбиәләгеҙ. Ләкин йылмайыуығыҙ ысын күңелдән булһын, йөрәктән сыҡһын, сөнки балалар алдаҡты һәм икейөҙләнеүҙе тиҙ күрә һәм тоя. Һәм иң мөһиме - баланың һәр йылмайыуын күрә һәм хуплай белегеҙ. Уның шатланып йылмайыуын уртаҡлашығыҙ, бергә йылмайығыҙ, сөнки йылмайыу - тормошҡа позитив ҡараштың бер сағылышы.

**Регина ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**психолог.**

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

## ТЫЙЫРҒАМЫ, ЮҠМЫ?

**Тыйыу алымы - тәрбиә өлкәһендәге иң сетерекле һәм үҙенсәлекле күренеш. Ғөмүмән, тыйыу ниндәй характерҙа булырға тейеш? Тыйып ҡына баланы тәрбиәләп буламы? Уҡыусыларыбыҙҙан фекерҙәр көтәбеҙ.**

- Кешелек йәмғиәте булған ерҙә тыйыу һәр ваҡыт буласаҡ. Баланы тыймаһаң, тәртипһеҙлектәр буласаҡ, тигән фекер бар. Тыйыуға барып еткән баланың ата-әсәһе кем һуң? Кеше менән идара итеү өсөн дә тыйыу алымын ҡулланыу осраҡтары булыуы мөмкин. Ә кешенең тәбиғәте шундай: уны тыялар, ә ул киреһен эшләй - ҡыҙыҡ күреп тә, киреләге арҡаһында ла. Тәбиғәттән, тимәк, тыйыу кеше өсөн хас түгел.

Ата-әсә үҙенең балаһын ни өсөн тыя? Улар быға хоҡуғы бар, тип уйлай. Йәнә улар балаһының киләсәге өсөн ҡурҡа. Әгәр ошо ҡурҡыу тойғоһо булмаһа, тыйыу ҙа булмаҫ ине. Ҡасандыр нығ тыйылған кеше һуңынан икеләтә арттырып килеһе быуынды тыя. Тыйыуҙы иректе сикләү, тип аңларға мөмкин. Ә беҙҙә тыйыу баланы киләсәктә бәхетле, тәртипле итә, тигән яңылыш фекер йөрөй. Тәртип иһә үҙе уҡ ҡанун, ҡалыпҡа һалыусы.

Бала тыйылмаған хәлдә лә яҡшы-яманды айыра белә. Иң мөһиме - ирекле булһын. Балаға һөйөүҙән башҡа бер ни ҙә биреп булмай. Ата-әсә балаһын ни тиклем ярата, шул тиклем күҙәрәк тыялыр, һымаҡ. Баланы тыйыу биләүҙәргә төрөп, сәңелдәккә һалғанда уҡ башлана. Балаларға йомшағыраҡ булығыҙ - ул ирекле, бәхетле булып үҫһен. Әммә мин көндәлек тыйыуҙарға ҡаршы түгелмен: мәҫәлән, быҫраҡ йөрөмә, шырпы менән уйнама һ.б. Ләкин әхлаҡи тыйыу ул кеше күңеленә һорауһыҙ үтеп инеү менән бер ул.

**Рауил ДАЯНОВ,**
**юрист.**

✓ *Бәхетемә күрә, институтта Миләүшә Мортазина класына эләктем. Радик Гәрәев, Вәхит Хызыров, Дилара Иҙрисова һәм дә беҙҙең бөйөк опера йырсылары Илдар менән Асҡар Абдразаҡовтар - уның уҡыусылары.*

# ҮҘ ЙЫРЫБЫҘҘЫ

## был беҙҙең Рәхимовтарҙың

(Башы 1-се биттә).

**Иң башта гәзит уҡыусыларҙы һеҙ үҫкән мөхит менән таныштырығы килә. Ниндәй ғаиләлә үҫтегеҙ? Ир ҡатыны, әсәй булырға, ғаилә башлығы, атай булырға кемдәрҙән өлгө алдығыҙ?**

**Рим Рәхимов.** Минең атайым Рафиҡ Рәхимов сығышы менән Дәүләкән районынан, әсәйем Люциә Ҡыйғы районында тыуып үҫкән. Әсәйем ун биш йәшендә Ҡыйғы районының Юныс ауылынан Өфөгә килә. Шунда "Мясокомбинат" тигән яҙыуҙы күрә һәм уны бер университет һымаҡ ҡабул итә. "О-о-о, мин шунда эшкә барырға тейешмен!" ти ҙә, комбинатҡа эшкә урынлаша. Минең егәрле әсәйем хеҙмәт алдынғыһы булып китә, совет заманында депутат та булып йөрөнө. Атай менән әсәйҙе яҙмыш Өфөлә осраштыра, беҙ, уларҙың өс улы ла, баш ҡалала тыуып үҫтек. Мин бәләкәй саҡта Телеүҙәктән алыҫ булмаған урында баракта йәшәй инек. Элек фатирҙы бушлай бирә торғайнылар бит, "Химпром"да егерме йыл эшләгәндән һуң атайыма яңы йорттан өс бүлмәле фатир бирҙеләр. Шул мәл ҙур шатлыҡ кисереүебеҙ иҫтә тороп ҡалған. Ағайҙарым Роберт менән Ринат һәм мин - өсөбөҙ ҙә бер театрға, бер операға хеҙмәт итәбеҙ.

**Ни өсөн Рәхимовтарҙың өс балаһы ла сәнғәт юлын һайланы? Атай-әсәйегеҙ ул даирәгә яҡын тормай кеүек...**

**Рим Рәхимов.** Ике яҡ та элек-электән йыр-моң донъяһынан айырылмаған. Әле лә шулай, ике яҡтан да үҙешмәкәр йырсылар күп. Әсәйемдең ике ҡустыһы Шәрифулла менән Зәйнулла абзыйымдарҙың ҡулында һәр саҡ музыка ҡоралы - береһе гармун тотһа, икенсеһе баянды эләктерә. Һәр төрлө конкурстарҙа арыу-талыу белмәй ихлас ҡатнашып йөрөйҙәр. Әсәйем яғынан ҡартатайымдың ике туған ағаһы Ирек Ибраһимов Фәйзи Ғәскәров менән бергәләп бейеү ансамблен ойошторалар. Әсәйем дә милли сәнғәткә ғашиҡ кеше, уның иң ҙур хыялы - улдарын ҙур сәхнәләрҙә күреү ине. Сәнғәткә булған һөйөүен беҙгә тапшыра алды. Баракта йәшәгән саҡта уҡ әле телевизорҙан концерт күрһәтһәләр, шуларҙы яҙҙырып, ҡулыбыҙға гармун тоттороп, йырлата торғайны. Әҙерәк ҙурая биргәс, атайым өлкән ағайыма гитара һатып алды. Ағайым уйнай, үҙе йырлай башланы. Бер ни тиклем ваҡыттан Ринат ағайым да уға эйәрҙе. Өсөнсө класты бөткәндә мин дә ҡулыма гитара алдым. Ринат ағайымды әсәйем тура Өфө сәнғәт училищеһына алып барҙы. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында хорҙа ул әлегә тиклем "юғары кимәлдә башҡарыусы" һанала. Ринат ағайым беренсе курсты тамамлағас, икенсе йылы Роберт ағайым да ошо уҡ училищеға уҡырға инде. Уҡый башлау менән Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына хорға эшкә барып та инде. Шул рәүешле ағайымдар миңә йыр сәнғәтенә юл астылар. Мәктәпте тамамлағас, Өфө сәнғәт институтына (ул саҡта академия тип атала ине), шулай уҡ сәнғәт училищеһының ике бүлегенә - хорға һәм вокалға - имтихан бирҙем. Һәм уҡырға инеп киттем. Бәхетемә күрә, институтта Миләүшә Мортазина класына эләктем. Әйткәндәй, уға быйыл йөҙ йәш тула. Уҡытыусыма сәләмәтлек кенә теләйем! Радик Гәрәев, Вәхит Хызыров, Дилара Иҙрисова һәм дә беҙҙең бөйөк опера йырсылары Илдар менән Асҡар Абдразаҡовтар -уның уҡыусылары. Улар беҙгә дәрескә килһә, оло ваҡиға, ҙур бер шатлыҡ була торғайны. Сөнки улар, үҙ һөнәренең оҫталары булараҡ, беҙгә кәңәш бирәләр, фекерҙәрен әйтәләр. Ғөмүмән, һәр йәһәттән улар беҙҙең өсөн үрнәк булып торҙо.

**Айым Рәхимова.** Атайым Башҡортостандың халыҡ артисы, йырсы Радик Вәлмөхәмәтов - ғүмерен сәхнәгә арнаған шәхес. Әсәйем Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Гөлсәсәк Арыҫлан ҡыҙы Яҡшығолова бар ғүмерен мәктәп эшенә бирҙе. Сәнғәт эсендә ҡайнамаһа ла, уға ынтылышы ныҡ көслө булды. Ҡәйнәм менән ҡайным кеүек, ул да балаларының бәләкәйҙән сәхнәлә булыуҙарын теләп ултырҙы. Ҡустым Айтуған Вәлмөхәмәтов опера һәм балет театрында эшләй, солист. Атайымдың ҡустыһы Рушан Биктимеров - шулай уҡ халыҡ артисы, танылған ҡурайсы. Атайымдың бер туған апаһы Фатима Хәйретдинова күп йылдар математика уҡытыусыһы булып эшләһә лә, сәнғәттән айырылманы. Хәҙерге ваҡытта "Селтәр" студияһын етәкләй. Оҫта бейеүсе "Байыҡ" конкурсында Гран-при яуланы. Әле яңыраҡ ҡына Башҡорт дәүләт филармонияһында атайымдың юбилей концерты үтте. Унда барыбыҙ ҙа ҡатнаштыҡ. Атайҙың һәр бер концертында беҙ сығыш яһайбыҙ.

Мине әсәйем алты йәштән музыка мәктәбенә фортепьяно бүлегенә уҡырға бирҙе. Алтынсы класҡа Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатына уҡырға килдем, унда бер генә йыл уҡыным. Сөнки сәнғәткә ынтылышым көслө ине, ә гимназияла ундай йүнәлеш юҡ, шуға Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназияһына фортепьяно бүлегенә уҡырға индем. Алтынсы кластан музыка менән профессиональ кимәлдә шөғөлләнәм. Гимназияла шулай уҡ хорға, вокал дәресенә йөрөнөм. Башҡортостандың халыҡ артисы Ғәлиә Солтанова уҡытыусым булды. Ун беренсе кластан һуң Өфө сәнғәт училищеһына киттем. Теория бүлеген тамамлағас, әсәйем: "Һиңә профессиональ йырларға өйрәнергә кәрәк", - тип, ошо уҡ уҡыу йортоноң йыр бүлегенә инергә тәҡдим итте. Ул ваҡытта Тәнзилә Үҙәнбаева училищела йыр бүлегенең мөдире ине. Профессиональ белемем ҙур - теория бүлеген бөткәнмен - улар мине тыңлап ҡарағандан һуң: "Бында уйларға ла кәрәкмәй, беҙ һине өсөнсө курсҡа алабыҙ", - тинеләр. Вокал бүлегендә ике йыл ғына уҡыным, ҡалған дәрестәр миңә бөтөнләй ауыр булманы. Алты йәштән фортепьянола уйнағас һәм ул минең яратҡан уйын ҡоралым булғас, миңә уҡыу еңел бирелде. Училищены тамамлағас, тура Өфө сәнғәт институтына уҡырға индем.

**Нисек булды яҙмыштарҙы бергә бәйләгән танышыуығыҙ?**

**Айым Рәхимова.** Беҙ институтта төрлө ваҡытта уҡыныҡ. Ул саҡта бер-беребеҙҙе белмәй инек. Буласаҡ тормош иптәшем менән танышҡанда миңә егерме дүрт йәш ине.

**Рим Рәхимов.** Мин институтты тамамлап, армияға киттем. Кире ҡайтҡанда Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры реконструкцияға ябылғайны. Унда йыл ярым эшләгәс, Томск өлкәһендәге Северск тигән ябыҡ ҡалаға киттем, шунда эшләп алдым, ярты йылдан тыуған яҡҡа кире ҡайттым, театрға яңынан эшкә алдылар. 2014 йыл ине, шунда Айым менән таныштыҡ.

**Айым Рәхимова.** Көҙ айы. Мин беренсе курста уҡып йөрөйөм. Бер мәл уйлап ултырам: "Уй, миңә икенсе йыл егерме биш тула, ә мин һаман да уҡыйым, кейәүгә сығырға ла ваҡыт еткән түгелме ни миңә?" Шул мәлдәрҙә беҙ таныштыҡ та инде. Бер саҡ Иҙел Аралбаев - беҙҙең дуҫыбыҙ - ятаҡта бүлмәбеҙгә килеп инде лә: "Ҡыҙҙар, мин аш бешергәйнем, ҡоротоғоҙ бармы?"- тип һораны. Мин: "Бар, бына өләсәйем ҡайнатҡан ҡорот. Әбйәлил ҡорото", - тип, уға ҡорот сығарып бирҙем. "Ҡоротто алам, әйҙәгеҙ, беҙгә аш ашарға төшөгөҙ", - тине Иҙел. Иптәш ҡыҙым менән уның бүлмәһенә барҙыҡ.

**Рим Рәхимов.** Ә мин шул уҡ бүлмәлә йәшәгән дуҫ егетем Салауат Кейекбаевҡа ҡунаҡҡа барғайным. Шунда мин беренсе тапҡыр Айымды күрҙем һәм Әбйәлил ҡоротон тәмләп ҡараным. Хәҙер көн дә ашайым.

**Айым Рәхимова.** Шулай танышып киттек. Мин ул ваҡытта Рим тураһында ишеткәнем юҡ ине. Әгәр ҙә училище-




*Беҙҙең әсәйебеҙ ул яҡтан ныҡ талапсан ине. Әле лә ул: "Улым, башҡортса әйт", - тип кенә тора. Беҙ үҙебеҙ ҙә башҡортса һөйләшергә, аралашырға ынтылып торҙоҡ. Айырыуса Роберт ағайым шул тиклем башҡорт рухлы илһөйәр. Телде яҡшы белә. Бәләкәй саҡта, нишләптер, "мама-папа" тип әйтә торғайныҡ. Роберт ағайым, үҫкәс, үҙенән-үҙе "атай-әсәй" тип өндәшә башланы. Уға эйәреп, беҙ, ҡустылары ла, артабан "атай-әсәй"гә күстек. Кешенең үҙенән тора бит ул туған телдә һанлау, уны белергә ынтылыу. Һәм, әлбиттә, атай-әсәйҙең мөнәсәбәтенән, тәрбиәһенән дә күп нәмә тора.*

✓ *Ҡустым менән үҙ-ара урыҫса һөйләшә башлаһаҡ, әсәйем беҙҙе шундай уҡ туҡтата ла: "Өйгә инеү менән тик башҡорт телендә һөйләшәбеҙ, урыҫ теле ишек артында торып ҡала", - тип ҡаты итеп әйтә ине.*

# ЙЫРЛАП ЙӘШӘЙБЕҘ - төп йолаһы

ла уҡыған булһа, бәлки, беҙҙең юлдар иртәрәк тә киҫешкән булыр ине. Мин институтҡа ингәндә, ул инде тамамлаған ине бит инде. Артабан күрешә башланыҡ, һөйләшәбеҙ, һөйләшеп һүҙ бөтмәй. Сөнки уртаҡ темалар күп, сәнғәт, театр, йырсылар, мәҙәни мөхит... Шулай башланып китте аралашыу. Кемдәрҙер йылдар буйы осраша, беҙ оҙаҡ уйламаныҡ. Баштан уҡ етди булды үҙ-ара мөнәсәбәт.

**Рим Рәхимов**. Ун бишенсе йылда мин ауыр хәлгә тарыным. Дауаханала яттым. Айым һәр саҡ минең эргәлә булды.

**Айым Рәхимова.** Эйе, һәр саҡ эргәһендә булдым, тәрбиәләнем. Шул саҡта Рим, моғайын, "Был ҡыҙ миңә терәк, таяныс, ул миңә кәрәк", - тип уйлағандыр. Бер нисә айҙан, үҙенең тыуған көнөндә, ул миңә тәҡдим яһаны, никах уҡытып, артабан туй яһап, өйләнешеп тә ҡуйҙыҡ. Тағы ла бер йылдан улыбыҙ тыуҙы, әммә мин уҡыуҙы ташламаным. Институтта мин Раилә Шәрәфи ҡыҙы Аҙнаҡаева класында уҡый башланым, вокал дәрестәрен алдым. Училищела ғына түгел, бында ла мин ике бүлектә белем алдым. Йәнә лә этномузыкология факультетында Гөлназ Салауат ҡыҙы Галинала дүрт йыл уҡыным, бакалаврҙы һәм ике йылдан магистратураны тамамланым. Гөлназ Галина менән "Мәжит Самиғулла улы Алкиндың ижади портреты" тигән ҙур эш яҙҙыҡ, магистратураны тамамлағанда уны тағы ла киңәйттек. Яҙыу эшенә лә күңелем нык ята, шуға ихлас, яратып эшләнем. Уҡытыусым мине әле лә музыка белгесе булырға әйҙәй. Хәҙерге мәлдә Гөлназ Галина һәм Миләүшә Иҙрисова - был өлкәлә иң нык шөғөлләнгән белгестәр. Улар был маҡтаулы эште профессиональ кимәлдә артабан дауам итеүсе кеше эҙләйҙәр. Гөлназ Салауат ҡыҙының ошо турала борсолоуын да, хәстәрен дә яҡшы аңлайым.

▸ **Һеҙҙең балалар әле бәләкәй. Шул уҡ ваҡытта, Айым, һеҙ кескәйҙәр менән эшләргә ваҡыт, мөмкинлек табаһығыҙ...**

**Айым Рәхимова.** Беҙҙең өсөнсө бәпескә ике йәш, мин әле декрет отпускаһында. Ун һигеҙенсе йылда "Тамыр" телеканалына эшкә урынлаштым. "Тамыр" йыр ансамблендә балалар менән шөғөлләнәм. Ике йыл эшләгәс, Гөлназ Фәрит ҡыҙы: "Тапшырыу ҙа алып бар, һин булдыраһың, беҙ һиңә ышанабыҙ", - тине. Бына шулай итеп, "МузКәрәҙ"ҙе миңә тапшырҙылар. Яңыртылған вариант шулай: беҙ унда балалар менән төрлө күнегеүҙәр эшләйбеҙ, мин уларҙы йырлатам, шунан беҙ махсус саҡырылған берәй танылған йырсы менән аралашабыҙ. Был формат бик матур, тип уйлайым. Рәйлә Шәрәфи ҡыҙында уҡығанда, ул миңә гел генә: "Тауышың ныҡ матур, һин радиоламы, телевидениеламы эшләргә тейешһең", - ти торғайны. Ул миңә юл күрһәтте һымаҡ. Ысынлап та, яратам ошо эшемде. Балалар менән эшләү, уларға вокал дәрестәр биреү оҡшай. Балалар ҙа мине ауыҙҙарын асып тыңлайҙар. Гөлназ Фәрит ҡыҙы ла: "Балалар һине ярата", - ти. Башҡаларҙан да: "Уҡытыусы булараҡ, һин улар менән уртаҡ тел таба беләһең", - тигәнерәк фекерҙәр ишетәм. Былар бөтәһе лә мине ҡанатландыра.

Йырға килгәндә, алдан уҡ бөтәһе лә минең өсөн ыңғай ғына барҙы, тип әйтә алмайым. Шулай ҙа шөғөлләнеүҙән туҡтағаным юҡ, мин йырлайым. Рим менән дә дуэттарыбыҙ бар, төрлө сараларҙа сығыштар яһайбыҙ.

▸ **Балаларығыҙҙы ла барлап китәйек әле...**

**Айым Рәхимова.** Кәрим улыбыҙ 2016 йылда тыуҙы. Әле туғыҙ йәш, өсөнсө класта уҡый. Урта махсус музыкаль колледжда баян класында белем ала. Беҙ уҡытыусынан уңдыҡ, Руслан Рахманғолов оҫталыҡ серҙәренә төплө итеп өйрәтә. Училищела һәм институтта уҡыған саҡтарҙа мин театрҙарға йыш йөрөй торғайным, бер спектаклде лә ҡалдырғаным булманы. Пушкин урамы, Совет майҙаны, Аксаков баҡсаһы аша үтеп-сүтеп йөрөгәндә: "Балаларым булһа, ошо колледжға уҡырға бирәм",- тип уйлай торғайным. Рим дә хәҙер ошо колледжда бәләкәй генә ставкаға иллюстратор булып эшләй. Өлкән класс балалары фортепьянола уйнай, ә Рим уларға йырлай. "Етер, унда эшләмәйем", - тигән саҡтары ла була, "Юҡ, беҙҙең балалар ҙа ошонда уҡый бит", - тием. Бына шулай дүрт йәштән Кәрим улыбыҙ ошо колледжда шөғөлләнә. Икенсе улыбыҙ Камилды дүрт йәштән әҙерлек класына йөрөтә башланыҡ. Ул әле бәләкәй, быйыл ғына уҡырға барасаҡ. Профессиональ сәнғәт юлына баҫтырам, тиһәң, балаларҙы музыкаль белем алырға бик иртә йөрөтә башларға кәрәк, тип әйтәләр бит. Өс йәштән фортепьяноға, скрипкаға ултырталар. Өсөнсө балабыҙ, Әлсәнә исемле ҡыҙыбыҙ, тағы ла зирәгерәк булыр, уны хатта өс йәштән фортепьяноға ултыртып булыр, тип уйлайым.

▸ **Башҡорт әсәйе, атайы үҙҙәренең балаларына үҙегеҙҙәге ихлас башҡортлоҡто, туған телде дауам итеп күсерә, һөйөү тәрбиәләй аламы икән?**

**Айым Рәхимова.** Минең әсәйем башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, беҙгә, балаларына, туған телгә һөйөү тәрбиәләргә тырышты. Ҡустым менән урамда төрлө милләт балалары менән аралашып инәбеҙ ҙә, үҙ-ара урыҫса һөйләшә башлаһаҡ, ул беҙҙе шундай уҡ туҡтата ла: "Өйгә инеү менән тик башҡорт телендә һөйләшәбеҙ, урыҫ теле ишек артында торып ҡала", - тип ҡаты итеп әйтә ине. Ҡышҡы, йәйге каникулдарҙы Әбйәлилдә өләсәй-олатай янында үткәрә инек, йәғни беҙ гел башҡорт мөхитендә үҫтек.

Рим менән өйләнешкәс, тәүге йылдарҙа ҡәйнәмдәр менән бергә йәшәнек. Беренсе балабыҙ тыуғас, ҡәйнәмдәргә лә: "Әйҙәгеҙ, балаға тик башҡортса ғына өндәшәйек, тик башҡортса ғына өйрәтәйек", - тинем. Уларҙың ғаиләһендә лә был ҡағиҙә күҙәтелә ине, әлбиттә. Ҡайным менән ҡәйнәм әле лә гел эргәлә, балаларыбыҙҙы ҡарашырға ярҙам итәләр. Уларға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Улар ярҙам итмәһә, беҙгә бик ауырға тура килер ине. Балаларыбыҙҙы тәрбиәләүҙә ҡәйнәм менән ҡайнымдың роле баһалап бөткөһөҙ.

**Рим Рәхимов.** Беҙ рус мәктәбендә уҡыныҡ, дуҫтар ҙа гел шул милләттән булды. Айым: "Атай-әсәй йәй башланыу менән беҙҙе ауылға алып ҡайта ине", - ти. Улар йәй бөткәнсе шунда йәшәгәндәр. Ә беҙ күберәк ҡалала үҫтек. Әсәйем: "Барығыҙ, ауылға ҡайтып килегеҙ, башҡортса ныҡлап һөйләшергә өйрәнерһегеҙ",- тип, беҙҙе лә ҡайһы саҡ ауылға ебәрә торғайны, әлбиттә. Ә былай беҙ ғаиләлә башҡорт телен ишетеп, башҡортса һөйләшеп үҫтек. Беҙҙең әсәйебеҙ ул яҡтан ныҡ талапсан ине. Әле лә ул: "Улым, башҡортса әйт", - тип кенә тора. Беҙ үҙебеҙ ҙә башҡортса һөйләшергә, аралашырға ынтылып торҙоҡ. Айырыуса Роберт ағайым шул тиклем башҡорт рухлы илһөйәр. Телде яҡшы белә. Бәләкәй саҡта, нишләптер, "мама-папа" тип әйтә торғайныҡ. Роберт ағайым, үҫкәс, үҙенән-үҙе "атай-әсәй" тип өндәшә башланы. Уға эйәреп, беҙ, ҡустылар ла, артабан "атай-әсәй"гә күстек. Кешенең үҙенән тора бит ул туған телде һанлау, уны белергә ынтылыуы. Һәм, әлбиттә, атай-әсәйҙең мөнәсәбәтенән, тәрбиәһенән дә күп нәмә тора.

**Айым Рәхимова.** Эйе, атай-әсәйҙән тора күп нәмә. Бына минең әсәйем был йәһәттән дә беҙҙе ҡаты тотто. Урыҫ теленә өйрәтеп ултырманы, уны беҙ үҙебеҙ өйрәндек. Ә инде үҙебеҙҙең балаларға килгәндә, өлкән улыбыҙ Кәримде беренсе класҡа тиклем башҡорт теленә өйрәтеүе еңел булды. Камилдың теле әҙерәк боҙолдо, тип әйтергә кәрәктер. Телевизорҙан йәнһүрәттәр, уҡырға-танырға өйрәткән һандармы, төрлө тәстәр, уйындар булһынмы, шуларҙы күберәк ҡараны, тыңланы. Ә улар барыһы ла урыҫ телендә бит. Шуға теле ике яҡҡа бүленде. Бына өсөнсө балабыҙ Әлсәнә менән тик башҡортса ғына һөйләшәбеҙ. Әле яңыраҡ ҡына ике йәш тулды ҡыҙыбыҙға, беҙгә башҡорт телендә бик күп китаптар бүләк иттеләр. Бәләкәй саҡта әсәйебеҙ беҙҙән туған телде нисек талап иткән, мин дә шулай итергә тырышам. Дуҫтары менән аралашҡанда иһә балалар урыҫ теленә күсәләр. Әсәйем һымаҡ, мин дә улдарыма: "Иптәштәрең менән урыҫса һөйләшһәң дә, өйгә ҡайтҡас, беҙҙең менән тик башҡортса һөйләшәһең", - тием.

▸ **Хәҙер инде үҙегеҙҙең ғаилә традициялары, йола-ҡанундары менән дә таныштырып үтһәгеҙ ине...**

**Айым Рәхимова.** Беҙҙең ғаилә концерттары - төп йолабыҙҙыр, моғайын. Яңғыҙ ҙа, дуэт менән дә йырлайбыҙ. Күптән түгел концерт ҡуйып ҡайттыҡ. Кәрим үҙенең баяны менән айырым сығыш яһаны. Атайымдың концертында ла сығыш яһаныҡ. Үҙебеҙҙең "Ғаилә - ул бәхет" тигән ғаилә йырыбыҙ ҙа бар. "Тамыр" концертында тәү тапҡыр шул йыр менән сығыш яһағайныҡ. Был йыр интернет селтәрендә йөрөй, популяр йырҙарҙың береһе:

*Ил тотҡаһы - татыу ғаилә,*
*Шулай икәнлеген мин беләм!*
*Әсәйҙәр тибрәткән бишектә*
*Илдең киләсәге бәүелә!*

*Рәхмәт, атайым,*
*рәхмәт, әсәйем,*
*Һеҙ булғанға доньялар йәмле,*
*Һеҙ беҙгә ҡояш,*
*иң нурлы йыһан*
*Бергә саҡта*
*беҙ иң-иң бәхетле!*

Әйтергә кәрәк, балаларыбыҙ башҡортса бик матур йырлайҙар. Әле яңыраҡ ҡына "Любезники-любизар" йырын өйрәттек. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеп, еткереп йырлауҙарына ҡыуанабыҙ.

Йырсы булараҡ, Римдең Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрындағы спектаклдәренән тыш та сығыштары бик күп. "Тауыштар" тигән төркөмдәре бар. Унда дүрт егет сығыш яһай - Рим үҙе, ҡустым Айтуған, Азамат Дауытов, Альберт Зәйҙуллин. Ғөмүмән, беҙ сәнғәт менән йәшәйбеҙ. Һәр байрамда шулай уҡ сәнғәт доньяһында ҡайнаған туғандар менән бергә йыйылышабыҙ, матур итеп күңел асабыҙ. Бөтәһе лә йыр-моңға әүәҫ булғас, музыка тынмай. Балалар ҙа шуны күреп үҫә. Кәрим олаталары-өләсәләре өсөн баянда уйнап ебәрә. Өлкән быуын өсөн айырыуса ҙур шатлыҡ был.

**Рим Рәхимов.** Беҙ һәр төрлө Хөкүмәт проекттарында ҡатнашабыҙ. Үҙебеҙ ҙә республика райондарына концерттар менән сығабыҙ. Пландар күп, ваҡыт ҡына етмәй. Театрҙа яңы партиялар сығарам. Декабрҙә, Аллаға шөкөр, минең ҙур эшем булды, "Севильский цирюльник"та дон доктор Бартолоны йырланым. Яҡшы килеп сыҡты. Театр етәкселеге миңә яҡшы ҡараша, эштәрҙе күберәк бирә башланылар, ятлап өлгөрөргә генә кәрәк. Мәскәүҙә лә минең менән ҡыҙыҡһынған режиссерҙар, постановщиктар, дирижерҙар бар. Бында килеп спектаклдәр ҡуйған саҡтарында уларҙан һәр саҡ маҡтау һүҙе генә ишетәм. Һинең менән хушлашмайбыҙ, һине яңы проекттарға саҡырырбыҙ, тип торалар. Беҙҙең сәнғәтебеҙ бик юғары, уны башҡа яҡтарҙа ла күрһәтергә, күтәрергә кәрәк.

Беҙҙең Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры яҙғыһын Рәсәй милли театр премияһы конкурсының биш "Алтын битлек" премияһына лайыҡ булды, йәғни конкурсҡа килгән бөтөн төбәктәр араһында иң күп премияны беҙҙекеләр алды. Биш "Алтын битлек" "Ай тотолған төндә" операһы өсөн бирелһә, алтынсыһына бер балет бейеүсеһы лайыҡ булды. "Алтын битлек" - илебеҙҙә иң юғары театр премияһы. Аллаға шөкөр, халыҡ театрға ихлас йөрөй. Зал һәр саҡ тулы. Театрға йөрөү - модала тип әйтергә була...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рим Рәхимов әңгәмә һуңында үҙен борсоған бер мәсьәләне лә күтәрҙе: "Милләттәштәребеҙҙең беҙҙең Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында ҡуйылған башҡорт спектаклдәренә һирәгерәк йөрөүе гел борсолдора мине. Заһир Исмәғилевтың "Ҡоҙаса" спектакле кесе залда ғына бара. Шуны ла тултырып булмай! Заһир Исмәғилевтың "Салауат Юлаев" тигән легендар операһы шул тиклем матур эшләнгән, декорациялар иҫ киткес. Марьинканан килгән режиссер уны масштаблы итеп ҡуйҙы. Ат та сыға ине сәхнәгә. Тик тамашасы аҙ йөрөй. Тамашасы аҙ булғас, спектакле бит репертуарҙан алалар. Профессиональ сәнғәт өлкәһенә беҙ, башҡорттар, иғтибарлыраҡ булһаҡ ине. Тамашаларҙы үҙебеҙҙең опера һәм балет театры залдарында көтөп ҡалабыҙ", - тине йырсы. Исмаһам, Өфөлә йәшәгән милләттәштәр был саҡырыуға ҡолаҡ һалһаса.**

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА
әңгәмә ҡорҙо.

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# ӨНДӘШМӘЙ ҠАЛМАҒЫҘ!



**Мәктәп буллингы элеккесә үк иң ҡатмарлы һәм был хаҡта өндәшмәү хуп күрелгән мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала килә. Мәғлүм булыуынса, малайҙар һәм ҡыҙҙарҙың бер-береһен ҡыйырһытыу рәүештәре төрлөсә һәм ике яҡ та үҙенсәлектәре менән айырылып тора, быға педагогтар ҙа, ата-әсәләр ҙә мотлаҡ иғтибар итергә бурыслы.**

Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының медицина психологы Регина Хәлфина ошо айырмалар хаҡында һөйләне. "Малайҙар буллингы күберәк физик көс ҡулланыу юлы менән башҡарылһа, ҡыҙҙар ҡыйырһытылыусы балаға ҡарата тәьҫир итеүҙең психологик элементтарын һәм төрлө мыҫҡыллау ысулдарын файҙалана", - ти ул.

Психологтың фекеренсә, ҡыйырһытыусы яҡтың агрессив тәртибе, асылда, уларҙың шәхси эске проблемалары - үҙ-үҙҙәренә ышаныс булмауын һәм үҙбаһаларының түбән кимәлдә икәнен күрһәтә. Бындай кешеләр, ғәҙәттә, башҡаларҙы кәмһетеү иҫәбенә үҙҙәрен раҫларға, "баһа"ларын күтәрергә маташа. "Иң беренсе шарт - буллинг хаҡында өндәшмәй ҡалырға ярамай, сөнки көс ҡулланыусы үҙенең фашланыу ихтималлығынан ҡурҡа ,- ти психолог. - Әгәр бала бындай хәлдәр хаҡында өйҙә ата-әсәһенә һөйләмәй икән, тимәк, ғаиләлә төп терәк булырҙай үҙ-ара ышаныс кимәле юҡ, тигән һүҙ, һәм был ата-әсәне борсомай ҡалырға тейеш түгел. Ә инде буллинг билдәләре асыҡлана ҡалһа, балала "характар тәрбиәләй" башларға йә иһә проблеманың үҙенән-үҙе хәл ителеүен көтөп йөрөргә ярамай. Был турала һөйләргә кәрәк һәм тәүҙә уҡытыусынан, класс етәксеһенән башларға мөмкин. Артабан инде билдәле бер ғәмәл тәртибе бар - был проблеманы хәл итеүгә мәктәп йәмәғәтселегенең йәлеп ителеүе. Әгәр инде уларҙан да файҙа булмаһа, башҡа органдарға мөрәжәғәт итеү кәрәк".

Бынан алдараҡ хәбәр ителеүенсә, хәҙер Өфөлә психологтарҙы балалар менән эшләүҙең яңы ысулдарына өйрәтәләр.

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



**Roblox кеүек онлайн платформалар балаларҙа ставка һәм түләүҙәр менән бәйле ҡомарлы фекерләү формалаштыра ала.**

Бындай фекерҙе Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһында үткәрелгән тематик түңәрәк ҡорҙа балаларҙы деструктив һәм хәүефле контенттан һаҡлау комиссияһының эксперт советы ағзаһы Андрей Афанасьев белдерҙе.

"Күп балалар үҙҙәренең кеҫә аҡсаһына лутбокстар һатып алалар (уйын эсендә билдәле бер ҡаҙаныштарға йәки валютаға алынған бүләктәр - **Ред. Иҫкәрмәһе**). Бындай уйындарҙы барлыҡҡа килтереүселәр бик тә хәйләкәр эш итә - башланғыс этапта бушлай аҡса тәҡдим итәләр һәм, әлбиттә, балалар уларҙы тотона, унан кире ҡайтарырға тырышып, ҙур бурыстарға баталар. Шулай итеп балаларҙа ставкаларға бәйлелек формалаша, бәләкәй йәштән уларҙа лудомания үҫешә", - тип аңлатты Афанасьев.

Әгәр элек төрлө таргетинг алты йәштәге һәм өлкәнерәк балаларға йүнәлтелһә, бөгөн иһә интернет ауы алгоритмаларының йоғонтоһона дүрт йәштәге сабыйҙар ҙа эләккәнен билдәләп китте спикер.

"Балалар ололар булмаған, төрлө алгоритмдар эше менән көсәйтелгән билдәле трендтар көсләп тағыла торған мөхиткә килеп эләгә. Бер баҫыу ғына етә - бына инде тәҡдимдәр ул хәтлем дә зыянһыҙ булмаған йүнәлештәргә алып китә. Бында - онлайн-буллинг проблемаһы ла, даими шок-контент та, наркотиктар пропагандаһы ла, үлтереш һәм суицид видеолары ла. Артабан кешене күрә алмау идеологияһы ла килеп ҡушыла ала", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды эксперт.

Әйткәндәй, тыйылған контент, шул иҫәптән экстремист характерындағы материалдар һәм көс ҡулланыуҙы пропагандалау осраҡтары билдәләнеүе арҡаһында Роскомнадзор Roblox платформаһына кереүҙе сикләне.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ӘСӘЛЕК ТОЙҒОҺО...

## кешелекте һаҡлай килә

**Был әйтемдең "Бала көйөгө йөрәктә, ир көйөгө итәктә", "Бала - бәғер ите", "Бала өсөн әсәнең йөрәге, атаның беләге һыҙлар", "Бала шатлығы - ана шатлығы" тигән төрлөсә юҫыкта фекер йөрөтөргә йүнәлеш булырлыҡ варианттары ла бар. "Бала ҡайғыһы йөрәктә, ир ҡайғыһы итәктә" әйтемнә һалынған фекер "ике икең дүрт була", тигәндәй, еңел генә аңлашылған һымаҡ булып тойолһа ла, уның тәрәндәрәк ятҡан мәғәнәһе лә бар. Миҫалға ошо риүәйәтте генә алайыҡ.**



Ил ҡыҙырып йөрөүсе дәрүишкә өс юл сатында һылыуҙарҙан-һылыу бер ҡатын осраған. Ҡатындың күҙ-сырайындағы сәйер һыҙатҡа ла иғтибар иткән дәрүиш. Уның һын-һыпатындағы, йөҙ төҙөлөшөндәге камиллыҡ, илаһилыҡ йөрәгенә уйылған хәсрәтен һис тә йәшерә алмай икән. Юлдан саҡ ҡына ситтәрәк таш өҫтөндә ултырған ҡатындың балаларына ла иғтибар иткән дәрүиш. Уларҙың береһе - сәстәре бешкән арыш һаламылай һап-һары малай, икенсеһе - ыҫмалалай сөм-ҡара сәсле ҡыҙыҡай икән.

Дәрүиш уларҙың янына килгәндә, ауыҙын асып өндәшергә генә иткәндә, ҡатын уны бүлдереп, ҡайҙалыр билдәһеҙ яҡҡа, алыҫҡа эйәге менән ымлап:

- Нимә хаҡында белергә теләгәнегеҙҙе аңланым, зинһар өсөн, анау таш артына йәшеренеп ҡарап торһағыҙ, үҙегеҙ белергә теләгәнде һүҙһеҙ ҙә аңларһығыҙ, - тигән.

Дәрүиш таш артына йәшеренеүе булған, алыҫта саң туҙаны ҡалҡҡаны күренгән. Бер мәл аҡ дөлдөл егелгән матур биҙәкле арбаҡ көймәгә ултырып, һары сәсле ҡупшы ғына кейенгән урта йәштәрҙәге ир килеп туҡтаған. Аты туктап та өлгөрмәҫтән, ир ҡатындың аяҡ аҫтына йығылған һәм аяғына баҫып ҡатынды үберғә тотонған. Үбеп танһығы ҡанғас, арыш сәсле малайҙы ла ҡулына алып, уны иркәләп, ҡатынға әле генә үҙе елдереп килгән юлға ымлап күрһәтеп, өсәүләп бергә шунан китергә өндәгән. Ҡатын үҙҙәренә ҡарап аптырашта ҡалған ҡыҙына ҡараш ташлаған да, ир күрһәткән юл буйлап бер ҡасан да китмәйәсәген, ҡыҙын яңғыҙ ҡалдырмаясағын аңлатып, баш һелккән. Ир кеше, нимәнелер аңлатырға, иҫбатларға теләгәндәй, ярһып-ярһып, ҡулдарын һелкә-һелкә һөйләп, малай менән әсәһе араһында йөрөргә тотонған. Әммә ҡатын ҡымшанмай ҙа баҫып тора биргән. Ахырҙа, ир кеше түҙмәй, барыһына ла ҡулын һелтәп, көймәһенә һикереп ултырған да, атына ҡамсы төшөрөп, әле генә килгән юлынан саптырып китеп тә барған.

Аҡ көймә күҙҙән юғалған юлдың саңы ла ултырып өлгөрмәй, икенсе юл буйлап ҡара юрға егелгән ҡара көймәнең елдереп килгәне күренгән. Көймәнән уның хужаһы - ҡара сәсле, тәүге ирҙән дә мыҡтыраҡ, баһадирыраҡ кәүҙәле ир төшкән. Был ир ҙә, тәүге ир кеүек, аты туктартуктамаҫтан үк ҡатындың аяҡ аҫтына ташлана, шунан һуң аяғына баҫып, ҡара сәсле ҡыҙын ҡулына алып, уларҙың икеһен дә үберғә тонона. Был ир ҙә әле генә үҙе елдереп килгән юлға ымлап күрһәтеп, хәҙер үк уларҙы үҙе менән алып китәсәген белдерә. Ҡатын, "Юҡ, бармайым", тигәндә аңлатып, баш һелкә...

Алыҫтан ҡарағанда өнһөҙ булып тойолған ваҡиғаларға шаһит булған дәрүиш шуны аңлай: ҡара сәсле, ҡара ҡашлы ир ҡатынға һәм ҡыҙына үҙенең ниәтен нисек кенә итеп аңлатмаһын, уларға хет ожмахтың үҙен вәғәҙә итһен һәм үҙе менән бергә китергә нисек кенә өндәмәһен, ҡатын уның менән бер ҡайҙа ла китмәйәсәк, ул әйҙәгән юлға ике аяғының береһен баҫмаясаҡ...

Дәрүиштең күңелен ҡатынды һәм уның балаларын йәлләү тойғоһо сорнап ала шул саҡ. Ҡара юрға елдереп киткән юлдың саңы ултырыуын да көтөп тормаҫтан, ул йәшеренеп торған ерәнән сығып, ҡатын янына барып, уны йыуатырға ниәт итеп, инде ҡуҙғалдым ғына тигәндә, киренән тағы ла таш артына боҫорға мәжбүр була. Ни өсөн тигәндә, ул бөтөнләй көтөлмәгән юлһыҙ яҡтан өсөнсө йәйәүле ирҙең яҡынлап килеүен күреп ҡала. Ирҙең кейеменә һәм һынһыпатына ҡарап, уның үҙ хәләл көсө менән донъя көтөүсе намыҫлы кеше булыуын тойомлай дәрүиш. Ир теге өсәүгә яҡынлаған һайын, аҙымдары ла шәбәйә бара икән. Бына ул атлауҙан йүгереүгә күсеп, ҡатынды күтәреп алып үбә лә, уның ике балаһын ике яурынына ҡундырып, өсөнсө юл буйлап үҙенең бәхетле һәм яҡты киләсәгенә табан атлай. Уларҙың дүртеһенең дә шат йылмайған йөҙөндә ҡояш нуры сағыла...

"Бала ҡайғыһы йөрәктә, ир ҡайғыһы итәктә" әйтемен бар тулылығында аңлатыуҙың классик формаһына торош итәлер был риүәйәт. Ысынлап та, нинә ҡатын үҙенә мохтажһыҙ ғына киләсәк тәьмин итерлек, яҡшы йәшәү шарттары тыуҙырырлыҡ ике ирҙең береһе менән дә китергә теләмәгән һуң? Сөнки ул ирҙәрҙең ҡайһыһы менән генә киткән осраҡта ла, яҡшы йәшәү шарттарына бер балаһын алмаштырырға тура киләсәген яҡшы аңлаған. Бына шуның өсөн дә уның сырайына болот ҡунған. Балалары аталарының ҡайһыһы менән генә киткән осраҡта ла, хет ожмах шарттарында көн итеүенә ҡарамаҫтан, ҡатындың айырылып ҡалған балаһы өсөн йөрәге һыҙлаясаҡ һәм ул был ирҙәрҙең береһе менән дә бәхетле була алмаясаҡ. "Итәк ҡайғыһы" бер ваҡытта ла йөрәк һыҙлауынан өҫтөн була алмай. Сөнки донъяла тик әсәй кеше генә бөтә балаларына тигеҙ итеп ҡарай.

Бер мәл бер әсәнең балалары үҙ-ара бәхәсләшеп киткән. Әйтәһе, уларҙың ҡайһыһын әсәләре нығыраҡ ярата икән. Һәр ҡайһыһы иң ныҡ яратылған баланың үҙе икәнлеген иҫбатларға тырышҡан. Улар ахырҙа әсәләре янына килеп, уның үҙенән был хаҡта һорашҡан. Әсәләре маймылдан шәмдәр ындырған да:

- Бына был шәм - ул мин, ә уның уты - минең мөхәббәтем, - тигән.

Шунан ул йәнә бер майшәм алып, уны тоҡандарған да:

- Бына был минең тәүге балам, мин уға үҙемдең һөйөү утымды бирҙем, әммә миндәге уттың ялҡыны шул килеш ҡалды...

Әсә кеше нисә балаһы бар, шунсама шәмде тоҡандырып сыҡҡан да, үҙендәге шәмдең һис тә кәмемәүен, ҙур һәм йылы булыуын аңлатҡан. Бының менән, әлбиттә, ул бөтә балаларына бер үк миҡдарҙа һөйөү, наҙ биреүен әйтергә теләгән.

Бала ҡайғыһының тап йөрәгендә булғаны өсөн дә һаҡланалыр донъяла әсәлек тойғоһо. Ошо тойғо кешелекте лә һаҡлап килә. Дөрөҫөрәге, бала ҡайғыһының йөрәктә булыуы кешелекте һаҡлай ҙа инде. Был - хәҡиҡәт.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

✔ ***Стәрлетамаҡта башҡорт театрын асыу тураһында һүҙ сыҡҡас, икеләнеп тә торманыҡ. Ошо эште башлап йөрөүсе режиссер Гөлдәр Ильясоваға ышанып, уның артынан эйәрҙек һәм яңылышманыҡ.***



ИЖАДХАНА

**Стәрлетамаҡка профессиональ театр сәнғәтен алып килеүсе тәүге ҡарлуғастарҙың береһе, Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрының иң тәүге халыҡ артисы Рафиға Галина тураһында һөйләгәндә, һүҙҙе уның тормош иптәше, сәхнә партнеры Рауил Галиндан башҡа күҙ алдына килтереп тә булмай. Ярты быуаттан ашыу ваҡыт бер сәхнәлә уйнап, бергә ғүмер кисереп, Стәрлетамаҡта башҡорт драма театрын булдырыуға, уны үҫтереүгә ҙур көс һалған матур парҙарҙың береһе бына нисә йылдар инде береһенән-береһе сағыу, ҡабатланмаҫ образдар тыуҙырып, тамашасыны хайран итә.**

**Быйылғы йыл Галиндар өсөн юбилейҙарға бай: Рафиға Арыҫлан ҡыҙына - 75 йәш, Рауил Әхтәрйән улы менән бергә ғүмер итеүҙәренә - 55 йыл, Өфө сәнғәт институтын тамамлауҙарына ла 55 йыл үтеп киткән. Шулай уҡ Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрына 35 йыл тулыу менән бергә, уларҙың ошо театрҙа эшләүҙәренә лә 35 йыл була.**

**...Галиндарҙың үҙенә генә хас зауыҡ менән биҙәлгән фатирына килеп инеү менән үҙеңде бер музейға йәки театр фойеһына аяҡ баҫҡан һымаҡ хис итәһең. Коридорҙағы стенала эленгән төрлө йылдарҙа, төрлө ролдәрҙә төшкән фотоларға ҡарап, уйҙар менән тарихҡа сәйәхәт ҡылаһың. Ә төпкө бүлмәләге стеллаждарҙа Рауил Әхтәрйән улының балалар һәм өлкәндәр өсөн яҙған шиғырҙар һәм әкиәттәр йыйынтыҡтары, сәнғәт, театр темаһына китаптар урын алған. "Маҡтаулы хеҙмәте өсөн", "Өлгөлө ғаилә" миҙалдары, Станиславский исемендәге Халыҡ-ара премия лауреаты һәм башҡа бик күп юғары исемдәр тураһында таныҡлыҡтар, хөкүмәт телеграммалары, Маҡтау ҡағыҙҙары һәм Рәхмәт хаттары...**

**Ижади ғаилә йәшәгән мөхит менән бер аҙ танышҡас, әңгәмәне Башҡортостандың халыҡ артисы Рафиға ГАЛИНА менән башлап ебәрҙек.**

# УЛ ҮҘ ЙӨРӘГЕНӘ...

## бөтә донъяны һыйҙыра ала

**Ирекһеҙҙән, әле лә һис төҫ ташламаған, нәзәкәтле ҡатын, төрлө образдарҙа балҡыған актриса тормошта ниндәйерәк кеше ул, тигән һорау тыуа...**

- Мин Салауат районы Яҙғы йорт ауылында тыуып үҫтем, был совхозда күп милләтле халыҡ йәшәне. Урта мәктәпте райондағы иң ҙур ауылдарҙың береһе Лагырҙа уҡып бөттөм. Әй буйындағы миллионер колхоз ине ул. Ундағы ҙур башҡорт мәктәбенең тарихы бик бай, ул әле лә гөрләп эшләп тора.

Әсәйемдең бер бөртөк кенә ҡыҙы булһам да, бәләкәйҙән ирҙәр эшен эшләп үҫтем, ололар менән ярышып бесән саптым, утынын да быстым, әсәйем эшләгән фермаға йөрөп, егермешәр һыйыр һауа инем. Әсәйем шул уҡ ваҡытта мине уҡытып, ҙур кеше итергә тигән маҡсат ҡуйҙы. Шулай итеп, бала саҡтан хыялымда йөрөткән сәнғәт институтының театр бүлегенә документтарҙы тапшырҙым. Әмәлгә ҡалғандай, нәҡ шул ваҡытта атайым лотореяға аҡса откайны, бик яҡшы ярҙам булды был миңә.

Рауил менән сәнғәт институтында уҡыған тәүге йылдарҙа танышып өйләнештек. 3-сө курста уҡығанда Розалиябыҙ тыуҙы. Икебеҙ ҙә студенттар, бала тыуғас, уҡырға ла, баланы ҡарарға ла өлгөрөргә кәрәк. Әлдә янымда әсәйем булды. Ауылда эшләп йөрөгән еренән Өфөгә күсеп килде. Балаларыбыҙ - Розалия менән Рөстәмде ҡарап үҫтереште. Унан һуң Розалияның ҡыҙҙары Гөлдәриә менән Азалияны тәрбиәләште. Бүләсәре Гөлдәриәнең бер ҡыҙын, бер малайын ҡарашты. Хәҙер инде уға 98 йәш.

Рауил менән өйләнешеп, килен булып төшкәс тә ҡәйнәм: "Минә әртис булып ҡайтма, килен булып ҡайт", - тип әйтеп ҡуйҙы. Ҡәйнәм Бибиәсмә үҙе лә бик егәрле кеше ине, башҡаларға ла талапсан булды. Әле шул заманда уҡ ауыл ерендә магазин тотоп, гөрләтеп йәшәне ул. Балалар йәй һайын Ҡыҙылъярҙа ҡәйнәм менән ҡайнымдарҙа булды. Инйәр буйында һыу инеп үҫтеләр. Хәҙер инде үҙебеҙ балаларҙы, ейән-ейәнсәрҙәрҙе Рауилдың тыуған яғында, Архангел районы Ҡыҙылъяр ауылында һалған йортобоҙҙа ҡаршылайбыҙ. Яҙ етеү менән апрелдән шунда китәбеҙ ҙә баҡса эше менән булабыҙ. Ниҙәләр генә үҫмәй унда! Алмағас, груша, сейә, ҡарағат һәм башҡалар...

**Стәрлетамаҡ театрына килгәнсе Салауат театрында оҙаҡ ҡына эшләп, бай тәжрибә туплап, өлгөрөп еткән актриса инегеҙ. Унда һеҙ йүнәлтмә менән килгәйнегеҙме?**

- Салауатҡа режиссер Вәзих Сәйфуллин саҡырыуы буйынса килгәйнек. Унда биш-алты режиссер менән эшләргә, ижад итергә тура килде. Әллә ҡайҙа осҡанбыҙ ҙа осканбыҙ инде. Хыялый булғанбыҙ. Театрҙан арбалып, алҡыштарға күмелеп йәшәй торғас, ғүмер үткән дә киткән. Гастролдәргә ала ҡарҙан сығып китә инек тә, иген урғанда ҡайтып инә инек.

Эй юлдар насар ине ул ваҡыттарҙа, ямғыр яуа, тайғаҡ, автобус юғарыраҡ үргә күтәрелә алмай. Бер ваҡыт шулай тау битенә килеп еттек тә, менә алмай, артҡа сигә башланыҡ. Машинаны үҙебеҙ һөйрәп алып киттек...

Балалар гастролдә үҫте. Бер мәл шулай ҡыҙ ролен уйнаусы юҡ тип, декрет ялында ултырған мине эшкә саҡыртып алдылар. Дүрт айлыҡ ҡына Рөстәмем менән гастролгә сығып китергә тура килде. Ул заман памперстар юҡ, баланың йүргәген сайҡатам да, автобустың тотонғосона элеп ҡуйып киптерәм. Ҡыҙыбыҙ автобуста йоҡлай алмай, ҡоҫа. Бына шулай мең газапҡа менән йөрөп ҡайтыр инек. Хәҙер генә ул юлдар күҙгөләй ялтырап ята.

**Салауатта уңышлы ғына эшләп яткан ерҙән нисек ошо әле проектта ғына булған театрға килергә йөрьәт иттегеҙ? Ә бит ул саҡта Стәрлетамаҡта театр булдырыу күптәр ышанып етмәҫтәй бер хыял ғына ине...**

- Эйе, Рауил менән Салауатта ун ете йыл эшләп, бай тәжрибә туплағайныҡ инде. Сәхнә тәмен, тамашасы алҡыштарын тоя белә инек. Стәрлетамаҡта башҡорт театрын асыу тураһында һүҙ сыҡҡас, икеләнеп тә торманыҡ. Ошо эште башлап йөрөүсе режиссер Гөлдәр Ильясоваға ышанып, уның артынан эйәрҙек һәм яңылышманыҡ. Гөлдәр Мозафар ҡыҙы менән бер-беребеҙҙе тәү күреүҙән үк оҡшаттыҡ. Ул тәрән фекер йөрөтеүсән режиссер, бер кемдеке менән дә бутай алмаҫлыҡ үҙ почеркы бар. Стәрлетамаҡ беҙҙе профессиональ йәһәттән тағы ла нығыраҡ үҫтерҙе.

**Һеҙ тыуҙырған образдар төрлөлөгө менән хайран итә. Берсә етди, олпат ҡатын, берсә тыныс тәбиғәтле, шул уҡ ваҡытта йор һүҙле, һәлмәк кенә баҫып йөрөр, уйлап ҡына һөйләр башҡорт әбейе... Ә шулай ҙа Рафиға Галина тигәндә, түштәрен һелкетеп, янбашын уйнаҡлатып тамашасының һушын алған ажарланып торған дыуамал, сая бисә образы ла күҙ алдына килеп баҫа...**

- Эйе, ул сая ҡатын - Булат Рафиҡовтың "Замана минең ҡулда"һындағы Хәббониса... Ошо ролеңде миңә бир әле, тип һорап йөрөүселәр ҙә булды...



**Стәрлетамаҡ театрында үҙегеҙҙе иң тәүге халыҡ артисы булараҡ раҫланыгыҙ. Профессиональ театр сәнғәтендәге үҫешегеҙҙә кемдең йоғонтоһо ҙур булды?**

- Педагогтарҙан уңдым. Беҙҙе Башҡортостандың данлыҡлы артистары, режиссерҙары Ғабдулла Ғиләжев, Рафаэль Әйүпов кеүек ҙур талант әйәләре уҡытты. Күренекле балерина Тамара Хоҙайбирҙина сәхнә хәрәкәте серҙәренә төшөндөрһә, Гөлли Мөбәрәкова сәхнә теле серҙәрен өйрәтте, Фәрдүнә Ҡасимова иһә сәхнә оҫталығына уҡытты. Театр сәнғәтен һыу кеүек эскән ҙур режиссер, театр тәнҡитсеһе Һөйөндөк Сәйетов ағай: "Рафиға, һин уйлаусан актриса, һинә хәҙер етдиерәк ролдәр кәрәк", - тип әйтә ине.

**Балаларығыҙ ҙа һеҙҙең юлды һайланымы?**

- Балаларыбыҙ театр мөхитендә ҡайнап үҫте. Театр ене уларға бик ҡағылып етмәһә лә, балаларыбыҙҙың балалары театрҙы һайланы. Ҡыҙыбыҙҙың ике ҡыҙы ла Өфө сәнғәт институтының театр бүлеген тамамланы. Өлкән ҡыҙҙары Гөлдәриә режиссерлыҡҡа уҡыны. Азалия актриса, Йәш тамашасы театрында эшләй, труппа етәксеһе. Шөкөр, династияны дауам итеүселәр бар.

Әлеге ваҡытта дүрт ейән-ейәнсәребеҙ, ике бүләсәребеҙ бар.

**Һеҙ бик күп спектаклдәрҙә Рауил Галин менән ирле-ҡатынлы ролдәрҙе уйнайһығыҙ...**

- Һанай китһәң, улар күп инде. Театрҙа эшләй башлаған тәүге йылдарҙа А.Сафроновтың - "Йылмайған өсөн бер миллион"ында, А. Галиндың - "Ретро"һында, М.Ғафуриҙың "Ҡара йөҙҙәр"ендә бергә уйнаныҡ. Әйткәндәй, Әнүәр Нурмөхәмәтов сәхнәләштергән "Ҡара йөҙҙәр"ҙә мин Ғәлимәне уйнаным. Бик ғүмерле спектакль булды. Оҙаҡ йылдар сәхнәнән төшмәне. Телевизорҙан да йыш күрһәттеләр.

А.Цагарелиҙың - "Ханума"һында Ханума менән Акоп, Ф.Бүләковтың "Мөхәббәт ҡарағы"нда Майгөл менән Хәйбүш ҡартты уйнаныҡ. Уны халыҡ бик яратты. Троллейбуста күрһәләр, арҡанан һөйөп китәләр ине. Хәйер, әле лә магазинға барып инһәң дә, поликлиникала күреп ҡалһалар ҙа: "Ооо, беҙҙең яратҡан артистарыбыҙ!" - тип һүҙ ҡушып китәләр.

"Ҡаһым түрә"лә Рауил Ҡаһымдың атаһын, мин әсәһен уйнаным. Салауат районында үткән "Салауат көндәре"нә саҡырғайнылар. Унда Салауат Юлаевтың атаһы менән әсәһен уйнаныҡ.

**Һәр образ тетрәнеүҙәр, эске кисерештәр аша тыуа. Үҙенә тәғәйен ролде "бешереп" еткергәнсе күпме тырышлыҡ, ваҡыт талап итеlә, йоҡоһоҙ төндәр үтә. Ә шулай ҙа күңелегеҙгә яҡын ролдәрегеҙ ҙә барҙыр... Образды тулыһынса асып бирер өсөн үҙеңдә лә ошо сифаттарҙың булыуы мөһимме?**

- Миңә ҡалһа, иң яратҡан роль булмай ул. Үҙең эшләгән һәр роль дә, биш бармағың шикелле, үҙең бешергән ашың кеүек, барыһы ла яҡын. Әммә төрлөсә килеп сыға. Сәхнәне, эшеңде, партнерыңды, коллективты яратҡанда ғына шәп әҫәр тыуа. Үҙеңдә булмаған сифаттарҙы ла, ҡапма-ҡаршылыҡлы ролдәрҙе лә уйнарға тура килә. Уйнаған ролең хатта фиғелеңә кереп китә. Әгәр артист йөрәгенә бөтә донъяны һыйҙыра ала икән, шул саҡта ғына уңышлы образ килтереп сығарырға булалыр.

Артист - ул профессионализмдың иң юғары үҫеше. Көслө артист һәйбәт уйнауы менән яҡшы спектакль тыуҙыра, ә шәп спектакль режиссерҙы күтәрә. Эшеңдең һөҙөмтәһе иң беренсе пьесанан, режиссерҙан, партнерыңдан тора. Кешене көлдөрәйем тип, үҙең шарҡылдап көлөү мөһим түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шундай кешеләр була: улар менән һөйләшеп һүҙ бөтмәй. Осрашҡан һайын рухыңды байытып, аңыңды уятып, фәһем алып ҡайтаһың. Башҡортостандың халыҡ артистары Рафиға һәм Рауил Галиндар - тап шундай шәхестәр. Киләсәктә лә береһе айҙай йылмайып, икенсеһе ҡояштай балҡып, парлы йондоҙ булып тағы ла күп йылдар тамашасы күңелен дауаларға яҙһын!**

**Роза ҠОБАҒОШОВА.**

✔ *Ана шундай принципиаль хәҙрәттәр бәғзе бер уҫалыраҡ хирургтарҙы ла хәтерләтә. Ҡайһы бер етди сирле пациенттарға: "Операция яһатмаһаң - үләһең бит!" - тигән ҡәтғи өгөтләүҙәр ҙә килешеп ҡалыуын берәү ҙә инҡар итмәҫ...*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЭСЕҮҘЕҢ ФАЙҘАҺЫ ҺИС ЮҠ!

■ Спиртлы эсемлектәрҙе аҙ ғына ҡулланыу зыянлы түгел, киреһенсә, организмға был файҙалы, тип уйлаусылар хаталана. Австралияның яман шеш менән шөғөлләнеүсе бер ойошмаһы белгестәре асыҡлауынса, был ауыҙ ҡыуышлығы һәм тамаҡ яман шеше хәүефен арттыра. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, донъялағы үлем сәбәптәренең 6 проценты алкоголгә тура килә. Бигерәк тә бауыр зарарлана. Белгестәр әйтеүенсә, бауыр циррозы кешенең йыл дауамында эскән алкоголь күләменә бәйле барлыҡҡа килә. Даими эсеүселәр йышыраҡ зыян күрә, ти улар.

■ Туҡлыҡлы иртәнге аш кешегә көн дауамында төрлө эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн энергия бирә, мейенең дөрөҫ эшләүен тәьмин итә, метаболизмды тиҙләтә. Быларҙың барыһы ла кәүҙәне һомғол көйө һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Иртә - тәм-том менән һыйланыу ваҡыты ла, тип белдерә Тель-Авив университеты ғалимдары. Сөнки был ваҡытта матдәләр алышыныуы яҡшы эшләй һәм артыҡ калориялар шунда уҡ янып юҡҡа сыға. Идеаль иртәнге аш сәғәт 6-нан 8-гә тиклем булырға тейеш. Емеш-еләкте көндөҙгө 16 сәғәттән һуң ашау ҙа зыянлы икән. Йоҡларға ятырҙан ике сәғәт алда бал ҡушылған һөт эсеү сәләмәтлеккә яҡшы тәьҫир итә, ти ғалимдар.

■ Көньяҡ Калифорния университетында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ир-егеттәр йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә нығыраҡ бирешә икән. Белгестәр фекеренсә, шулай ҙа һуңғы тиҫтә йыл эсендә йөрәк ауырыуҙары сирҙәренә дусар булыусылар һаны күпкә кәмегән, был дөрөҫ туҡланыу, инфекциялы ауырыуҙарҙы ваҡытында иҫкәртеү һәм башҡа факторҙар менән бәйле. Тик барыбер ҙә профилактика күберәк гүзәл затҡа яҡшыраҡ тәьҫир итә, 13 үҫешкән илдә йәшәүселәрҙе тикшереп, ғалимдар шундай һығымтаға килгән. Был ир-егеттәр араһында тәмәке тартыусылар күп булыу менән бәйле, ти улар.

■ Ниндәйҙер йәрәхәт алған кешелә кортизол кимәле юғары икән, ул был хәлде иҫенә төшөргән һайын, хәтерендә уны яңынан кисерәсәк. Бына шуның өсөн дә йәрәхәттән һуң стресс кисереүселәр насар хәтирәләр менән оҙаҡ яфалана. Бохумдағы Рур университеты белгестәре тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларға геометрик фигуралар күрһәткән. Ҡайһы бер фигураларҙы күрһәткәндә еңелсә электр тогы һуҡҡан. Икенсе көнөнә һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың яртыһына - кортизол, икенсеһенә составында бер ниндәй ҙә матдә булмаған "буш" таблеткалар биргәндәр. Өсөнсө көнгә белгестәр ҡатнашыусылар нисә геометрик фигураны хәтерендә ҡалдырғанын асыҡлаған. Һөҙөмтәлә, кемдәр кортизол ҡабул иткән, ток һуҡҡан фигураларҙы айырыуса яҡшы иҫләгән. Уларҙың тиреһенең токты үткәреү сифаты ла күтәрелгән, был иһә эмоциональ кисерештәрҙең юғары булыуы тураһында һөйләй.

■ Бирмингем университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, тауар ярлыҡтарында артыҡ мәғлүмәт күп, һөҙөмтәлә һатып алыусылар яңылышып китеп, кәрәкле әйберен һайлай алмауы бар. Продукт тураһындағы айырым мәғлүмәттәр, мәҫәлән, уның массаһы, майҙар, тоҙ, шәкәр, калория күләме хаҡындағы яҙыуҙар, шулай уҡ теге йәки был матдәнең тәүлек нормаһын күрһәткән төҫлө схемалар кешеләрҙе яңылыштыра, ти белгестәр. Калория тураһында яҙмаһаң да була, сөнки калория һанауҙан файҙа юҡ, ти улар. Уның урынына клетчатка күләмен яҙыу урынлы булыр ине.

ШАНДАУ

# ИМАМДАРҒА ЕҢЕЛМЕ?



**Гәзитебеҙҙең 8-се һанында Әғләм Шәриповтың "Хәҙрәт булыуы еңелме?" тип аталған мәҡәләһен оло ҡыҙыҡһыныу менән уҡып сыҡтым. Кем - нисектер, әммә мин мәҡәлә авторының тел төбөндә бик тәрән фекер ятыуын тойҙом. Тәү ҡарауҙа бик еңел генә һымаҡ тойолған ошо яҙмаһында ифрат етди мәсьәләне күтәргән автор.**

Әйе, һуңғы быуат эсендә дин әһелдәренә, шәхсән, муллаларға ҡарата халҡыбыҙҙа кире ҡараш тәрбиәләү эшендә үткән замандың сәйәси органдары ифрат та "бөйөк уңышҡа өлгәшкән", тиһәм дә, хаталанмаҫмын. Милләттәштәребеҙгә дин белеме биреү, уларҙы иманға өндәү иң төп функцияһы булып торған хәҙрәттәребеҙгә ниндәй генә бысраҡ яғылманы ана шул осорҙа. Бына шул дәүерҙәге бер нисә быуын кешеләре хәҙер дин өлкәһендә, үкенескә, ифрат наҙан булып үҫеп етте лә инде. Шунлыҡтан, динебеҙ йылына бер мәртәбә мулланан үлгәндәргә аят уҡытып, килгән ҡунаҡтарға тинлектәр өләшеүҙән, мулла доға ҡылғандан һуң, уның артынса бит һыйпап ултырыуҙан ғына ғибәрәт, ә хәҙрәттең эше - ҡунаҡтан-ҡунаҡҡа йөрөп, саҙаҡа йыйыу, никах уҡыу, сабыйға исем атау ғына тигән һымағыраҡ инаныуҙа күпселек.

Икенсе мәсьәлә: ауыл имамы, хәҙрәттәр тураһында һәр төрлө негатив хәбәрҙәр һөйләүселәр күп. Үкенесле. Кәрәк-ярағына йөрөр өсөн иҫке генә берәй "шестерка" алған имам хаҡында "Ана, хәйер аҡсаһына байып ята..." тип, йә иһә, "Фәлән кеше аятта шуныса хәйер өләште, ә мулла үҙе бер тин дә сығарманы, алып ҡына ултыра", тигән һымағыраҡ яман хәбәрҙәр йөрөүге, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, бәғзе шундай милләттәштәребеҙҙе биҙәмәй. Ҡайһы берәү иман килтереп, Аллаһ Тәғәләгә тәүбә итеп, дин юлына баҫҡан, хатта имам булып китеүгә өлгәшкән кешеләрҙең үткәнендә соҡоноп: "Ул бит заманында шулай, былай булды", - тип, ғәйбәт сәйнәүҙән дә тартынмай. Ә имам булыуы еңелме икән? Әлеге мәҡәлә авторы әйтмешләй, минеңсә, был бик тә ауыр эш! "Нимәһе ауыр уның, - тиер бәғзеләр, - ҡунаҡҡа барып, аят уҡып, доға ҡылып, бер талай саҙаҡаны һалып алып ҡайтып китеүҙең ниндәй ҡыйынлығы бар?.."

Мәсеткә кәрәк-яраҡтар, йыһаз, китаптар алған, ремонтлатҡан, утын, газ, электр энергияһына һәм башҡа хәжәттәр өсөн әлеге хәйергә төшкән генә аҡсаны еткерергә тырышҡан хәҙрәттәребеҙгә Аллаһ Тәғәлә сабырлыҡ, һаулыҡ насип итһен! Икенсенән, ысын эш менән мәшғүл булған имам-хәҙрәт, дөрөҫөн генә әйткәндә, "сукеш менән һандал араһында", йәки "ике ут аралығында" йәшәргә мәжбүр булған кеше ул. Айырыуса, хәҙерге дәүерҙә. Беренсенән, Аллаһ Тәғәләнең әмере буйынса кешеләргә тик хәҡиҡәтте генә һөйләргә бурыслы булһа, икенсе яҡтан, аҙым һайын ул дин ғилеменән алыҫ торған күпселектең ризаһыҙлығына юлыға. Сөнки дин ҡанундарын халыҡҡа һөйләй башлаһаң, шәриғәттә нимәгәлер өндәү, йә иһә ниҙәндер тыйыуҙар бихисап. Ә күпселеккә өндәүҙәр ҙә, тыйыуҙар ҙа оҡшамай. Ҡөрьән-Кәримдә Аллаһ Тәғәлә шулай ҡушҡан, быны тыйған йә иһә Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) - Аллаһ илсеһе хәҙистә шулай тип әйткән, тип һөйләй башлаһаң, үҙ ғүмерендә тәүгә ишеткән, йәки был хаҡта белеп тә, әммә күңелдәренә оҡшап етмәгән нәмәләрҙе ҡабул иткеләре килмәгәндәр һинең һүҙҙәреңә, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, бөтөнләйгә иғтибар итмәй. Ҡайһы берәүҙәр, хатта айбарланып, ҡаршы тороусан. Үкенесле, әммә был - факт.

Иман килтермәгән көйөнсә был донъянан китеп барыуҙың ахирәттә ниндәй аяныслы, ҡурҡыныс, мәңгелек үкенес булыуы хаҡында ла иҫкәртеүсән күп кенә хәҙрәттәребеҙ. "Тура әйткән туғанына ярамаған", тигән әйтем йөрөй бит әле халҡыбыҙҙа. Әммә, минеңсә, бына шундай дин әһелдәрен дә дөрөҫ аңларға тырышырға кәрәк. Улар бит берәүҙе лә кемгәлер ҡаршы өндәмәй, уларҙың маҡсаты - тик кешеләргә Аллаһ илсеһенең талаптарын еткереү. Хәҡиҡәтте һәр саҡ йәшереп тотоуҙың яҡшыға алып бармауы бар. Хаҡ дингә өндәп тә, күндерә алмаған кешеләргә Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.): "Төн ҡараңғыһында утҡа табан осҡан күбәләктәрҙе усаҡ янынан ҡыуған һымаҡ, мин дә һеҙҙе тамуҡ утынан ҡурсаларға тырышам, ә һеҙ һаман минән ысҡынып, утҡа ынтылырға тырышаһығыҙ..." - тип, бик әсенеп, уларҙы иманға өндәгәне хаҡындағы сахих хәҙисте беләйек. Минеңсә, талапсан хәҙрәттәребеҙҙе "фанат" тип атап, уларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмаһаҡ, үҙебеҙгә үҙебеҙ оло ғәҙелһеҙлек ҡылғандарҙан булырбыҙ, Алла һаҡлаһын! Ана шундай принципиаль хәҙрәттәр бәғзе бер уҫалыраҡ хирургтарҙы ла хәтерләтә. Ҡайһы бер етди сирле пациенттарға: "Операция яһатмаһаң - үләһең бит!" - тигәнерәк тондағы ҡәтғи өгөтләүҙәр ҙә килешеп ҡалыуын берәү ҙә инҡар итмәҫ, моғайын...

Бына шулай, Ҡөрьән-Кәрим һәм Бәйғәмбәр сөннәтенә таянып, милләттәштәребеҙгә дөрөҫ дини белем (беҙгә оҡшаймы ул - юҡмы) биреү - хәҙрәттәребеҙҙең төп бурысы. Бына ошо ифрат та ауыр, яуаплы эш һайлаған үҙебеҙҙең мөғәллимдәребеҙҙе хөрмәтләмәү һис кенә лә яраған эш түгел. Хәҙрәт булыу - аят уҡып, бит һыйпап, бишбармаҡ ашап ҡына йөрөү тип уйлау - ололарҙан оло хата! Ә дөрөҫлөктө белеп тә, башҡаларға ошо хаҡта өндәшмәгән кешене Аллаһ илсеһе телһеҙ шайтанға тиңләгән, ә инде ялған һөйләгәнде - "телле шайтан" тип атаған, әғүҙү билләһ (Аллаға һыйынам)!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ИМАНЛЫ БУЛАЙЫҠ!



**Бәләкәйҙән ололар ауыҙынан "Иманлы бул, балам!" тигән теләк-нәсихәттәрҙе лә ишетеп үҫкән күптәребеҙ. Ә кем һуң ул иманлы кеше? Кешенең иманы кимәлен ниндәй сифаттары сағылдыра ала? Тик диндә булған кеше генә иманлы була аламы? Ошо һорауҙар менән журналист Сәлмән ЯРМУЛЛИНға мөрәжәғәт иттек.**

- Ислам динендә билдәләнеүенсә, бөтөн кеше лә мосолман булып тыуа. Әммә артабан ғаиләлә, уны уратып алған мөхит йоғонтоһонда баланың дингә ҡарашы, фитраты үҙгәреүе ихтимал.

Аллаһ Илсеһе - Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (с.ғ.с.) үҙенең мөбәрәк хәҙистәрендә кешенең иманлылығын билдәләгән сифаттарҙы телгә ала. Мәҫәлән, бер хәҙисендә, Ватаныңды һөйөү ҙә - имандың бер өлөшө, тиелә. Тимәк, күңелендә Тыуған иленә ҡарата һөйөү тойғоһо булған патриот кешелә лә иманлылыҡ сифаттары бар.

Шулай уҡ ул таҙалыҡты, сафлыҡты ла, йәғни тәнендә лә, йортондо ла, тирә-яҡ мөхитте таҙа тотоуҙы ла Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (с.ғ.с.) иманлылыҡтың бер өлөшөнә тиңләй. Мәҫәлән, Ислам динендә кешенең һәр ваҡыт тәһәрәтле булыуы ныҡ хуплана. Аллаһ Илсеһе тәһәрәттән бер ваҡытта ла өҙөлмәгән бәндәләрҙең ожмахҡа иң беренселәрҙән булып, еңеллек менән инеүселәр араһында буласағы тураһында әйткән. Шуға ла ихлас мосолмандар тәһәрәттән өҙөлмәҫкә тырыша, изге йома көнөндә мотлаҡ ғөсөл ҡойона, таҙалыҡты һаҡлай.

Аллаһ Илсеһе билдәләүенсә, яҡындарыңа ҡарата булған йылы мөнәсәбәт, ғаиләңә, балаларыңа булған һөйөү ҙә - иманлылыҡтың ҙур бер билдәһе. Сөнки бөтөн нәмәгә һөйөү, мәрхәмәт менән ҡарау - мосолман кешеһенең төп сифаты.

Был йәһәттән Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (с.ғ.с.) менән булған хәл тураһында бәйән итеүсе бер риүәйәт һаҡланған. Бер ваҡыт Аллаһ Илсеһе сәхәбәләргә: "Мосолман кем ул?" - тип һорау бирә. Уларҙың төрлө фараздарын, яуаптарын тыңлағандан һуң: "Мосолман - ул шул хәтлем мәрхәмәтле кеше, - тип яуаплай. - Ул бөтөн йән эйәләренә лә: хайуандарға ла, бөжәктәргә лә, хатта үләндәргә лә, ғөмүмән, үҙенең тирә-яғында булған бар тереклеккә ҡарата ла мәрхәмәтле. Сөнки Аллаһ Тәғәлә бәндәләргә ҡарата шундай мәрхәмәтле", - ти.

Шуның өсөн дә әле намаҙ уҡымаған кешене иманһыҙ тип әйтергә ярамай, был уның иманының камил булыуы йәки булмауының ғына күрһәткесе, иманының ниндәй дәрәжәлә булыуының билдәһе. Сөнки бәндә ғибәҙәт менән генә түгел, ә ғәмәлдәре менән дә һынала. Мәҫәлән, ҡаты күңелле кешенең бер намаҙы ла ҡабул ителмәйенсә, Аллаһ һаҡлаһын, тамуҡҡа эләгеүе, кешеләргә күп изгелек ҡылыусы, әммә намаҙһыҙ кешенең, киреһенсә, ожмахтан урын алыуы ихтимал, Сүбхән Аллаһ! Сөнки бәндәләр тик Аллаһ Тәғәләнең мәрхәмәте менән генә Йәннәткә инер, ти.

Ошонан сығып, мин үҙем өсөн шундай һығымта яһағанмын: мәрхәмәтлелек - ул имандың иң төп күрһәткестәренең береһе булып тора. Әлбиттә, диндә булған, фарыз намаҙҙарын ваҡытында уҡыған, ураҙаларын тотҡан, зәкәттәрен түләгән, Раббыбыҙҙың ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып йәшәргә тырышҡан кеше иманының камилыраҡ, кимәле юғарыраҡ булыу ихтималлығы ҙурыраҡ, йәғни динле булыу камилыраҡ иманға эйә булыу ихтималлығын арттыра.

✔ ***Уҡытыу-тәрбиә эшен ойошторғанда төп иғтибарҙы шуға бирҙем: һәр бала үҙен уҡытыусыһының иң яратҡан уҡыусыһы тип хис итһен. Мин, ысынлап та, уларҙың һәр береһен яраттым.***



ӨЛГӨЛӨ ТӘЖРИБӘ

# УҠЫТЫУСЫ - МИЛЛӘТЕН АЛҒА ӘЙҘӘҮСЕ

**1999 йыл. Быуаттар ғына түгел, мең йыллыҡтар алмашынырға әҙерләнгән дәүер. Өс туғыҙға бөткән ошо йылда, Башҡорт дәүләт педагогия институтын ҡалдырып, 144-се башҡорт ҡала гимназияһына эшкә күстем. Бөгөн ул мәктәп юҡ - уны балалар баҡсаһына биргәндәр. Гимназияның етәксеһе Ирек Ғәлиулла улы Вәлеев, әңгәмәләшкәндән һуң, мине, фәлсәфә фәндәре докторын, башланғыс мәктәп уҡытыусыһы итеп алыуға ризалыҡ бирҙе.**



Шул осорҙа ике генә фән докторының ҡәҙимге мәктәптә башланғыс синыф уҡытыусыһы булып эшләгәнен белә инем. Уларҙың береһе Үҙәк Рәсәйҙә эшләнә. Икенсеһе иһә, атаҡлы Шалва Амонашвили. Өсөнсө булып, уларға Самат Әбдрәхим улы ҡушылып китте. Миңә илле йәш тулғайны шул йылда.

Тәүге осрашҡаныбыҙҙа Ирек Ғәлиулла улы менән ошондайыраҡ әңгәмә булып алды:

- Уҡытыу-тәрбиә эшен ниндәй ҡанундарға таянып ойошторорға ниәтләнәһегеҙ?

- Мин уҡытмаясаҡмын да, тәрбиәләмәйәсәкмен дә - ун бер йыл ғүмеремде балаларым менән бергә йәшәп үткәрәсәкмен.

- Ә ғаиләгә урын юҡмы ни һеҙҙең уҡытыу-тәрбиә ҡанундарығыҙҙа?

- Бар. Тик балалар менән эшкә тотоноп алдынан, ата-әсәләрҙе тәрбиәләргә кәрәк.

- Бындай фекерҙе тәүгә ишетәм. Уны нисек тормошҡа ашырмаҡсыһығыҙ?

- Ата-әсәләрҙең тәүге йыйылышында уларҙы үҙемдең ҡараштарым менән таныштырырға ниәтләнәм. Ниндәй талаптарҙы мотлаҡ үтәүҙең мөһимлеген аңлатмаҡсымын.

- Килешмәүселәр булһа?

- Беҙҙең мәктәптә уҡырға теләгән балалар ике синыфҡа бүленәсәк, тип әйтмәксемен. Кемдәр риза түгел, балаһын икенсе уҡытыусыға бирә ала.

Ун туғыҙ уҡыусы менән башлап ебәрҙем уҡыу йылын. Тәүге өс айҙы мәктәптә хөкөм һөргән тәртиптәрҙән арыныуға бағышланым. Шәмбе көнө балалар уҡырға йөрөмәгән булып сыкты. Уҡыу планын үтәү өсөн өлкән кластарҙа көн һайын ете сәғәт дәрес үткәрергә тура килә был осраҡта. Һуңғы дәрестәрҙе үткәреү бик ауырға төшә. Тағы бер тотҡарлыҡ - байрам көндәре алдынан дәрестәрҙе ҡыҫҡартыу. 40 минут урынына балалар 30 минут уҡыйҙар.

Мин, ата-әсәләр менән кәңәшләшеп, дәрестәрҙе ҡыҫҡартмаҫҡа булдым. Уларҙың күңеленә тәүге тәҡдимем дә оҡшаны: шәмбе көндө лә индереп, аҙнаһына алты көн уҡырға. Ысынлап та, уларҙың күптәренә шәмбе көнө лә эшкә барырға кәрәк - ә баланы кемгә ҡалдырып китергә?

Ниәт менән гәмәл йыш ҡына тап килмәй. Шатланышып, алты көн уҡыуға риза булһалар ҙа, тәүге шәмбелә парта артында ете уҡыусыны күрмәнем. Сираттағы шәмбелә дүрт уҡыусы мәктәпкә килә алманы. "Әгәр талапты үтәй алмаһағыҙ, балаларығыҙ менән хушлашасаҡмын", - тинем ата-әсәләргә ҡатыраҡ тауыш менән. Уларҙан: "Аңланыҡ. Мотлаҡ килтерербеҙ", - тигән яуап ишеттем.

Өсөнсө шәмбелә өс ата-әсә балаларын уҡырға килтерә алманы. Улар менән хушлашырға тура килде. Ҡалған ун алты бала менән башлап ебәрҙем тәүге уҡыу йылын. Уҡытыу-тәрбиә эшен ойошторғанда төп иғтибарҙы шуға бирҙем: ***һәр бала үҙен уҡытыусыһының иң яратҡан уҡыусыһы тип хис итһен.*** Мин, ысынлап та, уларҙың һәр береһен яраттым. Әммә яратыуымдың "тәме һәм еҫе" һәр баланың үҙенсәлегенән сығып билдәләнде. Ҡайһыһын өйгә эштәрҙе ысын күңелдән башҡарыуы, икенсеһен иҙәнде күңел биреп йыуғаны, өсөнсөһөн иптәштәренә ярҙам итергә әҙер генә торғаны өсөн яратам, тип маҡтаным. Дәртләндереү һүҙҙәрен һәммәһе өсөн дә таптым. Әйтелгәндәрҙе тыңлап, ҡыҙҙарым-малайҙарым өлгөлө уҡыусыларға оҡшарға тырыштылар. Балаларым менән һигеҙ йыл эшләү осоронда бер мәртәбә лә тауышымды күтәрмәнем, ата-әсәләргә улар тураһында бер насар һүҙ ҙә әйтмәнем.

Икенсе класҡа күскәс, уҡыусыларым, үҙ теләктәре менән, июнь айында ла уҡынылар. Уҡыу йылы башланырға ун-ун биш көн ҡалғас, өйгә шылтырата торғайнылар: "Самат ағай, әйҙәгеҙ, уҡыуҙы алдараҡ башлайыҡ. Ял итә торғас, хәл бөттө!" Бишенсегә күскәс, ата-әсәләр менән кәңәшләшеп, уҡыуҙы йыл һайын 1 сентябргә бер аҙна ҡалғас башлап ебәреүҙе ғәмәлгә индерҙек.

Уҡытыу-тәрбиә эшен башланғыс мәктәп уҡытыусыһы сифатында башлаһам да, бишенсе синыфта математика фәнен алып барҙым, физкультуранан уҡыттым, класс етәксеһе вазифаһын да башҡарҙым. Балаларҙы мөмкинлектәренән сығып уҡытырға ынтылдым, әммә һәр береһенән тырышлыҡ талап иттем. Һәммәһен дә шәхес булараҡ ҡурсаланым - исем тағышыуҙы ҡәтғи рәүештә тыйҙым, өлкән синыф уҡыусыларының насар мөғәмәлә итеүенә юл ҡуйманым.

Балаларға дәүләт талап иткән белем кимәлен биреүҙе тәүге урынға ҡуйһам да, төп маҡсатым Башҡортостаныбыҙҙың, илебеҙҙең ысын граждандарын тәрбиәләү булды. Балаларыма, уларҙың ата-әсәләренә, аралашҡанда, түбәндәге саҡырыуҙың мәғәнәһен төшөндөрөргә ынтылдым: ***"Күңелем ятмаһа ла, кәрәкле эште башҡарам; бик теләмәм дә, насар эштән баш тартам".***

Алты-ете йәшлек балаларымды ялҡаулыҡ менән көрәшергә өйрәттем. Уларҙың һәр береһенә көслө ҡорал тотторҙом - уның исеме ***ихтыяр.*** Ҡылысҡа ла оҡшамаған ул. Айбалта ла түгел. Кеше күҙенә күренә торған әйбер араһында табып булмай уны. Аң менән тәндең айырылмаҫлыҡ булып ойошоуы һөҙөмтәһендә ярала ошо иң көслө ҡорал. Балала ихтыяр көсөн тәрбиәләүгә ярҙам иткән иң яҡшы мөхит - физкультура дәресе. Бына шуға ла аҙнаның алты көнөнөң һәр береһендә урамға сыҡтыҡ, сөнки мәктәптең спорт залы булманы. Ямғыр яуғанда дәресте коридорҙа үткәрергә тура килде.

Дәресте хәрбиҙәрсә йөрөү күнекмәләренән башлап, шунан мәктәп тирәләй йүгереүгә күсә торғайныҡ. Һуңғыһын һәр кемдең хәленә ҡарап ойошторҙом. Иң әҙерлекле балалар тәүҙә ярты саҡрым самаһы араны йүгереп үтте, күпселеге иһә 300-400 метр ара менән сикләнде. Ике йыл да үтмәне, балаларымдың бөтәһе лә бер саҡрым араны еңел йүгереп үтә башланы. Һәр дәрестә мотлаҡ сүгәләп атлауҙы тормошҡа ашырҙым, сөнки енси органдарҙы үҫештереү өсөн унан да көслөрәк ысул юҡ.

Йәшерен-батырыны юҡ: ҡыҙҙарым да, малайҙарым да түҙемһеҙлек менән дәрестең төп өлөшөн - уртаға бүленеп, футбол уйыны башланыуын - көттө. Туп тибеп уйнау ҙа балаларымдың киләсәктә түлле әсә, көслө ата булып үҫешеүен тәьмин итеү маҡсатында ойошторолдо. Уҡыусыларым алтынсы синыфҡа уҡырға килгәс, һөйкөмлө ҡыҙҙың тыуған көнөндә, ***кәм тигәндә һинең дүрт балаң булһын,*** тигән теләк әйттем.

Ата-әсәләр менән кәңәшләшеп, тыуған көндө үткәреүҙе ойоштороуҙың тәртибен билдәләнек. Торт, шоколад, прәник, вафли кеүек ризыҡтарҙан баш тартып, һәр балаға таратып бирерлек йә алма, йә груша, йә әфлисун алып килеү яҡшы булыр, тип килештек. Балаһының байрамын ойоштороусы ата-әсә газлы һыу, пепси, кола кеүек эсемлектәр килтермәһен, тигән талап та ҡуйҙыҡ.

Һәр тыуған көн байрамын үткәргәндә, дүрт-биш бала ҡотлау һүҙҙәре әйтте. Бер ҡыҙ уларҙың исемдәрен ҡағыҙға теркәп барҙы, сөнки һәр баланың телмәр әйтеүенә өлгәшеү ине маҡсатым. Иң һөйөндөргәне шул булды: ҡотлау һүҙе менән сығыш яһаған һәр уҡыусы, ***кәм тигәндә һинең дүрт балаң булһын*** тип, теләк әйтеүҙе үҙенең бурысы кеүек ҡабул итте.

"Самат Әбдрәхимович, шул тиклем баланы ашата-эсерә алырҙармы һуң улар ҙурайғас?" - тип шик белдерҙе ике әсә, ошо хәбәр ғаиләләренә барып еткәс. "Баҡмал өләсәйем әйтә торғайны: кем сабыйҙың ауыҙын йырған, шул уға емен дә бирер", - тип яуапланым мин, йылмайып. Улар аптырағандай булды, әммә һүҙҙәремә ҡаршы төшмәне.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Баҡса килейеге
**(Садовая славка)**



Арҡаһы йәшкелт, ҡорһағы асыҡ көл төҫөндә. Йыры - һыҙғырыуҙарҙан тора, ҡоро килейеккә ҡарағанда тауышы ҡалыныраҡ кеүек, һайраған саҡта тау шишмәһе сылтырағаны һымаҡ ишетелә. Осоп барғанда бер ҡасан да һайрамай. "Тәк" тип шым ғына саҡыра.

Һоро килейек менән күршеләш булып йәшәй, шулай ҙа баҡса килейеге ҡыуаҡлыҡтарҙың бейегерәген һайлай, хатта урманда йәшәүе лә ихтимал. Ҡала баҡсаларында осратырға ла була. Төбәктә бөтөн ерҙә лә бар.

## Ҡарабаш килейек
**(Славка-черноголовка)**



Башҡа килейектәр кеүек төҫтә, бары тик ата ҡоштоң башында ҡара башлығы бар, инә һәм йәш ҡоштарҙа был "башлыҡ" ерән-һоро.

Япраҡлы һәм ҡатнаш ҡуйы урмандарҙа, баҡсаларҙа, парктарҙа йәшәй. Һайрауы баҡса килейегенеке кеүек, ҡабаланмай, яйлап ҡына йырын һуҙа, тауышын ярайһы түбән ала, флейта һыҙғырған кеүек матур тауыштар ишетелә. Йырлауҙан туктағас, ҡарабаш килейек бер ни тиклем ваҡыт арауығында саҡ ишетелерлек итеп "тре...тре...тре" тип ҡабатлай. "Чек" тип ҡырҡыу ғына ҡысҡыра. Ҡайһы саҡта ҡарабаш килейек менән баҡса килейеге ярышып йырлаған кеүек йәнәш һайрай, был ваҡытка тура килгән кеше бик моңло концерт тыңлай алыуы менән бик бәхетле буласаҡ.

## Сыбар килейек
**(Ястребиная славка)**



Килейектәр араһында иң эреһе, турғай ҙурлығында. Арҡаһы көл төҫөндә (йәш ҡоштарҙыҡы - көрән), ҡорһағы асыҡ төҫтә, ҡарсығаларҙыҡы кеүек буй-буй һыҙыҡтар менән биҙәлгән. Һайрауы - өҙөк-өҙөк һыҙғырыуҙарҙан тора, "че-че-че" тип ҡысҡырыуы нимәһе менәндер ваҡ һайыҫҡанды ла хәтерләтә.

Ағастары һирәгәйгән урмандарҙы үҙ итә, ҡыуаҡлыҡтар баҫҡан урындарҙы ярата. Башҡортостан территорияһында һирәк осрай торған ҡош, беҙҙең төбәк сыбар килейектәр популяцияһы таралған ерҙең төньяҡ сиген алып тора. Беҙ сыбар килейекте 1967 йылда Шишмә районында, Өфөнөң Ғафури исемендәге паркында осратҡаныбыҙ булды.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҠАН ТӨРКӨМӨҢ НИНДӘЙ?

**Табиптар раҫлауынса, кеше ҡаны медиктар өсөн һандар һәм күрһәткестәр таблицаһы ғына түгел, ә организмдың үҙенсәлекле бер шифры, һаулыҡ торошоноң көслө һәм "йомшаҡ" яҡтарын асып биреүсе асҡыс та ул. Ҡан төркөмдәренең һаулыҡ, оҙайлы ғүмер, кәйеф һәм хатта стресс менән көрәшеүҙәге әһәмиәте хаҡында булыр был яҙма.**



***1-се төркөм:*** ныҡлыҡ һәм энергия. Был төркөм ҡеүәтле һаҡсыһы булған нығытма - крепость кеүек, ти табиптар. Эритроциттарҙа антигендар юҡ һәм был иһә кеше өсөн етди өҫтөнлөк: ҡан ойошоу кимәле түбән һәм шул сәбәпле былдай кешеләрҙә инсульт йә инфаркт ихтималлығы 10-15 процентҡа кәмерәк, тип раҫлай япон һәм америка кардиологтары. Бынан тыш, 1-се төркөмдөң иммун системаһы йөгошло вирустарға нығыраҡ ҡаршы тора ала һәм сирләгән хәлдә лә кеше тиҙерәк һауыға. Тик шулай ҙа был төркөмдөң Helicobakter pylori бактерияһына бирешеүсәнлеге кеүек үҙенсәлеге лә бар, үкенескә. Гарвард ғалимдары билдәләүенсә, аҡһым: ит, балыҡ, диңгеҙ ризыҡтары менән үҫемлек ризыҡтарының тигеҙлеген һаҡлау ашҡаҙан сәләмәтлеген контролдә тоторға, мускулдарҙы, иммунитетты нығытыуға булышлыҡ итә. Шулай итеп, 1-се төркөмдөң иммун ныҡлығы туҡланыу һәм йәшәү рәүеше аша өҫтөнлөккә ирешеү юлы ул.

***2-се төркөм:*** социаль гармония һәм эске хәстәрлек, йәғни был төркөм кешеләр ысын мәғәнәһендә социаль яраҡлашыу миҫалы булып тора. Уларҙың организмында күҙәнәклек кимәлендә антигендар бар, улар йөгошло бактерияларға кәртә була алһа ла, иммун системаға көсәргәнеш тыуҙыра. Был иһә диабет, ревматоидлы артрит кеүек аутоиммун сирҙәр ихтималлығын көсәйтә, тип белдерә япон иммунологтары. 2-се ҡан төркөмө эйәләре хроник елһенеүҙәргә бирешеүсән, шуға күрә лә ял итеү, үҙенде күберәк хәстәрләү һәм хис-тойғо тигеҙлеген һаҡлау мотлаҡ шарттарҙың береһе. Итте йыш ашамаҫҡа, күберәк күҙәнәклек (клетчатка), йәшелсә һәм емеш-еләк ҡулланыу кәрәк, шулай уҡ ҡуҙаклы һәм бөтөүлә иген продукттарына өҫтөнлөк биреү эсәк микробиотикаһын яҡшыртыуға булышлыҡ итәсәк. Каролина институты тикшеренеүселәре раҫлауынса, социаль әүҙемлек, дөрөҫ туҡланыу был төркөм кешеләренең сәләмәтлек сифатын тәьмин итеп, оҙаҡ йәшәүгә булышлыҡ итә.

***3-сө төркөм:*** стресҡа ҡаршы тороусанлыҡ һәм һығылмалыҡ. Был кешеләр тормош шарттарына яраҡлаша алыуҙары менән билдәле, улар психологик һәм физик көсәргәнештәрҙе еңелерәк кисерә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был төркөм стресс осорҙарында ҡан баҫымы һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән һирәгерәк яфалана. Уларҙың гормондар системаһы кортизолды яҡшыраҡ көйләй, ә был аҡыл айыҡлығын һәм хис-тойғо тигеҙлеген һаҡлай. Ғалимдар 3-сө төркөм эйәләренә һәүетемсә физик әүҙемлек һәм туҡланыу тигеҙлеген һаҡларға кәңәш итә: улар был шарттарҙың стресҡа бирешмәүсәнлекте һәм елһенеү сирҙәре хәүефен кәметеүгә булышлыҡ итеүен иҫбатлаған. Һөт ризыҡтарына өҫтөнлөк организмда кальций тигеҙлеген һаҡлап, һөйәктәрҙең ныҡлығына булышлыҡ итә, остеопороздан һаҡлай. Ял һәм эш араһында тигеҙлек - был төркөмдөң сәләмәт тормош нигеҙе.

***4-се төркөм:*** хисселек һәм нескә энергия. Был төркөм иң һирәк осрай торған серле кешеләр. Улар Ер шары халҡының ни бары 4-6 процентын тәшкил итә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, улар эске һәм тышҡы үҙгәрештәргә юғары һиҙгерлектәре менән айырылып тора. Иммун системалары хроник сирҙәргә тиҙерәк бирешеүсән, шул уҡ ваҡытта хис-тойғо тотороҡһоҙлого йөрәк һәм ҡан тамырҙары проблемалары тыуҙырыуы мөмкин. Был кешеләр туҡланыу аҙыҡтарына ла бик һиҙгер; уларҙың хәүефләнеүсән холҡо йөрәк-ҡан тамырҙары сире килтереп тыуҙырыуы мөмкин. Шуға ла 4-се ҡан төркөмө эйәләренә табиптар сәләмәт йәшәү рәүешен, хис-тойғо ныҡлығын һаҡларға тырышырға һәм ижади әүҙемлек шарттарында йәшәргә кәңәш итә.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА**
**әҙерләне.**

АЛДАЙҘАР!

# ҺАМАН АЛДАНАЛАР



● **Өфө ҡалаһының Дим районы прокуратураһына бер кеше мутлашыусылар ҡорбаны булыуы тураһында мөрәжәғәт итә.** Прокуратура тикшереүе һөҙөмтәһендә шул билдәле булды: 2025 йылдың июлендә 68 йәшлек ирҙең пенсияһын ҡайтанан иҫәпләү һылтауы менән пенсия ойошмаһы вәкилдәре тип танышҡан билдәһеҙ кешеләр уның 780 мең һумлыҡ аҡсаһын урлаған. Тикшереү күрһәтеүенсә, ғариза биреүсенең аҡсаһы 49 йәшлек Татарстан Республикаһы кешеһе иҫәбенә күсерелгән, ул үҙенең мәғлүмәттәрен енәйәтселәргә тапшырған. Прокуратура судҡа дропперҙан законһыҙ алынған сумманы түләтеү тураһында дәғүә ғаризаһы ебәрә. Суд прокуратураның дәғүә талаптарын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә.

● **Башҡортостан Республикаһы прокуроры урынбаҫары С.С. Воротынцевтың Өфө ҡалаһы Дим районы прокуратураһында үткәрелгән шәхси ҡабул итеүендә бер ҡатын уға ҡарата мутлашыу менән бәйле уның хоҡуҡтарын яҡлауҙы һорап мөрәжәғәт итә.** Ошо факт буйынса Өфө ҡалаһының Дим районы прокуратураһы тикшереү үткәрҙе. Инвестиция майҙансығы менеджерҙары булып танытҡан билдәһеҙ кешеләр, интернет селтәрендә аҡса эшләү һылтауы менән, 2024 йылдың ноябренән декабренә тиклем 69 йәшлек ҡатындың 5 миллион 164 мең һумлыҡ аҡсаһын урлаған. Был факт буйынса енәйәт эше ҡуҙғатыла. Тикшереү аҡса 39 йәшлек Ҡалмыҡ Республикаһы кешеһе иҫәбенә күсерелеүен күрһәтә. Прокуратура судҡа дропперҙан аҡсаны ҡайтартыу тураһында дәғүә ғаризаһы бирә. Прокурор позицияһын иҫәпкә алып, суд дәғүә талабын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә. Суд ҡарары үтәлеше ведомство контролендә.

● **Тәфтиш версияһы буйынса, 2025 йылдың июлендә ғәйепләнеүсе ойошҡан енәйәт төркөмө ағзалары менән интернет селтәрендә яҙышыу барышында төрлө һылтау менән оло йәштәге граждандарҙан аҡса алыу буйынса "курьер" ролен үтәргә, урланған аҡсаны артабан цифрлы валютаға күсерергә ризалыҡ бирә.** Ошо ысул менән 2025 йылдың августында юғары уҡыу йорттарының береһендә уҡып йөрөгән студент ойошҡан төркөм составында эш итеп, өс зыян күреүсенән 2,6 миллион һумдан ашыу аҡса урлай һәм енәйәт төркөмөнөң электрон янсығына аҡса һала. Ғәйепләнеүсе енәйәттәрҙә ғәйепле булыуын өлөшләтә таный, килтерелгән матди зыянды тулыһынса ҡаплай. Енәйәт эше, ҡарау өсөн, Өфө ҡалаһының Дим район судына ебәрелгән.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 март "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+
**21 март "Ете быуын. Йәштәр"** (Р. Харисова). 16+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 март "Всегда один"** (А.Полярков, Э. Шрайнер), трагифарс. 16+
**21 март "Волшебная мельница"** (М. Кәроим), әкиәт. 11:00. 0+
**21 март "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович, М. Күлбаев), комедия. 18:00. 12+
**22 март Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский, Р. Хакимов), мюзикл. 12:00. 0+
**22 март "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 14:00. 12+
**23 март "Аҡбуҙат"** (З. Буракаева инц., И. Ҡаҙаҡбаев), фэнтези. 12+
**24 март "Дядя Ваня"** (А.Чехов, Д. Акимов), Стәрлетамаҡ ҡалаһының дәүләт рус драма театры спектакле. 16+
**25 март "Играем Пушкина: Царевна-Лебедь"** (А. Пушкин, О. Мусина), әкиәт. 11:00. 6+
**25 март "Я - кулак. Я А-Н-Н-А"** (М. Райцес, О. Мусина). 19:00. 12+
**26 март "Алые паруса"** (А. Грин, М. Күлбаев), романтик фантазия. 12:00. 12+
**26 март "Планета"** (Г. Гришковец, М. Күлбаев), пьеса. 19:00. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20 март "Путь Победы"** (Д. Ғәрәева, К. Баязитова). 12:00. 6+
**20 март "Руслан и Людмила"** (А.Пушкин). 14:00. 6+
**20 март "Снеговик и Солнышко"** (А.Малахов). 18:00. 0+
**21 март "Снеговик и Солнышко"** (А.Малахов). 11:00 һәм 14:00. 0+
**21 март "Красная шапочка"** (Д. Гараева).12:00 һәм 15:00. 0+
**22 март "Почему весна красна?"** (В. Щербакова).11:00 һәм 14:00. 0+
**22 март "Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 12:00 һәм 15:00. 0+
**26 март "Любовное приключение"** (В.Аношкин). 19:00. 16+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 март "Вам письмо..."** Мария Матвейчуктың шиғриәт кисәһе. 12+
**22 март Ирек Ноғомановтың** концерты. 12+
**26 март Венера Рәхмәтуллинаның** юбилей кисәһе. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**21 март "Кошкин дом"** ( С. Маршак). 0+
**24 март "Кисер мине, әсәй!"** (Р. Батулла), моңһоу комедия. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**26 март "Голос души моей"**, музыкаль-әҙәби лекторий. 6+

## А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**25 һәм 26 март "Өҙөлгән өмөт"** (Н.Асанбаев), драма. 16+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**20 март Усмановтарҙың** концерты. 6+

## БР Милли музейы

**20 март "Кейеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+
**21 март "Каждый при своем!"** Ер кодексын ҡабул итеүгә 40 йыл айҡанлы лекция. 13:00. 12+
**26 март "Боронғо батшалар алтыны"** лекторийы. 15:00. 12+

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# "ТЕАТР ЯҘЫ" САҠЫРА




**20-27 мартта Өфөлә төбәктең театр коллективтарын, алдынғы сәхнә оҫталарын һәм киң тамашасы аудиторияһын берләштергән "Театр яҙы" республика фестиваль-форумы үтә.**

Фестивалдең төп маҡсаты - республиканың театр сәнғәтен һаҡлау һәм үҫтереү, профессиональ бәйләнештәрҙе нығытыу һәм сәхнәнең көнүҙәк тенденцияларын асыҡлау. Форум актерҙарҙы, режиссерҙарҙы, рәссамдарҙы, драматургтарҙы, тәнҡитселәрҙе һәм театр эшен ойоштороусыларҙы берләштерә, тармаҡтың киләсәге тураһында стратегик диалог өсөн майҙансыҡ булып тора. Тамашасы һәм ҡатнашыусылар өсөн ысын театр байрамы булдырыу - уның айырым миссияһы.

"Театр яҙы" 20 мартта Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры сәхнәһендә Айрат Абушахманов ҡуйған "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем" спектакле менән башлана. Беренсе фестиваль көнөнөң көндөҙгө программаһы йәш тамашасыларҙы Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының Александр Пушкиндың билдәле поэмаһы буйынса ҡуйылған "Руслан һәм Людмила" спектакле менән ҡыуандырасаҡ.

Артабан Өфө сәхнәләрендә республика театрҙары үҙҙәренең спектаклдәрен ҡуя: И. Йомағолов исемендәге Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры - "Өлкән ул"; М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры - "Спасите Леньку!", "Аҡбуҙат"; А. Мөбәрәков исемендәге Сибай Башҡорт драма театры - "Ҡанатлы генерал"; Сибайҙың "Сулпан" балалар театры - "Герой"; Салауат Башҡорт драма театры - "Мөхәббәт көсө" һәм башҡалар.

Спектаклдәрҙе баһалау һәм фестиваль лауреаттарын билдәләү өсөн, жюри ағзаларының да үҙ өҫтөнә алған эксперт советы булдырылған. Уға абруйлы театр тәнҡитселәре һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре ингән. Фестивалдең белем биреү һәм эшлекле программаһы профессиональ лабораторияларҙы һәм оҫталыҡ дәрестәрен үҙ эсенә ала. Улар М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында һәм Актерҙар йортонда үтә.

"Театр бөгөн һәм иртәгә" түңәрәк өҫтәле һәм Башҡортостан Республикаһының "Режиссерҙар советы"ның беренсе ултырышы эшлекле программаның мөһим өлөшө буласаҡ. Уларҙың модераторы - М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры директоры Зиннур Сөләймәнов. "Театр яҙы" фестивале Башҡортостандың хәҙерге театры нимә менән йәшәүен, режиссерҙарҙы һәм актерҙарҙы ниндәй темалар борсоуын, бөгөн сәхнә үҫешен ниндәй художестволы эҙләнеүҙәр билдәләгәнен күреү мөмкинлеген бирә. Беҙҙең өсөн республиканың театр йәмғәтселеген берләштереү һәм ижади аралашыу мөхитен булдырыу мөһим. Фестиваль профессионалдар өсөн дә, тамашасылар өсөн дә сағыу ваҡиға булыр, тип ышанам", - ти ул.

Фестивалде ябыу тантанаһы 27 мартта - Халыҡ-ара театр көнөндә - була.

**Элиза СЫНБУЛАТОВА.**

# ЫСЫН ҺӨЙӨҮ ШУЛАЙ БУЛАМЫ?

**25 мартта Салауат башҡорт дәүләт драма театры Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның "Һөйөү көсө" спектакле менән Өфөгә "Театр яҙы" фестиваленә килә.**



Пьесаның төп геройҙары - тәрлә һынауҙарға дусар булған ике ғашиҡ йөрәк: Беренсе донъя һуғышында немецтарға әсирлеккә эләккән башҡорт егете Сәйфетдин һәм уның һөйгәне, немец ҡыҙы Франциска. Егет ҡыҙға Башҡортостанда Германияларға кеүек матур тормош көтмәүен аңлатырға тырышһа ла, мөхәббәттән күҙҙәре томаланған Франциска быны ишетергә лә теләмәй. Ләкин аслыҡ, яланғаслыҡ хөкөм һөргән төбәктә йәшәй башлау менән ул хаталанғанын аңлай, ғазаптарға дусар була, тыуған яғын, атаһын һағына. Тормош ҡапма-ҡаршылыҡтары, менталитет тәрләлегә, социаль тигеҙһеҙлек конфликттарҙы ҡуйырта. Тик ысын мөхәббәт кенә ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам итә. Спектакль күңелдең иң нескә ҡылдарын сиртә, илата ла, көлдөрә лә. Тамашала театрҙың күп артистары йәлеп ителгән, тиерлек. Төп ролдәрҙә: Сәйфетдин - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рафаэль Ғәйнуллин, Франциска - актриса Гөлкәй Хәсәнова, Сәйфетдиндең әсәһе Хәлимә - Башҡортостандың халыҡ артисы Нәүфилә Яҡупова.

- Пьеса ысынбарлыҡтағы ваҡиғаларға таянып яҙылды. Эш барышында төп геройҙарҙың ейән-ейәнсәрҙәре, бүләләре менән аралаштым. Хатта Франциссканың ҡыҙы менән дә һөйләшеү форсаты тейҙе. Әңгәмәләшкән ваҡытта ул ғүмер буйы әсәһенең тыуған яғына барып ҡайтыу хыялы менән яныуын әйтте. Сәхнәлә донъя күргән был әҫәрем өсөн Салауат театрына сикһеҙ рәхмәтлемен. Режиссер Зиннур Сөләймәновтың, актерҙарҙың сәхнәгә, сәнғәткә бирелгәнлеге, таланты һоҡландырҙы. Уларҙың оҫталығы менән ысын мөхәббәттең ниндәй көскә эйә булыуы иҫбат ителде, - тип уртаҡлашты пьеса авторы, драматург, Шәйехзада Бабич исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Тәнзилә Дәүләтбирҙина.

Салауат театры сәхнәһендә үткән премьераға төп геройҙарҙың ейән-ейәнсәрҙәре, бүләләре, туғандары килеүе айырыуса тулҡынландырыу булды. Зал ҡунаҡтарҙы аяғүрә баҫып алҡышланы. Улар йыраҡ араларҙы яҡынайтып республикабыҙҙың, илебеҙҙең төрлө мөйөштәренән, хатта Ҡаҙағстандан килеп еткәйне.

- Пьесала яҙылған тетрәндергес тарихтың сәхнәлә донья күреүен оҙаҡ көттөк. Ниһайәт, хыялыбыҙ тормошҡа ашты. Күлгән ерҙә көлдөк, илап та алдыҡ. Өләсәйле-олатайлы ваҡыттар йәнә күҙ алдынан уҙҙы, шул тиклем тулҡынланып ҡарап ултырҙыҡ. Пьеса авторына, режиссерға, артистарға ҙур рәхмәт, - тине улар сәхнәгә сығып телмәр тотҡанда.

- Өләсәйемде яҡшы хәтерләйем, - тип һөйләп китте Францисканың Салауат ҡалаһында йәшәүсе ейәнсәре Нажия Кәримова.- Бәләкәй буйлы ине, бик талапсан булды. Сәйфетдин олатай менән улар дүрт балаға: бер ҡыҙ һәм өс малайға ғүмер биргән. Мин - уртансы улдары Ғизетдиндең ҡыҙы. Өләсәйемдең яҙмышы ябайҙан булмай. Ҡатмарлы шарттарға ҡарамайынса, ул Башҡортостан ерендә берегеп, башҡорт халҡының телен, динен, йолаларын ҡабул итеп, үҙ кешеһе булып китә. Был, ысынлап та, сихри һөйөү көсөләр. Ул яҡты донъяларҙан киткәндә миңә 8 йәш ине. Йөрәк өҙгөс тарихты сәхнәләштергән өсөн Салауат театрына рәхмәтлебеҙ. Спектакль бер тынала ҡаралды, актерҙар шәп уйнаны, - ти Нажия апай.

**Әйткәндәй, спектакль 25 март киске сәғәт 7-лә М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә уйналасаҡ. 12+**

**Динә БӘШИРОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮҢЕЛДӘ БАР...

## телгә килер

Исемең шәп булһын, ырыуыңа тап килһен; ырыуыңа тап килмәһә, оранына тап килһен.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡһаҡал бай ғына йортҡа барып инә һәм әллә ни әһәмиәте булмаған әйберҙәр араһында алтын тышлы, ынйы менән биҙәлгән китап күреп ҡала.**

**- Ошо китапты ҡарарға мөмкинме?- тип һорай ул хужанан.**

**- О-о, был бик ҡиммәтле китап! Һаҡ ҡына тотон инде...- ти хужа кеше.**

**- Мин китаптан башҡа бер ни менән дә ул тиклем һаҡ тотонмайым... - тип хужаны тынысландыра аҡһаҡал. - Минең өсөн донъяла аҡыллы китаптан да ҡәҙерлерәк бер нимә лә юҡ. - Китаптың бер нисә битен асып ҡарағандан һуң, ул тағы ла былай тип өҫтәй: - Был китап, ысынлап та, баһалап бөткөһөҙ ҡиммәткә эйә. Һеҙ был хазинаны ҡайҙан алдығыҙ?**

**- Мин уны сәйер генә бер кешенән һатып алдым, - ти хужа. - Ул ошо хазинаны ижад итеү өсөн бар байлығын тотоноуы тураһында әйтте. Тағы ла ул былай тине:"Китаптың ҡиммәте бик юғары, шундай заман килер - был китап өсөн тотош байлығын бирергә әҙер булырҙар". Мин ҡыҙыҡһын китеп, кеҫәмдә булған ғына аҡсаны биреп, уны һатып алдым. Миңә уңыш йылмайҙы, был китаптың яҙмышын хәл иткәндә мин, әлбиттә, уның өсөн бик ҙур байлыҡ һораясаҡмын...**

**Аҡһаҡал китаптың тағы бер нисә битен асып ҡарай һәм ҡапыл ҡысҡырып ебәрә:**

**- Был китап бит иң билдәле бер аҡыл эйәһенеке. Бында уның иң ҡиммәтле һүҙҙәре тупланған. Был, ысынлап та, Аҡыл һандығы! Ошондай хазинаның хужаһы икәнһең, һин - бәхетле кеше!**

**- Эйе, мин был китап өсөн үҙем биргәндән мең тапҡырға күберәк аҡса аласаҡмын икәненә ышанам, - ти бай аҡһаҡалдың һүҙҙәренән тағы ла нығыраҡ рухланып.**

**- Китапты уҡып сыҡһаң, ул һине байытып ҡына ҡалмаясаҡ, ә донъялағы иң көслө кеше итәсәк... - ти аҡһаҡал.**

**- Ләкин мин уҡый белмәйем... - ти хужа.**

**- Уҡырға өйрән һуң! - ти аҡһаҡал хужаны аҡылға килтерергә теләп.**

**- Минең уйымса, был китапты һатыуҙан килгән байлыҡ миңә былай ҙа донъяны уларға, һатып алырға етәсәк... - шулай ти ҙә хужа, китапты аҡһаҡалдың ҡулынан алып, күренеп торған урынға һөйәп ҡуя. - Минең ниндәй байлыҡҡа эйә булыуымды барыһы ла күрһен! - ти ул шундай ғорурлыҡ менән.**

**"Шундай байлыҡтың шундай кеше ҡулында булыуы йәл, - тип уйлай аҡһаҡал. - Аҡыл инйыһы уның юлын яҡтыртмай, күңелен байытмай, тормошон биҙәмәй, ғәҙәти тормоштан юғарыраҡ күтәрмәй, уның исемен данламай. Ҡалай йәл!" Шундай әсенеү менән аҡһаҡал туҙанлы кәштәлә ятҡан Алтын тормош китабына эйә иҫәр байҙың өйөнән сығып китә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99
**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 19.03.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 19.03.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 20.03.2026 й.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 488

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.